ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 сентябрь (нарысай)

2020

№38 (924)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Атта ла, тәртәлә лә...
ғәйеп барҙыр




3

Асылмаған серҙәр күп




7

Турист та, юрист та бул!



8-9

Милли кейемгә...
эске ихтыяж етерлек хәҙер



12-13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Сентябрҙән 2021 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө" аҙналығына республиканың һәр район-ҡалаһында, ауылында 725 һум 58 тингә яҙылып, дуҫлыҡты дауам итергә саҡырабыҙ. Бер-беребеҙгә кәрәкле, бер-беребеҙгә терәкле фекер уртаҡлашыусылар булайыҡ!***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә ашырыу, республика халыҡтарының башҡорт мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныуын арттырыу өсөн бик аҙ ғына - етәкселәребеҙҙең илтифаты һәм иғтибары ла етә...*

***Зөлхизә ӘБДРӘЖӘПОВА, Мәләүез ҡалаһы:*** Туған тел - ул милләтте йәшәткән, уның булмышын һаҡлаған, киләсәккә күпер һалған рухи ҡиммәттәрҙең береһе. Халҡының асылын ҡәҙерләгән, телен мөһим йәшәү сығанағы итеп таныған, уға ғорурлыҡ һәм ихтирам менән ҡараған шәхескә башҡаларҙың ошо телгә иғтибары, әлбиттә, уның күңелендәге иң нескә тойғоларын уятыуға сәбәпсе була. Тел - тере шишмә тиҙәр, уны ҡәҙерләгән, аңлаған, яратҡан кешегә дауа һәм көс сығанағы ла ул. Бөгөнгө ябай булмаған ысынбарлыҡ шарттарында ул рухи ҡиммәт сигенән сығып, әхлаҡи күрһәткескә әйләнеп бара, сөнки теге йәки был телгә ҡарата ихтирам, толерантлыҡ, шул уҡ хуш күңеллелек һәм күп милләтле республика халыҡтары үҙ-ара һыйышып йәшәүе менән тығыҙ бәйле.

Башҡортостан Республикаһында ике дәүләт теле бар. Улар икеһе лә бер үк хоҡуҡҡа эйә. Күптән түгел республика Хөкүмәте вице-премьеры Фәнүр Йәғәфәровтың республика Хөкүмәтендә үткән кәңәшмәлә Башҡортостан халыҡтарының милли кейем көнөнә әҙерлеге тураһында башҡортса сығыш яһауы туған телен һөйгән, туған телен ҡәҙерләгән һәр кешенең күңеленә май булып яғылғандыр, тип уйлайым. Был яңылыҡ республикала йәшәгәндәрҙең барыһының да иғтибарын йәлеп иткәндер, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаç. Быға тиклем дә Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырыштарында ҡайһы бер депутаттарҙың башҡортса сығыш яһауы, хатта бер-ике ауыҙ һүҙ генә әйтһәләр ҙә, ҙур тулҡынланыу менән ҡабул ителде. Ошондай уҡ тулҡынландырғыс хис-тойғоно Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында венгр ғалимы Йозеф Торманың башҡорт телендә сығышын ишеткәндә кисергәйнем.

Власть органдары вәкилдәренең туған телдә сығыш яһауы, халыҡҡа мөрәжәғәт итеүе бик ыңғай һәм шатлыҡлы күренеш. Һүҙ ыңғайында шуны әйтеп китеүҙе лә кәрәк тип табам: күрше Татарстан республикаһында президенттарынан башлап, уларҙың власть органдарында эшләгән кешеләре төбәк халҡына үҙ телендә мөрәжәғәт итеүенә һоҡланып, хатта йәшермәйем, бер аҙ көнләшеү тойғоһо менән тыңлайым. Беҙҙә лә шулай булһын ине, тиеп теләйем. Үҙ республикаһы халҡының йөрәгенә, күңеленә юл эҙләгән дәүләт етәксеһе шул халыҡ телендә мөрәжәғәт итергә, һөйләшергә генә түгел, улар кисергәнде кисерә, тойғанды тоя белергә тейештер, минеңсә.

Телдең ҡулланыу даирәһен киңәйтеү өсөн гранттар булдырыу, Башҡорт теле йылын иғлан итеү менән бер рәттән, һис шикһеҙ, бөтә халыҡтың ошо телдә иркен һөйләшеүен тәьмин итергә кәрәктер. Төрлө кимәлдәге ултырыштарҙа бер кеше һөйләй, араһында бер нисә кеше генә аңлай. Күпселектең аңлауын бойомға ашырһаҡ, бик тә яҡшы булыр ине...

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Өфө ҡайҙа? Өфө Ағиҙел буйында, тау башында. Эйе, көньяҡ ҡапҡанан беҙ баш ҡалаға Ағиҙел күпере аша, бейек йорттарға, мәсет манараһына, мөһабәт булып ҡалҡып ултырған Хөкүмәт йортона, арыраҡ иһә Салауатыбыҙ һәйкәленә үрелеп бағып, һоҡланыулы күҙ уҡтарын атып, гүзәллектән күңел ирәйеп килеп инәбеҙ. Хәҙер иһә ирәйергә тағы бер шәп сәбәп, дөрөçөрәге, күренеш хасил булды - Ағиҙел буйы заманса стилдә төҙөкләндерелде, юлдар, объекттар һалынды...**

# АҒИҘЕЛДЕҢ БУЙЫНДА...



Төҙөкләндереүҙе дауам итеп, яр буйындағы объекттарҙы халыҡҡа хеҙмәт иттереү, уларҙы баш ҡала халҡының һәм ҡунаҡтарҙың ихтыяжына тап килтереү эштәре Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров контролендә буласаҡ. Был турала ул БР Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә белдерҙе: "Беҙҙең алда торған төп бурыс - Ағиҙел яры буйына тормош һулышы өрөү. Был эш БР Мәҙәниәт министрлығына ла, Өфө ҡалаһының социаль блогына ла ҡағыла. Ләкин был яр буйы бизнес өсөн дә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырасаҡ..."- тине Радий Фәрит улы. Уның белдереүенсә, киләһе йәй аҙағына яр буйында тәүге стационар рестарандар, ял һәм спорт объекттары барлыҡҡа килергә тейеш. "Кем дүрт миллионлы республиканың миллионлы ҡалаһының яр буйы мәнфәғәте өсөн үҙенең яҡшы идеяларын тормошҡа ашырырға теләй, мөрәжәғәт итһендәр", - ти республика Башлығы.

Әйткәндәй, үтеп барған йәйҙә башҡорт йәштәре Ағиҙел яры буйында үҙ инициативалары менән "Самауырлы ритайым" кисәһе ойошторол, ошондай сараның ҡала халҡына ла, ҡунаҡтарға ла ҡыҙыҡлы булыуын иҫбат иткәйне инде. Был сара Башлыҡ күрергә теләгән яҡшы идея булараҡ ҡабул ителер, Ағиҙел буйындағы иң матур, айыҡ ял итеү өлгөһөнә әйләнер, тип ышанғы килә.

12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә ашырыу, республика халыҡтарының башҡорт мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныуын арттырыу өсөн бик аҙ ғына - етәкселәребеҙҙең илтифаты һәм иғтибары ла етә...

(Башы 1-се биттә).

***Сәйфулла ӘМИРОВ, хеҙмәт ветераны, Көйөргәҙе районы Йомағужа ауылы:*** Был фекер менән тулыһынса килешәм. Беҙҙә бөтә нәмә өҫтән, баштан килә бит. Яҡшыһы ла, насары ла, тигәндәй. Атай-олатайҙарыбыҙ "Балыҡ башынан серей" тип, бик тапҡыр әйтем ҡалдырған. Әйтерһең дә, улар әлеге көндәрҙә халҡыбыҙ алдында торасаҡ проблеманы сисә алмаҫтарын алдан күреп, белеп әйткән.

Мәғлүм булыуынса, уҙған быуат аҙағында телебеҙгә дәүләт статусы бирелгәс, күптәр бик шатланғайны. Ә шулай ҙа мәсьәләне төптән аңлағандар "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы был законды һағайып ҡаршы алды, сөнки уны тормошҡа ашырыу юлдары тураһында бер һүҙ ҙә әйтелмәне. Прокуратура иһә үҙенең тик федераль закондарҙы ғына күҙәтеүҙәренә һылтанды. Беҙҙең власть органдары "өҫтән" һорау булмағас, үҙ елкәләренә өҫтәмә эште алмаясағын асыҡтан-асыҡ белдерҙе. Был проблема бөгөн дә урынында ҡалды, сөнки ҙур-ҙур бүлмәләрҙә, бейек йомшаҡ кәнәфиҙәрҙә ултырған уны хәл итергә бурыслы ағай-эне ике тиҫтәнән ашыу йыл элек ҡабул ителгән законды күрмәмешкә һалыша. Уҙған быуаттың утыҙынсы йылдарындағы кеүек, "милләтсе" мөһөрөн алыуҙан һаман да ҡурҡалар шикелле.

Илебеҙ Конституцияһында һәр республика үҙ дәүләт телен булдыра ала, тип яҙылған. Беҙҙә бар ул. Тик закон ҡабул итеүен ителде, уның нисек тормошҡа ашырыу юлы тураһында ғына уйлап еткерелмәне. Шуға күрә, бына 21 йыл телдәр тураһында закон бар, тик ул тейешенсә эшләп китә алмай. Быны өсөн бары республика етәкселегенең сәйәси ихтыяры ғына кәрәк. Беҙҙең халыҡҡа күп кәрәкмәй бит ул. Төрлө кимәлдәге етәкселәребеҙҙең саҡ ҡына иғтибары ла етә. Ана бит, нисәмә йыл шихандар проблемаһын ишетергә лә теләмәгәйнеләр, халыҡ күтәрелеп сыҡҡас, бер нисә көн эсендә хәл ителде лә ҡуйҙы. Башҡорт теле лә ҡасан да булһа барыбер тейешенсә дәүләт теле буласағына шигем юҡ. Тик быны өсөн уны йөрөтөүсе милләт хаҡ түләмәһен ине...

***Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА, педагогия хеҙмәте ветераны, йәмәғәт эшмәкәре, Ырымбур ҡалаһы:*** БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары үҙҙәре ҡабул иткән ике теллелек тураһында закондың йүнәлешен, үтәлешен контролдә тоторға тейеш тә бит... Тик күп осраҡта улар йә үҙҙәре телде белмәй, әллә милли ғорурлыҡтары етмәйме, ә, бәлки, совет заманында һеңдерелгән урыҫсалаштырыуҙан сыға алмайҙарҙыр, һәр ваҡытта ла тиерлек битарафлыҡ, ғәмһеҙлек күрһәтә. Башҡорт теле нимәгә кәрәк, башҡортса ҡайҙа һөйләшәһең, уның ҡулланыу даирәһе юҡ, тип иғтибар бирмәйҙәр. Ә бит етәкселәребеҙ, оло ғалимдарыбыҙ башҡорт теленә, мәҙәниәтенә үҙҙәре ҡыҙыҡһыныу уятырға тейеш. Яҙыусыларыбыҙ араһында ла балалары менән "оло ағай" телендә аралашҡандар күп. Үҙҙәренең гениаль әҫәрҙәрен кем өсөн яҙа булып сыға инде улар улайһа? Йәшерен-батырыны юҡ: Өфөлә генә түгел, республиканың бөтә район-ҡалаларында тиерлек көнләп түгел, ә сәғәтләп "европалашыу" бара. Быны көндәлек тормошобоҙҙа һәр нәмәнән табырға мөмкин. Билдәле инде, был шарттарҙа туған телгә лә, милли ҡаҙаныштарыбыҙға ла урын юҡ. Бөгөн, мәҫәлән, Башҡортостанға килһәм, балалар кафеһында булһынмы, супермаркеттармы, уларҙа милли сифаттарҙы, милли колоритты эҙләп табыу мөмкин түгел. Исемдәре беҙгә таныш урыҫ телендә лә түгел хатта. Әллә ниндәй ят атамалар, сит һүҙҙәр. Урындағы етәкселәребеҙ аҙ ғына булһа ла "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы законды хөрмәт итһә, бындай кире һәм йәмһеҙ күренештәргә юл ҡуйылмаҫ ине, тип уйлайым. Учреждениеларҙың, сауҙа нөктәләренең, ойошмаларҙың исемен үҙебеҙсә атау талабын ҡуйһалар, был йүнәлештә үҙ һүҙҙәрен әйтһәләр, әлбиттә, Башҡортостан ҡалалары икенсерәк төҫ алыр ине.

Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдар аҙағында Мәләүез ҡалаһында бер грузин сауҙа нөктәһе һәм кейем тегеү цехы асты. Әммә һуңғы осорҙа күҙәтелгәнсә, уларҙы үҙҙәренсә атаманы, ә магазинына матур итеп "Батыр", теген салонына "Нурия" тип ҡушты. Был күренеште мәләүездәр, шул иҫәптән мин үҙем дә, урындағы халыҡҡа хөрмәт күрһәтеү тип аңланыҡ һәм уның үҙенә ҡарата ла күңелдә ихтирам уянды. Шуғалыр ҙа, моғайын, ситтән килгән был кешенең бында килеп сауҙа нөктәһе, ойошма асып йөрөүенә бер кемдең дә үпкәһе лә, ризаһыҙлығы ла булманы шикелле. Бында, һис шикһеҙ, район етәкселегенең дә ҡыҫылышы булғандыр, үҙ һүҙен әйткәндер. Һәм бик дөрөҫ, тип уйлайым.




Етәкселәребеҙ, яҙыусыларыбыҙ, оло шәхестәребеҙҙең әсә телен өйрәнеүҙең әһәмиәте тураһында бер һүҙе генә кәрәк ҡайһы берҙә. Әммә йыш ҡына улар был тәңгәлдә ғәмһеҙлек күрһәтә һәм тап уларҙың ошо битарафлығы туранан-тура халыҡтың милли үҙаңын юғалтыуға дусар итә. Мәҫәлән, Бүздәк районында етештерелгән соустың тышына милли башҡорт кейемендәге матур ҡыҙ төшөрелгән, әммә шуның эргәһендә башҡортса яҙыуға урын ҡалмаған. Етәксеһе ике теллелекте таныһа, мотлаҡ урын табылыр ине инде. Был йәһәттән ҡаҙаҡтарға һоҡланам. Улар ваҡ-төйәк кенә әйбергә лә үҙ телендә яҙа һәм туған телдәрен рекламалай. Милләттәштәремә ҡаҙаҡтарҙан өлгө алырға кәрәк, тип өндәшкем килә.

Һуңғы осорҙа һирәк-һаяҡ булһа ла, төрлө кимәлдәге ултырыштарҙа башҡортса һүҙҙәр яңғырап ҡуя һәм әйтергә кәрәк: шунда уҡ барыһы ла быны иғтибарға ала. Былтыр үҙем оҙаҡ йылдар йәшәп, эшләп киткән Мәләүез төбәгендә лә район советы сессиялары башҡортса үтеүен ишетеп, ғорурланғайным. Ғөмүмән, әсә телен яратҡан, ҡәҙерләгән кешегә был темаға ҡағылышлы бөтә нәмә лә яҡын ҡабул ителәлер, тип уйлайым һәм шулай булырға тейеш тә.

Күренекле хирург-офтальмолог Эрнст Мулдашев менән бер ваҡиға иҫтә ҡалған. Телевизорҙан уның Гималайҙан сәйәхәттән ҡайтҡан ваҡытын күрһәттеләр. Аэропортта журналистар уратып алғас, Э. Мулдашев уларҙың һорауына саф башҡортса яуап бирҙе. Журналистар унан русса яуап биреүен үтенгәс, ул: "Мин үҙемдең республикамдағы ике дәүләт теленең береһендә, башҡорт телендә яуап бирәм", - тине. Был һүҙҙәрҙе ул шундай ғорурлыҡ менән әйтте, быны ишеткән, үҙен башҡорт һанаған һәр кеше күңелендә теленә ҡарата ихтирам тыуғандыр, тип уйлайым.

***Миңһылыу ҠОБАҒОШОВА, педагогия хеҙмәте ветераны, Сибай ҡалаһы:*** Бик тә дөрөҫ... Етәкселәребеҙ, мин бында башлыса мәктәп директорҙарын күҙ уңында тотам, республиканың ике дәүләт теленә лә берҙәй мөнәсәбәттә булһа, бөгөн белем биреү учреждениеларында ла башҡорт теленә ҡарата атай-әсәйҙәрҙә икенсе төрлөрәк ҡараш йәшәр ине. Туған телгә һөйөү иң беренсе ғаиләлә һалыныуын бер ҡасан да инҡар итмәнем. Әммә ул өйҙә генә, үҙ фатирында, ихатаһында ғына һөйләшә торған тел булырға тейеш түгел. Юғиһә һуңғы ваҡытта төрлө кимәлдәге етәкселәрҙән, өйөгөҙҙә һөйләшегеҙ, һеҙҙе кем тыя, тигәнерәк фекерҙәр ишетелеп ҡала.

Балалар баҡсалары мөдирҙәренән алып, Президент, Башлыҡ кимәленә тиклемге етәкселәр ике дәүләт телен дә белергә тейеш. Белмәгән хәлдә лә хөрмәт итһендәр. Улар саҡ ҡына илтифат итһә лә, быға тиклем телебеҙгә ғәмһеҙлек, битарафлыҡ күрһәткәндәр тарафынан иғтибар салынып ҡала. Быны мин оҙаҡ йылдар башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытҡан уҡытыусы булараҡ та әйтәм. Етәксе үҙе телде белмәһә лә, уға ҡарата үҙенең ыңғай ҡарашын белдерһә, башҡалар ҙа тыйнаҡлана, күнә. Улай ғына ла түгел, хөрмәт итә башлай, яратмағанын асыҡтан-асыҡ күрһәтмәй.

Сибай ҡалаһының 9-сы мәктәбен байтаҡ йылдар Тамара Анатольевна Солонина етәкләне. Ул үҙе сығышы менән Тула өлкәһенән ине. Институттан һуң йүнәлтмә менән "Йылайыр" совхозына эшкә килгән. Ул башҡорт телен уҡытыуға ҡарата һәр ваҡыт ыңғай ҡараштa булды, ата-әсәләр, уҡыусылар араһында ҡыҙыҡһыныу уятыуға ҙур өлөш индерҙе. Башҡортса белдеме-юҡмы, белмәйем, әммә һәр саҡ телде аңлауы тураһында белдерә килде. Үҙенең ошо ҡылығы менән башҡаларҙа ла телебеҙҙе ихтирам итергә өйрәтте, тип уйлайым.

Туған телде өйрәнеү теләге, әлбиттә, кешенең үҙенең күңелендә булырға тейеш. Был тәңгәлдә бәхәсләшергә урын юҡ. Мәҫәлән, Сибайҙа йәшәгән курд халҡына бер ниндәй закон да кәрәкмәй. Йолаларын, телдәрен үҙ ғаиләләрендә һаҡлайҙар, үҫтерәләр, тараталар. Уларҙы мин уҡытҡаным булманы. Шулай ҙа бер-ике тапҡыр ауырыған уҡытыусыларҙың дәресен алмаштырырға тура килгәндә курд балаларының ҡыйыулығына, уҫаллығына, үҙ телендә рәхәтләнеп һөйләшеүҙәренә иҫ-аҡылым китеп сыҡтым.

Телде һаҡлау, мәҙәниәтте үҫтереү өсөн бик күп пункттан торған комплекслы саралар кәрәк. Бөтә Рәсәй кимәлендә закон булмайынса тороп, аҫабалар теле, мәҙәниәте һаҡланмаясаҡ.

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың көҙгө сессиялағы беренсе пленар ултырышында депутаттар республика Хөкүмәте Премьер-министры вазифаһына Андрей Назаровтың кандидатураһын хупланы. Уның кандидатураһын республика Башлығы Радий Хәбиров тәҡдим итте.

✓ Башҡортостанда алтынсы саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы депутаттарын һайлауҙа, яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, һайлаусыларҙың күпселеге "Берҙәм Рәсәй" партияһы вәкилдәре Салауат Хөсәйенов һәм Флүр Уразмәтов өсөн тауыш бирҙе. Өфө вице-мэры Салауат Хөсәйенов Дәүләт Йыйылышына - 14-се Новиковка һайлау округынан (ул өфөләрҙең мәнфәғәтен яҡлай), ә Флүр Уразмәтов - 35-се Металлургия һайлау округынан үтте (Белорет һәм Белорет районы).

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Салауат Юлаев" хоккей клубы эшмәкәрлеген финанслау өсөн бюджеттан субсидия бүлеү тураһында республика Хөкүмәте ҡарарына ҡул ҡуйҙы. Аҡса эш хаҡына, календарь планға индерелгән спорт сараларын уҙғарыу менән бәйле сығымдарҙы ҡаплауға, коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә, милекте тотоуға, дөйөм хужалыҡ ихтыяжына йүнәлтелә.

✓ Башҡортостанда COVID-19 һәм пневмония йоҡтороусыларҙың үҫеше тотороҡло ҡала - көн һайын 30-ға яҡын йәки унан күберәк. Һуңғы тәүлектә республикала яңы коронавирус инфекцияһы менән ауырыуҙың 31 осрағы теркәлгән. Мәрхүмдәр - 32 кеше. Уҙған тәүлектә республикала дауахананан тыш пневмония менән сирләүселәр тағы 91 кешегә артҡан. Пандемия башланғаны бирле барлығы 8317 сирле теркәлгән.

✓ Борай районы башлығы Рөстәм Исхаҡов вазифаһын ҡалдыра. Был хаҡта ул 15 сентябрҙә "Бәйләнештә"ге сәхифәһендә хәбәр итте һәм борайҙарға ярҙамдары, берлектәге эш өсөн рәхмәт әйтте. Урындағы муниципалитетта Рөстәм Исхаҡовтың был ҡарарҙы яңы вазифаға күсеүе менән бәйле ҡабул итеүен билдәләнеләр.

✓ Конкурс һөҙөмтәләре буйынса, Башҡортостандың бер нисә дәүләт театрына һәм концерт ойошмаһына яңы директорҙар тәғәйенләнде. Хәҙер Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт драма театрын - Илнур Әбдрәшитов, Туймазы дәүләт татар драма театрын - Руслан Вәхитов, Нефтекама дәүләт филармонияһын Ринат Ғайсин етәкләйәсәк.

✓ ***Ниңә башҡорт теленән дәрес әҙерләү бала өсөн көс етмәҫлек хәлгә әйләнгән һуң? Ни өсөн башланғыс класс уҡыусыһына мотлаҡ башҡорт телен, грамматик ҡағиҙәләрен яҡшы белгән филолог ярҙам итергә тейеш?***



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# АТТА ЛА, ТӘРТӘЛӘ ЛӘ...




## ғәйеп барҙыр

**Бысраҡ һыйыр бөтә көтөүҙе буяр, тигән һымаҡ булды был. Үткән шәмбе интернеттағы Башҡортостан яңылыҡтарында Нефтекама ҡалаһынан бер уҡыусының Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров исеменә мәктәптә башҡорт теле дәрестәрен уҡытмауҙы һорап яҙған хаты баҫылып сыҡты һәм һуңғы ваҡыт былай ҙа юғары температуранан һыуынып етмәгән йәмәғәтселек усағын дөрләтеп ебәрә яҙҙы.**

Ҡайһы берәүҙәрҙең фекеренсә, ундай бала әллә бар, әллә юҡ, һәр хәлдә, уның артына ышыҡланып эш итеүсе өлкәндәр ҡулы ла һиҙелгәндәй бында. Йә уныһы әллә ни мөһим дә түгелдер, әммә ләкин уҡыу йылы башланып өлгөрмәне, башҡорт теленә ҡаршы Башҡортостан ерендә йәшәп, уның икмәген ашап ятҡан бер төркөм элекке бысраҡ эшенә тотондо һәм уҡытыу-дәрес пландары раҫланып, һәр предмет үҙенең законлы урыны-сәғәтен алып, урынлашып бөткәс кенә тағы ла тыныслыҡты боҙоп, иләүгә таяҡ тығып бутарға маташа. Ана шулай тигеҙ ерҙән сөй эҙләп, республикаға исеме бирелгән төп халыҡҡа ҡағылышлы һәр нәмәгә түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт, ҡабул итә алмау, яйы сыҡҡан һайын көлөп-сәнсеп, мыҫҡыллап алыу ғәҙәтенә һеңгән ҡайһы берәүҙәрҙең. Бының өсөн яйы ла килеп сыҡты: уңайлы бит, интернет селтәрҙәре киң - булғанын-булмағанын да, бысрағын-ялаһын да шунда ауҙарырға, үсле объектыңа ағыуыңды сәсергә була, тик ундайҙар исем-шәрифтәрен генә яҙырға ҡурҡа һәм, баяғыса, псевдоним артына йәшеренә.

Быны әлеге бала исеменән яҙылған хатҡа ҡағылышлы комментарийҙарҙың ҡайһылары бик асыҡ раҫлап тора. Неля Кузнецова тигән берәү хатта Башҡортостан дәүләте барлығын да танымай: "Башкортостан не государство, вы что-то путаете", - ти ул бәхәскә ҡыҫылып. Тимәк, был әҙәм үҙе йәшәгән-эшләгән ерҙең халҡын, телен генә түгел, статусын да танымай. Тимәк, ул да ана шул башҡорт телен генә түгел, ә дәүләт булараҡ, Башҡортостандың хатта тарихын да белмәй, уҡымаған. Тап ана шундайҙар тыныс иләүгә таяҡ тығa ла инде. Һөҙөмтәлә интернетта оло тауыш ҡупты.

Башҡорт теле дәресенә ҡаршы сығыусы берәү "кәрәге булмаған был дәресте алып ташлап, урынына файҙалы берәй предмет" индерергә тәҡдим итә ул, ләкин бынан бит барыбер уҡыу программаһының тығыҙлығы, көсөргәнешлеге хәл ителмәйәсәк, тимәк, һис тә башҡорт телендә түгел эш. Шуға ла берәүҙәр бик урынлы ғына итеп әлеге уҡыусыға тырышыбыраҡ уҡырға, үҙенең ҡайҙа йәшәгәнлеген онотмаҫҡа кәңәш итә. Бына, мәҫәлән, был хаҡта Миңһылыу Ҡобағошова ниҙәр яҙа: "...Ошо башҡорт телен уҡытыу-уҡытмау мәсьәләһен күтәреүселәр бәләкәй генә бер төркөм кешеләрҙер. Экология темаһын икенсе яҡҡа боралар, милләт-ара ғауға ойоштормаҡсылар, күрәһең. Балаларҙың уҡыуына ҡамасаулаусы нәмә - уларҙың компьютер һәм телефондарында кәрәкмәгән уйындар менән бик күп мауығыуҙары. Ата-әсә иң тәүҙә бына шуға иғтибар итһен ине. Бер әсә беренсе кластан башлап улына башҡорт һәм инглиз телдәренән гел генә өҫтәмә дәрестәр алды: балаһы йыш ауырый ине. "Урам буйында йөрөһә, һүгенеү, тәртип боҙоуҙан башҡаға өйрәнмәйҙәр, ә былай, исмаһам, көн һайын һүҙҙәр ятлай", - ти торғайны рус телле был йәһүд ҡатыны. Үҫкәс, был белем улына файҙаға ғына булды, ул төрөк компаниялары менән эшләп, үҙ бизнесын асты. Беҙгә бына ошондай кешеләргә тиңләшергә кәрәк!" Башҡорт теле яҡлыларҙың фекере - алтын, ләкин уға ҡаршыларҙың быны аңлау мәҙәнилеге юҡлығын да, үҙҙәренең гражданлыҡ бурыстарын үтәргә теләктәре булмауҙы ла, рухи кимәлдәре сикләнгәнлеген дә күҙҙән ысҡындырыу кәрәкмәҫтер. Ни хәл итмәк, шундайҙар менән һыйышып-килешеп йәшәү - бер беҙҙең бурыс, күрәһең...

Башҡорт телен уҡытыуҙа икенсе бер мөһим мәсьәләне лә иҫтә тотоу кәрәк. Ул иһә башҡорт теле дәрестәренең абруйын күтәреүгә ҡағыла. Йыл һайын башҡорт теле уҡытыусылары конкурстары, тел уҡытыу оҫталығын арттырыу, камиллаштырыу буйынса һәр төрлө методик кәңәшмәләр ҙә үткәрелеп тора ла бит, тик ниңә һаман булһа башҡорт теле дәрестәре ямանланыуҙан азат булып, ауыр хәлгә дусар ителеүҙән туҡтай алмай һуң? Был һорауҙы туранан-тура башҡорт теле уҡытыусыларына төбәргә кәрәк. Балаларҙы ялҡытып түгел, ә ҡыҙыҡтырып, уйын, диалогтар ҡороп, телмәр үҫтереү рәүешендә йәнле итеп бер тынала дәрес үткәреү шул тиклем ауыр бурысмы икән ни? Ҡайҙа һуң конкурсарҙа еңеп, башҡорт теле йыл уҡытыусылары булып танылған оҫталарҙың эш тәжрибәләре, ниңә улар таратылмай? Ҡағиҙә ятлатып, баланы мәжбүр итеп, класс алдына баҫтырып һорау алыу, насар билдә ҡуйып, күңелен төшөрөү, көс етмәҫлек өйгә эштәр биреп ҡайтарыу, әлбиттә, тел дәресенән уҡыусыларҙы биҙҙерә, ризаһыҙлыҡтар тыуҙыра. Унан һуң, бөгөнгө былай ҙа көсөргәнешле осорҙа йәшәүебеҙҙе лә күҙҙән ысҡындырырға ярамай. "Ҡағиҙә ятлатып, грамматикаға өйрәтергә тырышыуҙан арынырға кәрәк", тигәйне "Киске Өфө"ләге әңгәмәһендә бер ихтирамлы тел белгесе-методист. Ул, моғайын, яңылышмайҙыр, сөнки башҡорт теле туған теле булмағандарҙы уҡытыу тураһында һүҙ бара бит. Ахыр сиктә, шул уҡ башҡорт теле дәрестәрен башҡорт халҡының данлы тарихына, уның да иң көслө эмоциональ эпизодтарына, Башҡортостаныбыҙҙың иҫ китмәле тәбиғәт һәйкәлдәре - билдәле тау-таш, йылға-күлдәре гүзәллектәренә, билдәле легендар шәхестәребеҙ яҙмышына бәйләп, мауыҡтырғыс дәрестәр үткәреү һәр уҡытыусының да ҡулынан киләләр ул. Һәр дәрес уҡытыусы шәхесенә туранан-тура бәйле - был иң тәүҙә башҡорт теле уҡытыусыларының төп кредоһына әүерелергә тейеш, сөнки тап улар аша балалар дөйөм башҡорт халҡын күрә, уның белем-мәҙәни кимәле, асылы хаҡында фекер йөрөтөргә өйрәнә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ҒӨРБӘТ ҺҮҘЕ НИ АҢЛАТА?

**Нефтекама ҡалаһынан бер уҡыусының республика Башлығына мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәрен алып ташлауҙы һорап хат яҙғанын ишеткәс, күптән йәнемде әрнеткән тема тураһында өндәшмәй ҡала алманым.**

Әйтегеҙ әле, "ғөрбәт" тигән һүҙҙе ишеткәнегеҙ бармы, нимәне аңлата ул? Белмәйһегеҙме? Мин дә белмәй инем, хатта ишеткәнем дә юҡ ине. Хәҙер белдем. Ләкин уны белеүҙән минең тел байлығым артманы, бер нисә көндән мин уны онотасаҡмын. Ни өсөн быны һөйләйем? Яңыраҡ бер танышым шылтырата. Баймаҡ районы башҡорто, Өфөлә йәшәй. Пенсияға сыҡҡандан бирле инде нисәмә йыл аралашҡан юҡ ине.

- Уй, әлдә телефоның һаҡланған, кемгә шылтыратырға, тип аптырап йөрөй торғас, һин иҫкә килеп төштөң, һин бит филолог, әйт әле, нимә була ул ғөрбәт?

- Бер ҙә ишеткәнем булманы, берәй диалект һүҙҙер ул. Һиңә ниңә кәрәк булды ул һүҙ? - тим.

- Миңә кәрәкмәй ҙә бит. Апайымдың ҡыҙы шылтырата. Улы 3-сө синыфта уҡый. Башҡорт теленән күнегеү эшләргә биргәндәр - һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатырға. Ҡалала үҫкәс, үҙе лә бөтәһен дә аңлап етмәйҙер инде, минән һорай. Ҡалғандарын эшләнек, ғөрбәт һүҙендә туҡтап ҡалдыҡ.

- Хәҙер, көтөп тор, һүҙлектән ҡарайым әле.

Башҡортса-русса һүҙлектән эҙләйем теге һүҙҙе. Ундай һүҙ юҡ. Ике томлы "Башҡорт теленең һүҙлеге"н аҡтарам. Килеп сыҡты бит әй! Ғәрәп теленән ингән, иҫкергән һүҙ - "ят ер", "сит ил" тигәнде аңлата икән. Шатланып, әйткәндәрҙе яҙып алды танышым. Тағы ла ошондай һорауҙар тыуғанда шылтыратырға мөмкинме, тип, рөхсәт алды.

Мин оҙаҡ ҡына әсенеп, уйланып йөрөнөм. Хәҙер ул бала ошо һүҙҙәрҙе дәфтәренә күсереп яҙа ла, иртәгә мәктәптән "5"ле билдәһе алып ҡайта бит инде. Ә башҡортса ике һүҙҙе ҡушып әллә һөйләшә белә, әллә юҡ.

Әгәр былай хәл бер генә тапҡыр булһа, ул тиклем әрнемәҫ тә инем. Бына нисәмә йылдар инде туғандарҙың, таныштарҙың, таныштарҙың таныштарының балаларына, хәҙер инде шул балаларҙың үҙҙәренең балаларына 1-се синыфтан башлап башҡорт теленән бала өсөн ҡыҙыҡ булмаған ҡатмарлы, философик шиғырҙарға анализ яһарға, һәр төрлө иҫкергән, диалект йәки күсмә мәғәнәле һүҙҙәр, ҡылым һөйкәлештәре, дәрәжәләре, төркөмдәре, ымлыҡ төрҙәре һәм башҡалар, береһенән-береһе буталсығыраҡ грамматик ҡағиҙәләр буйынса һорауҙарға яуаптар эҙләргә мәжбүрмен. Ярҙам итә алмаған осраҡтар ҙа күп, сөнки ул грамматик терминдар, ҡағиҙәләр күптән онотолған (уларҙы башта тотоу мөмкин дә түгел, кәрәге лә юҡ).

Ниңә башҡорт теленән дәрес әҙерләү бала өсөн көс етмәҫлек хәлгә әйләнгән һуң? Ни өсөн башланғыс класс уҡыусыһына мотлаҡ башҡорт телен генә түгел, уның грамматик ҡағиҙәләрен яҡшы белгән һәм иҫендә тотҡан филолог ярҙам итергә тейеш? Ә бит инглиз теленән ярҙам итергә бер инглиз кешеһе булмаһа ла, бала мәктәпте тамамлағанда инглизсә арыу уҡ һупалай. Ә башҡорт балаһы ата-әсәһе, туғандары, эргә-тирәләге кешеләр башҡортса һөйләшһә лә, үҙенең туған теленән дәрес әҙерләй алмай.

Әлбиттә, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға ҡаршы сығып, баяғы Нефтекама малайы артына ышыҡланып, был мәсьәләнән бысраҡ сәйәсәт яһаған бер төркөмдө бер нисек тә аҡлап булмай. Ә шулай ҙа... Тап ошо хәлгә сәбәпсе булған уҡытыу методикаһын үҙгәртеү, яңы дәреслектәр сығарыу буйынса эшмәкәрлеген тағы бер тапҡыр байҡап, һығымталар яһаһын ине беҙҙең мәғариф системаһы, тип теләге килә.

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда 287 меңгә яҡын кеше грипҡа ҡаршы прививка эшләткән. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министры әйтеүенсә, быйыл республикала бөтәһе 2 миллион кешегә прививка яһау планлаштырыла. Прививка балаларға 6 айҙан башлап, уҡыусыларға, студенттарға, шул иҫәптән медиктарға, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, транспорт, мәғариф хеҙмәткәрҙәренә, 60 йәштән ололарға, йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға яһалырға тейеш.

✓15 сентябрҙән Башҡортостанда йәштәр клубтары, түңәрәктәр, секциялар һәм үҙәктәр үҙ эшен башланы. Рәсәй футбол Премьер-лигаһы, Континенталь хоккей лигаһы һәм Рәсәй чемпионаттарының башҡа уйындарын санитар-эпидемиологик талаптарҙы теүәл үтәгәндә генә уҙғарырға рөхсәт ителә. Төп шарт - тамашасылар трибунаһының 50 проценты ғына тулы булырға тейеш.

✓Силәбелә башҡорт ҡыҙҙары араһында "Һылыуҡай - 2020" матурлыҡ конкурсына кастинг уҙҙы. Унда 17 ҡыҙ ҡатнашты. Таж эйәһе һәм "Һылыуҡай-2020" Бөтә Рәсәй башҡорт һылыуҡайҙары конкурсының тәүге финалсыһы - Силәбенән Аймара Нафиҡова. Ул Силәбе өлкәһе исеменән конкурстың финалында ҡатнаша. Беренсе урында - Юлиә Абайдуллина, икенсе урында - Элина Сибәғәтуллина, өсөнсөлә иһә Ләйсән Солтанова. Финал 3 декабрҙә Өфөлә уҙғарыла. Еңеүсегә төп бүләк - автомобиль.

✓Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре буйынса 100 балл йыйған уҡыусылар әҙерләгән уҡытыусыларға өҫтәмә аҡса түләнә. Республика Хөкүмәтенең тейешле бойороғо Башҡортостан Республикаһының рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Хәбәр ителеүенсә, уҡытыусыларға түләү өсөн 5,3 миллион һум йүнәлтелгән. Берҙәм дәүләт имтиханы-2020 имтихан кампанияһы йомғаҡтары буйынса бөтәһе 106 уҡытыусыға ошондай премия тапшырыла. Премия күләме - 50 мең һум. Уҡыусыларҙың күпме булыуына ҡарамай.

✓Башҡортостанда уҡыу йылы башланғандан алып 67 уҡытыусы һәм уҡыусы коронавирус йоҡторған, тип хәбәр итте мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин. Әле 14 муниципалитеттың 41 мәктәбенән 853 уҡыусы карантинда. Мәктәпкәсә учреждениеларҙағы айырым төркөмдәр карантинға ебәрелде, дүрт балалар баҡсаһы ябылды. Урта махсус уҡыу йорттарында инфекция йоҡтороуҙың бер осрағы ла теркәлмәгән, тип өҫтәне министр.

✓ *Беренсе балаға түләү 483 882 һум була. Әгәр ғаилә беренсе балаға Әсәлек капиталы алмаған икән, икенсеһенә түләү 639 432 һум тәшкил итә. Кире осраҡта, икенсе бала тыуған өсөн 155 550 һум бирелергә тейеш.*



ҠЫҪҠАСА

# ЙОРТ ТӨҘӨЛМӘЙӘСӘК!

✓ **Республика Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Шота Руставели урамындағы 5-се йорт ихатаһында башланған төҙөлөштө ҡарап, баш ҡала ихаталарҙы үтә нык тығыҙ итеп төҙөүгә юл ҡуйырға ярамай, тигән һығымта яһаны.** "Бында бер ниндәй ҙә төҙөлөш булмаясаҡ, - тине Радий Хәбиров һәм төҙөүселәрҙән 1-2 көн эсендә объекттағы бөтә эштәргә нөктә ҡуйыуҙарын талап итте. - Бөгөн барлыҡ эштәрҙе туҡтатығыҙ, һеҙ бында төҙөмәйәсәкһегеҙ. Бында торлаҡ йорт һалынмаясаҡ, бәлки, киләсәктә балалар баҡсаһы йәки балалар майҙансығы булыр. Быны мэрия хәл итһен, әйҙә". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: Шота Руставели урамы, 5-се йорт ихатаһында 34 ҡатлы торлаҡ йорт төҙөлә башлағайны. Был эштәр башланғас, күрше йорт стеналарында ярыҡтар пәйҙә булды һәм халыҡ был төҙөлөшкә ҡаршы сыҡты.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Газ. Нефть. Технологиялар" күргәҙмәһен ҡараған саҡта Башҡортостан сода компанияһы экспозицияһында предприятиеның менеджменты менән аралашты.** БСК-ның генераль директоры Эдуард Давыдов һүҙҙәренсә, компания Шахтауҙың нигеҙ соҡоронан һыу ҡатламы дәрәжәһенән түбәндәрәк сеймалды хәүефһеҙ сығарырға мөмкинлек биргән саралар комплексын эҙерләй. "Хәҙер беҙ ундағы һыуҙы нисек таҙартырға, ҡайҙа ағыҙырға, ниндәй варианттар һәм эҙемтәләр булырға мөмкин икәнен ҡарайбыҙ", - тине Давыдов республика Башлығы менән аралашҡан ваҡытта. Радий Хәбиров сеймал проблемаһын хәл итеүҙән тыш, экологик мәсьәләләр, эш урындарын һаҡлап ҡалыу тураһында етди уйларға кәрәклегенә иғтибар итте.

✓ **Башҡортостандың Иглин районы Иван-Казанка ауылы 19 һәм 20 сентябрҙә традицион яндан уҡ атыу үҙәгенә әүереләсәк. Республика бишенсе "Мәргән уксы" фестивален ҡабул итә.** Башҡортостанға Рәсәйҙән генә түгел, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән спортсылар килә. Быйыл 100-ләгән уксы ғариза ебәргән. Фестиваль барышында турнирҙар өс номинацияла ойоштороla. Уҡ атыуҙан тыш, әүҙем ял һәм спорт яратыусыларҙың һыбай уҡ атыу мөмкинлеге лә бар. Иң шәп ҡатнашыусылар уҡ атыу буйынса төбәк һәм халыҡ-ара ярыштарҙа, хәрби-тарихи реконструкция фестивалдәрендә Башҡортостан исеменән сығыш яһаясаҡ.

✓ **Өфөлә балалар баҡсаларына, мәктәптәргә һәм медицина учреждениеларына йылылыҡ бирелә башланы, тип хәбәр итте баш ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин.** Социаль объекттарҙа йылытыу миҙгелен башлау тураһында тейешле ҡарарға ҡул ҡуйылған да инде. Өфөнөң Йәшәү эшмәкәрлеген тәьмин итеү идаралығы етәксеһе Антон Тристан әйтеүенсә, ҡаланың ресурс менән тәьмин итеү ойошмаларына йылылыҡ биреү тураһында 49 ғариза килгән, шуларҙың 26-һы - балалар баҡсаларынан, 16-һы - мәктәптәрҙән, етәүһе - медицина учреждениеларынан. Ошо объекттарҙы йылытыу буйынса эш башланған. Өлфәт Мостафин һүҙҙәренсә, 22 сентябрҙә тиклем йорттарға ла йылы бирә башлаясаҡтар.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫСА ҺУНАР ИТ

**Башҡортостанда һунар итеүҙең яңы төрө индерелә, тип хәбәр иттеләр республика Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәтенән.**

Тиҙҙән Башҡортостан парламенты депутаттары һунар һәм йәнлектәр донъяһы тураһында республика законларына үҙгәрештәр ҡабул итергә йыйына. Республика ҡануниәтендәге яңылыҡтар ярым ирекле шарттарҙа һәм яһалма булдырылған йәшәү мөхитендә тотолған йәнлектәргә ҡарата һәүәскәр һәм спорт һунарын көйләү менән бәйле. Закон проекты һунарсылыҡ хужалыҡтарында ҡырағай йәнлектәрҙе үрсетеүҙе, һунар алып барылған махсус биләмәләрҙә уларҙың һанын тергеҙеүҙе күҙ уңында тота. "Был тәбиғи йәшәү мөхитендәге йәнлектәр һанында ыңғай сағылыш табырға тейеш, - тип белдерҙе Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев. - Бынан тыш, бындай ҡараш халыҡ араһында һунарҙың осраҡлы шаһиттарына һәм бәхетһеҙ осраҡтар мөмкинлегенә юл ҡуймай". Дәүләт Йыйылышында билдәләүҙәренсә, йәшәйештән һунарсылыҡ кеүек хужалыҡ тармағын тулыһынса алып ташлап булмай. Шуға күрә уны кешелеклерәк, хәүефһеҙерәк итергә, ҡырағай хайуандар популяцияһына уның кире йоғонтоһон кәметергә кәрәк. Үҫешкән илдәрҙә ошондай һунар итеү системаһы күптән уңышлы файҙаланыла. Улар араһында - Германия, Швейцария, Италия, Бөйөк Британия. "Беҙҙә был тәжрибә яңыраҡ ҡына популярлыҡ яулай башланы. Йәнлектәр үрсетеү менән шөғөлләнгән һунарсылыҡ хужалыҡтары барлыҡҡа килә, ләкин хоҡуки яҡтан билдәһеҙлек уларҙың эшенә ҡамасаулай, республикабыҙҙа ҡабул итеүгә тәҡдим ителгән закон проекты уны бөтөрөүгә йүнәлтелгән", - тип өҫтәне Толкачев.

# ӨСӨНСӨ БАЛАҒА...

**2020 йылда Башҡортостанға өсөнсө һәм артабанғы балалары тыуған ғаиләләргә пособие түләү өсөн өҫтәмә бюджет траншы бирелә.**

"Өсөнсө бала тыуғанда айлыҡ түләүҙәргә тағы 1,73 миллиард һум йүнәлтелә. Ошо хаҡтағы бойороҡҡа Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы. Аҡса һигеҙ төбәк араһында бүленә. Улар иҫәбендә - Башҡортостан, Төньяҡ Осетия - Алания, Удмурт, Сыуаш республикалары, Иркутск, Ленинград һәм Сахалин өлкәләре, шулай уҡ Чукотка автономиялы округы", - тиелә хәбәрҙә. Билдәләнеүенсә, беренсе ярты йыллыҡ йомғаҡтары буйынса алыусылар һаны тураһында мәғлүмәттәр яңыртылыуға бәйле өҫтәмә финанслау талап ителде. 2020 йылда ошо маҡсатҡа бөтәһе 47,58 миллиард һум резервта ҡалдырылды. Шуларҙың 1,94 миллиард һумы Башҡортостанға бүленә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ил буйынса ошондай пособиеның уртаса дәүмәле - 10,4 мең һум самаһы. Ул ай һайын, балаға өс йәш тулғансы түләнә һәм өсөнсөгә генә түгел, артабанғы балаларға ла ҡағыла. Рәсәйҙә бындай түләү социаль ярҙамға мохтаж 517 ғаиләгә тәғәйенләнә.

# ЯҠЛАУЛЫЛАР

**Башҡортостанда ата-әсәһе айырылышыусы балаларҙың хоҡуҡтарын яҡлаусы закон ҡабул ителәсәк.**

Көҙгө сессия осоронда БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары июнда тәүге уҡыуҙа ҡабул ителгән "БР Ғаилә кодексының 85-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проекты буйынса эштәрен дауам итәсәк. "Документ тарафынан ата-әсәнең һәр береһенә суд тәртибендә бала өсөн өҫтәмә сығымдар йөкмәтеүсе хәлдәр исемлеге киңәйтеләсәк, - тип аңлатма бирҙе Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.- Бөгөн Ғаилә кодексы тарафынан балиғ булмаған йәки балиғ йәшендәге хеҙмәткә яраҡһыҙ баланың ауыр сирләүе йә зәғифләнеүе осрағында өҫтәмә аҡса түләтеү мөмкинлеге ҡарала. Закон проектының был исемлеккә баланың даими йәшәү өсөн яраҡлы торлағы булмаған осраҡты ла өҫтәргә кәңәш ителә". Республика парламенты спикеры фекеренсә, закон ата-әсәһе айырылышыусы балаларҙың хоҡуҡтарын яҡларға тейеш. "Үкенескә ҡаршы, айырылышҡандан һуң бала ата-әсәнең береһе - ҡағиҙә булараҡ, әсәһе менән йәшәү өсөн тейешле мөмкинлек булмаған шарттарҙа тороп ҡала, - ти Константин Толкачев. - Ата-әсәнең икенсеһе был осраҡта бала яҙмышы өсөн артабан яуаплылыҡ алырға теләмәй. Былай булырға тейеш түгел. Яңы закон икенсе ата-әсәнән баланың торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн түләтергә тейеш".

# СҮП-САР СЫҒАРЫУ...

**1 сентябрҙән Башҡортостанда ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү буйынса төбәк операторҙарының тарифы артты. Әле күп фатирлы йорттарҙа хаҡ - 70 һум, шәхси секторҙа - 35 һум. Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә яңы тариф яңғыраны:**

"Махсус автохужалыҡ" муниципаль унитар предприятиеһы (Өфө һәм яҡындағы районлар): күп фатирлы йорттар - 75 һум, шәхси йорттар - 76;

"Дюртюлимелиоводстрой" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте (Башҡортостандың төньяҡ өлөшө): күп фатирлы йорттар - 96 һум, шәхси йорттар - 77 һум;

"Экоситиʼ яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте (Башҡортостандың көньяҡ өлөшө): күп фатирлы йорттар - 94 һум, шәхси йорттар - 96 һум; "Экология Т" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте (Башҡортостандың көнбайыш өлөшө): күп фатирлы йорттар - 95 һум, шәхси йорттар - 96 һум.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Экология министрлығына алыҫтағы ҡасабаларҙан сүп-сар сығарған өсөн түләү мәсьәләһен күрһәтелгән хеҙмәттәр буйынса ентеклеп ҡарарға ҡушты. "Тәүге тариф - 70 һәм 35, илдә иң түбәне булды, улар иҡтисади яҡтан нигеҙләнмәгән. Сүп-сар сығарыу системаһы яйға һалынғансы ошондай ҡарар ҡабул ителгәйне. Беҙҙе нимә борсой - шәхси сектор өсөн тариф ике тапҡырға тиерлек артҡан. Алыҫта урынлашҡан ауылдарҙа сүп-сар айына бер тапҡыр сығарыла тип әйтергә мөмкин, улайһа, халыҡ нимә өсөн түләргә тейеш?" - тигән һорау бирҙе Радий Хәбиров һәм ошондай ҡасабаларҙа йәшәүселәрҙән аҡсаны хеҙмәт күрһәтеү фактына ҡарап йыйырға тәҡдим итте.

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ...

**Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығында 2021 йылда әсәлек капиталын индексациялау тураһында белдерҙеләр.**

Әйтәйек, беренсе балаға түләү 483 882 һум була. Әгәр ғаилә беренсе балаға Әсәлек капиталы алмаған икән, икенсеһенә түләү 639 432 һум тәшкил итә. Кире осраҡта, икенсе бала тыуған өсөн 155 550 һум бирелергә тейеш. 2021 йылда Әсәлек капиталын түләүгә бөтәһе 443,3 миллиард һум планлаштырылған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 йылдың 1 мартында Рәсәй Президенты Владимир Путин Әсәлек капиталы программаһын киңәйтте. Ул 2026 йылдың аҙағына тиклем оҙайтылды. Бынан тыш, 2020 йылдың 1 ғинуарынан беренсе балаһы донъяға килгән йәки тәрбиәгә алған ғаиләләргә аҡса түләй башланылар. Беренсе баланы берҙән-бер тәрбиәгә алыусы тип иҫәпләнгән ир-егеттәр Әсәлек капиталына хоҡуҡлы (әгәр тәрбиәгә алыу хаҡында суд ҡарары 2020 йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инһә).

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Бөгөн баш ҡалала бер юлы биш балалар баҡсаһы төҙөлә. Уларҙың өсөһө халыҡ күп йәшәгән Һупайлы биҫтәһендә. Йыл һуңына тиклем Юрий Гагарин урамы, 44/2 адресы буйынса урынлашҡаны ишектәрен асасаҡ. Яңы өс ҡатлы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһының майҙаны 5000 квадрат метр һәм ул 190 урынға иҫәпләнгән. Ойошмала 8 төркөм ячейкаһы, шул иҫәптән 3-һө - ясле йәшендәге балалар өсөн, 5-һе - мәктәпкәсә, түңәрәктәр, музыка һәм физкультура залдары, бар.

✓Өфө ҡалаһының балалар баҡсалары грант программаларында ҡатнашыуҙың ҙур тәжрибәһенә эйә һәм даими енеүҙәр яулап тора. 2017 йылда улар Рәсәй Федерацияһы бюджетынан 31 миллион һумдан ашыу субсидия алһа, быйыл баш ҡаланың 21 балалар баҡсаһы енеүселәр иҫәбендә.

✓"Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы филиалдары - 1-се һәм 3-сө УПАП-тар яңы 50 автобус менән тулыланды. Урта кластағы "Вектор NEXT" машиналары ҡаланың иң талап ителгән маршруттарына сығасаҡ. Быйыл ғына "Башавтотранс" ГУП-ының автопаркы 245 берәмек техника менән яңыртылған.

✓Өфө халҡының 28 проценты йәмәғәт транспорты хәрәкәтендәге маршруттар араһында ҙур аралыҡтар (интервал) булыуына ризаһыҙлыҡ белдерә. Мөрәжәғәттәрҙең 14 проценты самаһы маршруттар булмауға йә хәрәкәт схемаһының үҙгәреүенә, 10 проценты водителдәрҙең тупаҫлығына, 9 проценты "Алға" транспорт картаһын ҡабул итмәүҙәргә бәйле. Был мәғлүмәттәр Өфө ҡала хакимиәтенең транспорт һәм элемтә идаралығы тарафынан килтерелә.

✓Ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын йыйыу буйынса төбәк операторы булған "Өфө ҡалаһын таҙартыу буйынса махсус хужалыҡ" муниципаль унитар предприятиеһының автопаркы ла 6 берәмек техникаға артты. Яңы сүп ташыусы техника бер рейста 60 евроконтейнерҙағы сүп-сарҙы алып сығыу ҡеүәтенә эйә. Гөмүмән, быйыл 59 махсус техника, шул иҫәптән асфальт һалыу өсөн - 17, ҡаланы таҙа тотоу өсөн 36 берәмек техника алынған. Һөҙөмтәлә ҡаланың ҡулланыу ваҡыты уҙған коммуналь техникаһы һаны ҡыҫҡара.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Башҡортостанда "Юғарыға ос!" белем биреү проекты сиктәрендә "Сәләмәт йылмайыу" модулен тормошҡа ашырыу сиктәрендә 2019-2020 уҡыу йылында 65 мәктәптә стоматология кабинеты асылған. Быйыл тәүге кварталда белгестәр 11 меңдән ашыу уҡыусыны тикшергән, уларҙың икеһенә дауаланыу талап ителгән. Республика етәксеһе Радий Хәбиров БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығына кабинеттарҙың эшен тикшерергә ҡушты. "Республика был проектҡа аҡса һалды һәм беҙ, район башлыҡтары менән бергә, стоматология кабинеттарының эшен тәьмин итергә тейешбеҙ. Сөнки ҡайны берҙә мәктәп, бигерәк тә ауылдарҙа, бала тешен дауалай алған берҙән-бер урын булып тора", - тине республика Башлығы һәм халҡы 500-700 булған ауылдар мәктәптәрендә яңы стоматология кабинеттары асыу хәстәрен күрергә ҡушты. Был яңылыҡты ата-әсәләр үҙҙәре нисек баһалай һуң?**

# ЫНЙЫ-МӘРЙЕН ТЕШТӘРЕҢ...



***Сәлимә Минһажева, Өфө ҡалаһы:*** Балаларҙың тештәре сәләмәтлеген күҙәтеп тороу өсөн стоматология кабинеттары бик кәрәк. Белем усағында булыуы менән улар уңайлы ла. Ҡайһы берҙә баланың тешендә кариес башланыуын беҙ үҙебеҙ күрмәйбеҙ. Медосмотр ваҡытында стоматолог ҡайһы теште дауаларға, һурҙырырға кәрәклеген әйтә, дауалау билдәләй. Өҫтәүенә, ҡала ерендә күп стоматология поликлиникаларына эләгеп тә булмай, сират ҙур. Үҙе лә эштә булған ата-әсәгә баланың тешен дауалатыу өсөн гелән етәксенән һорап йөрөргә кәрәк. Шул яҡтан да мәктәптә үк теште дауалап ҡайтыу беҙгә, мәҫәлән, яйлы. Әлбиттә, стоматология кабинеттары күп мәктәптәрҙә заманса ҡоролмалар менән йыһазландырылмаған, мәктәпкә килеп эшләгән стоматологтар ҙа йыш алмашына. Шуға ла медицина пункттары базаһын нығытыуға мәктәп етәкселеге етди иғтибар бүлһен ине, тигән теләктәмен.

***Гүзәл Мирасова, Дыуан районы:*** Әлбиттә, стоматология кабинеттары мәктәптәрҙә булһа, бик шәп инде ул. Ни тиһәң дә, район үҙәгенә барып, баланың тешен тикшертеү өсөн бер көнөң үтә. Унда эләгеүе лә бик еңелдән түгел әле ул, алдан яҙылам тиһәң дә, ниндәйҙер сәбәбе сығып тора - йә табип отпускыла, йә больничныйҙа, йә эштән киткән һ.б. Мәктәп хакимиәтенә ҡараған һәм бер бинала урынлашҡан балалар баҡсалары өсөн дә был бик яҡшы булыр тип уйлайым, сөнки мәктәпкәсә йәштән үк балаларҙы тикшереп, ҡарап тороу мөмкинлеге барлыҡҡа киләсәк. Республикала халҡы 500-ҙән кәм булған ауылдарҙа мәктәптәр бармы һәм нисәү икән? Булған осраҡта, унда уҡыған балалар тураһында ла онотмаһындар ине, тап ошо бәләкәй ауылдар халҡы былай ҙа ситтә ҡала килә бит. Положение буйынса уларҙа стоматология кабинеттары асыу ҡаралмаһа, уларҙы күрше-тирә мәктәптәргә беркетеү мөмкинлеген дә хәл итеп булалыр, моғайын. Гөмүмән, мин был инициативаны хуплайым һәм был кабинеттар бер-ике йыл ғына эшләмәҫ, ә оҙайлы ваҡыт эшмәкәрлеген дауам итер тигән өмөттә ҡалам.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# АҠСА ИҪӘП ЯРАТА



**Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәнең иң мөһим темаһын бер һөйләм менән генә шулай тип аңлатырға мөмкин булыр ине. Йыл инде хәҙер тамамланыу яғына ауышты һәм 2017-2020 йылдарға ҡабул ителгән бюджеттың нисек үтәлеше, йыл һуңына тиклем ниндәй эштәр башҡарылырға тейешлеге тураһында хакимиәттең Финанс идаралығы начальнигы Гөлнара Вәлиева сығыш яһаны.**

2017 йыл менән сағыштырғанда бюджет килеме 22 процентҡа артҡан, шул иҫәптән һалым һәм һалым булмаған килем - 19 процент, кире ҡайтарылмай торған килем 44 процент тәшкил итә. Ҡаланың төп һалым сығанағы булып физик шәхестәрҙең килеменә һалым тора. Быйыл ул 45 процентты ала, йәғни 5,6 миллиард һум тәшкил итә. 2017 йылда был күрһәткес 40 проценттан кәмерәк, йәғни 4,1 миллиард һум булған. Шул уҡ ваҡытта, 2017 йыл менән сағыштырғанда, сығымдар 40 процентҡа (9 миллиард 919 миллион һум) артҡан. Әммә сығымдар структураһы ҡабаттан ҡаралып, муниципаль бурыс кимәле ҡыҫҡартыла - һуңғы ике йылда баҙар бурысы өлөшө 33,4 процентҡа кәмегән.

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең финанс ярҙамы арҡаһында һәм средстволарҙы эске бүлеү иҫәбенә муниципаль контракттар буйынса ваҡытында түләнмәгән кредит бурыстарын кәметеү мөмкин була. Аныҡлап әйткәндә, 2017 йылдың 1 ғинуарына ҡаланың 4 миллиард 475 миллион һум кредит бурысы булһа, быйыл 1 сентябргә ул 30 тапҡырға кәметелгән, йәғни бурыс 148 миллионға ҡалған.

Йыл һайын ҡала бюджетынан транспорт инфраструктураһы идаралығы, электротранспорт идаралығы, Өфө ҡала транспорты МУП-тарына субсидиялар биреү күләме арта бара. Быйыл республика бюджетынан 10 троллейбус алыу өсөн - 196,9, ҡала бюджетынан 6 миллион һум аҡса бүленгән. Былтыр 39 берәмек коммуналь техника алынһа, быйыл - 84 берәмек. Кварталдар араһындағы, магистраль юлдарҙы ремонтлауҙы финанслау артҡан. Ҡалала социаль объекттар төҙөлә, йәмәғәт территорияларын төҙөкләндерелә, парктарҙа капиталь ремонт эшләнә.

Быйыл һигеҙ айҙа ҡала бюджетына 17 миллиард 752 миллион һум аҡса инә. Сығымдар 16 миллиард 359 миллион һум тәшкил итә. Бюджеттың 87,6 проценты, йәғни 14 миллиард һум социаль өлкәгә һәм ҡала инфраструктураһына йүнәлтелә. Муниципаль белем биреү учреждениелары һәм мәҙәниәт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы буйынса маҡсатлы күрһәткестәргә етелгән. Быйылғы санитар-эпидемиологик хәл-торош һөҙөмтәһендә иғлан ителгән ял көндәрендә хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡтары һаҡланған һәм тейешле күләмдә түләнгән. Эпидемияға ҡаршы сараларға 157 миллион һум тотонолған.

Әйткәндәй, граждандарға бюджет асыҡлығы буйынса проекттарҙың федераль конкурсында Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Финанс идаралығы "Граждандар өсөн иң яҡшы урындағы бюджет проекты" номинацияһында икенсе урын алған, бынан тыш, БР Финанс министрлығы үткәргән муниципаль финанстар менән идара итеү мониторингы һәм баһаһы буйынса былтыр Өфөгә беренсе сифат дәрәжәһе бирелгән. Былар - ҡаланың финанс системаһы белгестәре, муниципаль учреждениеларҙың экономистары, бухгалтерҙарҙың эше һөҙөмтәһе.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҮӘТ ШУЛАЙ!

# ПАРКОВКА ТҮЛӘҮЛЕМЕ?




**БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары тиҙҙән баш ҡала үҙәгендә парковкалауҙы регламентлаусы яңы закон проектын ҡараясаҡ. Уның ҡайтанан эшләнгән вариантын ошо көндәрҙә парламенттың профиль комитеты хупланы.**

"Был донъя практикаһында ҡулланыла, - тине Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. - Өфө автомобилистары ҡала үҙәгендә машина ҡуйырға урын табыуы ауыр икәнен яҡшы белә. Юлдарҙың ситке һыҙаты һәр саҡ тигәндәй тулы була. Ҡайны берҙә автомобилдәр юл ситендә көн дауамында ултыра, улар шәхси парковка кеүек файҙаланыла. Бындай "тыҡталҡа"лар юл хеҙмәттәренең эшен ауырлаштыра. Өфө үҙәгендә бер яҡлы хәрәкәт индереү ҙә, юлдарҙы киңәйтеү ҙә көсәргәнеште кәметмәне һәм ҡаланы пик сәғәттәрендәге тығындарҙан азат итмәне. Закон проектына ярашлы, тәүге 20 минутта парковка бушлай буласаҡ. Әгәр ҙә территория спорт, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, дәүләт хеҙмәте күрһәтеү учреждениелары эргәһендә икән, бушлай парковка оҙайлығы - 1 сәғәт. Шул уҡ ваҡытта парковка өсөн түләү бары тик эш көндәрендә генә ҡулланыласаҡ. Киске 9-ҙан иртәнге 7-гә тиклем һәм ял көндәрендә ҡала үҙәгендә парковка бушлай. Шулай уҡ закон проекты парковкаланыу өсөн түләү алынмаған транспорт категорияларын да билдәләй. Шул иҫәптән, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары йәки инвалидтар идара иткән, шулай уҡ уларҙы йөрөткән транспорт саралары бушлай парковкалана. Түләүле парковкалар тураһында ҡарарҙы бары тик дәүләт власы йәки урындағы үҙидара органы ғына ҡабул итә ала. Был хаҡта халыҡҡа бер ай алдан хәбәр итепергә тейеш. Иғланда шулай уҡ сумма һәм түләү тәртибе күрһәтелеүе мотлаҡ.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Иммунитетты нығытыу

❖ Химиотерапия йәки нурланыш курсы үткәндән һуң 5 ҡалаҡ ҡарағай ылыҫы, 3 ҡалаҡ вакланған гөлйемеш, бер семтем һуған ҡабығы, ҙур булмаған татлы тамыр (солодка) өләшөн термосҡа һалып, 700 мл һыу ҡойорға һәм төнгәлөккә ҡалдырырға. Дүрт ай дауамында көн һайын 1,5 литр төнәтмә эсергә.

### Үксә шпоры

❖ Сей картуфты түнәрәкләп ҡырҡып, үксәгә тирегә йәбештереп һалырға. Шул рәүешле көн дауамында картуфты 2-3 тапҡыр алмаштырып йөрөргә. 3-4 көндән үксә сире бөтәсәк.

❖ Телгән күләмдә картуф шытымын алып яҡшылап йыуырға, банкаға һалырға һәм өҫтөнә сығарғансы спирт йәки араҡы ҡойорға. Ҡараңғы урында ике аҙна төнәтергә. Шунан шыйыҡсаны икенсе һауытҡа һөҙөп алырға. Ошо төнәтмәне төнгәлөккә ике аяҡтың да үксәләренә һөртөргә кәрәк. Үксәнең һыҙлауы тиҙ үк баҫыла.

### Үпкә сирҙәренән

❖ Үпкә сирҙәрен дауалағанда 1 кг йүкә балы, 1 стакан ваҡлап туралған алоэ япрағы, 100 грамм зәйтүн майы, 25 грамм ҡайын бөрөһө, 10 грамм йүкә сәскәһе, 2 стакан һыуҙан яһалған дауа файҙалы. Тәүҙә балды эмалле һауытта иретергә кәрәк, әммә ҡайнатырға ярамай. Ирегән балға алоэ ҡушып, 5-10 минут талғын утта тоторға. Ул арала ҡайын бөрөһө һәм йүкә сәскәһен 2 стакан һыуҙа 3 минут ҡайнатырға, 15-20 минут төрөп төнәтергә, һөҙөргә һәм һығырға. Бал һыуынғас, өҫтөнә ошо төнәтмәне ҡойорға һәм яҡшы бутарға. Ҡатнашманы ҡара быяла һауытҡа күсереп һалырға һәм шул уҡ миҡдарҙағы зәйтүн майын ҡойорға. Ҡатышманы һалҡын урында һаҡларға. Ашар алдынан мотлаҡ болғатырға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға. Дауаланыу ваҡыты 1-2 ай, кәрәк булғанда ҡабатларға ярай. Был ҡатышма туберкулезды дауалағанда ла файҙалы.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Һуңғы ике йылда республикала дәүләт һәм урындағы үҙидаралыҡ органдары эшендә башҡорт телен ҡулланыу мөмкинлектәрен киңәйтеү йәһәтенән һөҙөмтәле һәм тәртипкә һалынған, маҡсатлы эш алып барыла.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Урал арьяғының Силәбе яғында кеүек үк, XX быуат дауамында көньяҡ-көнбайышта ҡайыу оҫталары стилләштерелгән үҫемлек биҙәктәренән бер ни тиклем идеаллаштырылған булһа ла, реалистик биҙәктәрҙе сигеүгә күсә барышлығы күҙәтелгән. Туҡымаларҙа ҙур гөлләмәләр ҡайығандар, ҡайһы саҡта уларға суҡлап таҫма бәйләнгән, вазаға ҡуйылған сәскәләр ҙә сигелгән. Бындай оҫта тупланған биҙәктәрҙән торған орнамент ярҙамында йыш осраҡта намаҙлыҡтар нағышланған. Уларҙа гөлләмәләр япраҡлы тулҡын һыҙат (Көнсығыш илдәрендә "ислими" йәки "гирих" тип аталған ҡайма) ярҙамында билдәләнгән осло йәки түңәрәк мөйөшлө аркалар буйлап урынлаштырылған; иң ҙур биҙәктәр - өҫкө мөйөштәрҙә, бәләкәйерәктәре арканың аҫҡы яғына һәм ситтәренә тура килгән. Симметрия һаҡланған. Ҡуш элмә (йыш ҡына ситен ҡаймалап сығыу булмаған), сүпләп сигеү, тар һәм киң элмә, ҡайһы бер өлөштәрен элмәле типсеү йөйө ярҙамында ҡайығандар. Тармаҡланып киткән ҡыуаҡтар теҙмәһе рәүешендәге үҫемлек биҙәге йәки гөлләмәләр теҙмәһе менән өрләк шаршауын зауыҡлағандар (РЭМ, кол. 6973-13). Гөлләмәләр ярҙамында ҡайһы бер осраҡта күлдәктең киң балитәген, алъяпҡыстың түшен йә итәген биҙәгәндәр; әммә ҡайылған күлдәктәр, бигерәк тә алъяпҡыстар көньяҡ-көнбайыш башҡорттары араһында һуң таралған.

XX быуат баштарында һары сатин тауарҙан тегелгән һәм балитәге ҡабартма ҡайыу ярҙамында биҙәлгән, Стәрлетамаҡ районы Айыусы ауылынан алынған күлдәк Рәсәй этнография музейында һаҡлана, уның менән комплектта түше һәм итәге нағышланған күк алъяпҡыс та бар (РЭМ, кол. 6973-25;26).



*Түшелдеректәге зооморф һүрәт.*



*Ҡайылған алъяпҡыслы ҡатын (БР, Миәкә районы, Яңы Илсеғол ауылы). Автор фотоһы. 1963*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

АФАРИН!

**Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды ошо көндәрҙә "Эшлекле башҡорт теле" атамалы яңы уҡыу әсбабы һәм уға ҡушымтаны киң йәмәғәтселеккә тәҡдим итте. Был баҫма республиканың төрлө өлкәләрендә рәсми эш ҡағыҙҙары менән эш иткән, коллегалары менән башҡортса эшлекле һөйләшеүҙәр алып барғанда мәҙәниле телмәр тоторға теләгән кешеләр өсөн бик файҙалы ҡулланма булмаҡсы. Проект Башҡортостан Башлығының 2 миллион 300 мең һумлыҡ грантына тормошҡа ашырыла һәм 1500-әр дана булып донъя күргән.**

# ЭШЛЕКЛЕЛӘР ӨСӨН...

## башҡорт теле әсбабы




"Эшлекле башҡорт теле" уҡыу әсбабы һәм уға ҡушымта - эш ҡағыҙы өлгөләренән тора. Әсбап авторҙары Гөлфирә Абдуллина, Рита Аҡбулатова, Нурия Әсәҙуллина һәм Гөлназ Вәлиева. Уның йөкмәткеһенә эшлекле башҡорт теленең грамматик, синтактик үҙенсәлектәре, эшлекле аралашыу мәҙәниәте, телмәр тәртибе һәм быға миҫалдар, рәсми-эш йөрөтөүгә ҡағылған русса-башҡортса белешмә-һүҙлек индерелгән. Һүҙлектең авторы Нурия Әсәҙуллина әйтеүенсә, унда 3 меңдән ашыу һүҙ бирелгән һәм элек тәржемә ителмәй русса ҡулланылған күп һүҙҙәр архивтарҙағы төрлө сығанаҡтарҙан ҡарап, тергеҙелгән. Ә бына эш ҡағыҙы өлгөләре тупланған айырым ҡушымта филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисаметдинованың (авторҙаштары филология фәндәре кандидаттары Н.Ф. Суфиянова һәм Р.Ә. Сөләймәнова, Ф.Ф. Ғәзизова) 2006 йылда донъя күргән баҫмаһын тулыландырып, яңынан нәшер ителгән. Бында 72 төп рәсми эш ҡағыҙҙарының тәғәйенләнеше тураһында мәғлүмәт һәм башҡортса-русса бирелгән әҙер өлгөләр күрһәтелә.

- Башҡорт теленең һөйләү теленә мәктәптә лә өйрәнергә була бөгөн, теләге булған кеше 500 һүҙ ятлаһа, аралаша ала. Ә бына рәсми эш ҡағыҙҙары менән эш итеү етдилек талап итә, бында өлгөләр кәрәк. Ваҡытында беҙ уларҙы әҙерләгәйнек, әммә 2006 йылдан алып ҡайһы бер үҙгәрештәр булды, йәғни ул саҡта русса ҡулланылған күп кенә терминдар бөгөн башҡортсаға тәржемә ителгән. Шуға һүҙлеккә өҫтәлмәләр индерелде, - тине профессор Фирҙәүес Хисаметдинова һәм Фондтың башҡорт телен популярлаштырыу йүнәлешендә эшен дауам итеренә ышанысын белдерҙе. - Тел, тарих һәм әҙәбиәт институты Башҡортостан Республикаһы тораҡ пункттары атамаларының русса-башҡортса һүҙлек-белешмәһе, көнкүреш хеҙмәте өлкәһендә эшләүселәр өсөн русса-башҡортса һүҙлек, ЗАГС хеҙмәткәрҙәренең өҫтәл китабы, Башҡортостандың һыу объекттары, республика ҡалаларының урам атамаларының русса-башҡортса һүҙлектәрен, БАССР-ҙың топонимдар һүҙлеге кеүек бихисап кәрәкле китаптар нәшер иткәйне. Ләкин улар аҙ дана менән баҫылған һәм бөгөн ЗАГС хеҙмәткәрҙәре беҙҙең китапты ҡулланырға теләр ине лә бит, таратылып бөткән. Йәки көнкүреш хеҙмәте өлкәһендә эшләүселәр шул уҡ алтаҡталарҙы дөрөҫ яҙырға теләр ине лә, уларға әҙер өлгөләр тупланған ҡулланма юҡ. Эшлекле башҡорт телен бына шундай төрлө өлкә хеҙмәткәрҙәренә кәрәкле һүҙлектәр, ҡулланмалар менән тәьмин итеп тулыландырыуҙы дауам итеү зарур. "Эшлекле башҡорт теле" кеүек ҡулға эләгерлек китаптарыбыҙ күп булһын.

"Эшлекле башҡорт теле" әсбабы ни бары 1500 дана менән нәшер ителһә лә, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды уның электрон вариантын да тәҡдим итә. Әлеге ваҡытта айырым ҡушымта итеп тә әҙерләп сығарыу өсөн белгестәр менән һөйләшеүҙәр алып барыла, тип хәбәр итте Фонд директоры Гөлназ Йосопова. "Беҙ быйыл да эшлекле башҡорт теле курсын ойошторасаҡбыҙ. Теләүселәрҙән төркөм тупланғас та уҡытыуҙы башлайбыҙ", - ти Гөлназ Рауил ҡыҙы. Ә бына "Эшлекле башҡорт теле"н ҡулланыу даирәһенә килгәндә, Башҡортостан Башлығының ижтимағи-сәйәси үҫеш буйынса идаралығы милли сәйәсәтте тормошҡа ашырыу бүлеге советнигы Гөлсәсәк Мөхәмәтйәнова уның Хөкүмәт, министрлыҡтар, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай, башҡарма власть органдары, республика муниципалитеттарында талап ителеүе тураһында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, һуңғы ике йылда республикала дәүләт һәм урындағы үҙидаралыҡ органдары эшендә башҡорт телен ҡулланыу мөмкинлектәрен киңәйтеү йәһәтенән һөҙөмтәле һәм тәртипкә һалынған, маҡсатлы эш алып барыла. Мәҫәлән, 2019 йыл дауамында барлыҡ муниципаль райондарҙа һәм ҡала округтарында башҡорт дәүләт телендә берәр, икешәр доклад уҡылған һәм киләсәктә был өлкәлә "Эшлекле башҡорт теле" әсбабы ҙур ярҙам буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тел йәшәһен өсөн ул ғаилә кимәлендә генә түгел, дәүләт һәм юғары власть кимәлендә әүҙем ҡулланылырға тейеш. Бөгөн күп милләтле Рәсәй халыҡтарының телдәрен йәшәтеү өсөн рәсми эш ҡағыҙҙарында ҡулланыу даирәһен киңәйтеү талап ителеүе барыһына ла мәғлүм. Республикабыҙҙа башҡорт телен үҫтереү йәһәтенән маҡсатлы, бербер артлы эштәр атҡарылыуын күреү ҡыуандырҙы һәм "Эшлекле башҡорт теле" әсбабы был өлкәлә беренсе проект түгел, һуңғыһы ла булмаһын.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АЙЫҒАЙЫҠ!

# ФӘҺЕМ АЛЫРЛЫҠ БУЛҺЫН

**Республикала ныҡлап традицияға инә башлаған бер фәһемле конкурс бар - "Айыҡ ауыл". Эскелек илдә тамыр йәйгән мәлдә, был конкурстың килеп сығыуы бик урынлы. Тик ул исем өсөн генә үткәрелмәһен ине.**

Беҙ бөтәбеҙ ҙә эскән кеше менән айыҡ тормош алып барыусы кешенең айырмаһын күрәбеҙ. Шунлыҡтан, конкурс, тип, төрлө саралар үткәреп, алдынғылыҡ яулау түгел, ә тәрбиәләгәндәй, өлгө алып, фәһем биргәндәй, уйландырғандай саралар теҙмәһен уҙғарыу мөһим. Бында миҫалдарҙы күп килтерергә була, тик мин билдәле фәйләсуф Сәйф Сараи менән бәйле бер һөйләшкә туҡталмаҡсымын. Шәкерте унан һораған: "Һеҙ нисек ошо юғарылыҡҡа күтәрелә алдығыҙ, һеҙҙе барыһы ла хөрмәт итә?" "Мин үҙемдән түбәндәргә ҡарап - фәһем, ә юғарыларынан өлгө алдым" , - тигән фәйләсуф.

Тимәк, конкурста ҡатнашҡан һәр ауыл эшен бына ошондай алым, ошо маҡсат менән ойошторһон ине, йәғни тормоштоң кире яғынан (эскелектән) фәһем алып, ыңғай яғынан өлгө алырлыҡ булһын үткәрелгән был саралар. Әсә һөтө менән инмәгән, тана һөтө менән инмәҫ, тиҙәр бит. Шулай булғас, хәҙер инде эскелек һаҙлығына батып барғандар менән эште өгөт һүҙе ярҙамында түгел, өлгө алырҙай эш миҫалында алып барырға кәрәк булыр. Ауылда бер генә кешене булһа ла ошо һаҙлыҡтан айырып ала алабыҙ икән, тимәк, конкурс йөкмәткеһе буйынса дөрөҫ йүнәлеш һайлаған.

Баймаҡ районы Ниғәмәт биләмәһенең Ниғәмәт ауылы ла ошо конкурста ҡатнашырға батырсылыҡ итте. Маҡсат - халыҡты әүҙемләштереп, эскелеккә ҡаршы түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт тәрбиәләү. Былтыр районда "Сәләмәт ауыл" конкурсында ҡатнашып, Гран-при алыу ҙа ауылдаштарға бер аҙ дәрт һәм әүҙемлек бирҙе, тип уйлайым. Артабан эште бына шул айыҡлыҡты булдырыуҙы ғаиләлә башлап, мәктәп һәм йәмәғәтселек менән бергә башҡарғанда ғына һөҙөмтә булыуын онотмаҫҡа тейештәр.

**Рәйсә ИҪӘНБАЕВА.**
**Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылы.**

✓ **Шул саҡ окопта ятҡандарҙан кемдер аңлашылмаған телдә ҡысҡырып ебәрҙе. 20-ләп башҡорт һалдаты окоптан күтәрелеп, разведчиктарға ярҙамға ташланғайны, улар артынан баяғы ғәскәрҙең бөтә башҡорт һалдаттары күтәрелде.**



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# АСЫЛМАҒАН СЕРҘӘР КҮП




**Америка Ҡушма Штаттарында - өс, Берләштерелгән Короллектә бер урамға исем башҡорт халҡы хөрмәтенә ҡушылған. Интернеттың эҙләү хеҙмәте Калифорнияның Корона биҫтәһендә - Башҡорт урамы, Төньяҡ Каролинаның Монро ҡалаһында - Башҡорт тыҡрығы, Эльк Гроувта - Башҡорт боролошо, Бөйөк Британияның Уэстбэри ҡалаһында Башҡорт юлы урамдарын күрһәтә.**

Һәм шуныһы ғәжәп, американдарҙың кемеһенән генә һорама - Башҡортостан тураһында үҙҙәре бер ни белмәй. Әлегә тиклем был урамдарҙың ни өсөн Башҡорт исеме менән аталыуына бер генә яуап та табылманы. АҠШ-тағы Эльк-Гроув ҡалаһы хакимиәтендә лә Башҡорт боролошо атамаһының тарихын һөйләй алманылар. "Ҡағиҙә булараҡ, урамдарға исемде унда йәшәүселәр үҙҙәре бирһә лә бында бер ниндәй ҙә географик бәйләнеш күҙәтелмәй", - ти ҡала хакимиәте хеҙмәткәре Джейсон Линдгрен.

Һәр хәлдә, Америкалағы был урамдарҙың исемдәре ошондағы башҡорт бөҙрә тоҡомло аттарға бәйлеләр. Был тоҡом аттарының тарихы бик серле. 1898 йылда аталы-уллы Демелиҙар Үҙәк Невадалағы таулы Остин биҫтәһендә эре бөҙрәле ғәҙәти булмаған аттарҙы күреп ҡала. Атай менән улы был аттар менән ҡыҙыҡһына башлай: улар бында ҡайҙан килеп сыҡҡан? Ләкин был һорауға әле булһа яуап юҡ. Шулай ҙа был темаға бәхәс тынмаған, тик барыбер һорау яуапһыҙ ҡалған. Америкалағы бөҙрә башҡорт тоҡомло аттың бында килеп сығыу тарихы, шулай итеп, билдәһеҙ ҡала килә. Әйткәндәй, был ифрат ҙур популярлыҡ менән файҙаланылыусы тоҡом аттары. АҠШ-та XIX быуат ахырынан алып Америка бөҙрә башҡорт тоҡомло ошо аттар үрсетелә. Һәм ошо бер быуаттан ашыу осор эсендә, ысынлап та, башҡорт тоҡомло аттар менән бик күп оҡшашлыҡтары булған был аттарҙың килеп сығышы - билдәһеҙ, серле тарих . Иң тәүҙә уларҙың ялбыр йөнтәҫлеге иғтибарҙы йәлеп итә. Дөрөҫ, бөҙрәләре һәм йөндәре оҙонлоғо буйынса америка керли тоҡомо күпкә алдыраҡ, ҡайһыларының йөнө хатта ҡаракүлгә оҡшап тора. Башҡортостан һәм Америкала үрсетелгән был аттарҙың икенсе бер үҙенсәлеге - уларҙың иҫ китмәле аҡыллылығы һәм кешегә эйәләшеп барыуҙары. Бөҙрә аттар үрсетеү буйынса халыҡ-ара ойошмала билдәләүҙәренсә, башҡорт тоҡомлолар иң кешелекле һәм аралашырға яратыусы аттар. Темпераменттары буйынса американдар уларҙы эт көсөгө йә бесәй балаһы менән сағыштыра. Улай ғына ла түгел, бөҙрә аттар әрләү, асыуланыу кеүек йә башҡа төрлө яза сараларын бик ауыр кисерә. Уларҙың был сифатын ат үрсетеү менән шөғөлләнеүсе белгестәр етешһеҙлек тип иҫәпләй.

Башҡорт аттарының Америка континентына килеп инеүҙәре тураһында бик күп фараздар йәшәһә лә, уларҙың береһе лә һорауға тулы яуап бирә алмай. Ат үрсетеү буйынса нәшер ителеүсе September журналында (2003) Кэрин Барил тигән белгестең яҙыуынса, бөҙрә башҡорт аттарының килеп сығыу тарихын өйрәнеү Агата Кристи детективтарын уҡыу менән бәрәбәр. "Инде генә мәсьәлә асыҡланды, тип уйлаһаң, һинең фараздарыңды селпәрәмә килтереүсе яңы мәғлүмәттәр килеп сыға", - тип яҙа ул. Америка ат үрсетеүселәре фекеренсә, был тоҡом 1700 йылдарҙа Рәсәйҙә ҡулға эйәләштерелгән һәм аҙаҡ ундағы фермерҙар тарафынан ситкә сығарылған. Ләкин Рәсәйҙән Америкаға аттар килтерелеүе хаҡында бер генә яҙма дәлил дә юҡ. Шул уҡ ваҡытта башҡорт аттарының Аляска һәм Американың Көнбайыш яр буйына рус колонистары менән бергә килтерелгәнен раҫлаусы мәғлүмәттәр ҙә юҡ. Ул ваҡыттарҙа Америкаға алып сығылған аттар ауыр сәфәрҙе күтәрә алмайынса, юлда һәләк булғандар, тип иҫәпләнә. Сиу ҡәбиләһе индеецтарының яҙма документтарында 1800 йылдар башында Кроу ҡәбиләһендә бер нисә бөҙрә аттың урланыуы тураһында иҫкә алына. Билдәле цирк оҫтаһы Бинеас Барнам 1840 йылда йөндәре оҙон һәм бөҙрәләнеп торған бер нисә ат һатып алыуы тураһында яҙа.

XIX быуат башында Чарльз Дарвиндың Көньяҡ Американың бөҙрә аттары хаҡында яҙған ҡылыҡһырламаһы билдәле. Бынан тыш, индеецтарҙың Сиу ҡәбиләһе юлбашсылары һәм шамандарының бөҙрә аттарҙа һыбай йөрөгәндәре билдәле. Был ғәҙәт изге мәғәнәгә эйә булған. Индеецтарҙың 1876 йылғы Литл Бигхорн янындағы һуғышҡа арналған һүрәте бар. Унда индеецтарҙың барыһы ла бөҙрә аттарҙа. Сиу ҡәбиләһе индеецтарының теле 80 процентҡа башҡорт теленә оҡшаш. Был тоҡом аттарҙың килеп сығышы билдәһеҙ булыуға ҡарамаҫтан, улар тәүтормош аттарҙан ҡалған сифаттарға эйә һәм уларға ҡарата башҡорт исеме ныҡынып ҡалған.

Был тикшеренеүҙәр ялған фараздарҙы юҡҡа сығарыуҙарына ҡарамаҫтан, төп һорау - Америкала бөҙрә аттарҙың ҡасан һәм нисек килеп сығышын аңлата алмаған. Питер Дэмил менән уның улы Беннига иректә йөрөгән тәүтормош сифатлы аттарҙы нисек тотоп алыу мөмкин булғандыр - билдәһеҙ. Эҫе һәм һауы Эфиопияла, мәҫәлән, Өфө ҡалаһы, ә Иранда Салауат ауылы булған кеүек....

Әйткәндәй, әйҙәгеҙ, ҡараштарыбыҙҙы Ер планетаһынан икһеҙ-сикһеҙ йыһанға йүнәлтәйек. Унда, ҡайҙалыр Марс менән Юпитер араһында, Салауат астероиды әйләнә. Уны 1979 йылда Бельгия астрономдары асҡан һәм башҡорт батыры Салауат Юлаев хөрмәтенә аталған башҡорт ҡалаһы Салауат исемен биргән.

**Интернет материалын файҙаланып,**
**Ф. МӨХӘМӘТШИНА**
**әҙерләне.**

*ХӘТЕРКИТАП*

## БАШҠОРТ ҺАЛДАТЫНЫҢ БАТЫРЛЫҒЫ



**1943 йылдың июнендә Харьковҡа Башҡортостандан һәм Ырымбурҙан өҫтәлмә ғәскәр килтерҙеләр. Ғәскәрҙәгеләрҙең барыһы ла башҡорт булып сыҡты.**

Тылда тукланыу яҡшы булмаған, күрәһең, егеттәр бик ябыҡ ине. Өс көндән тәүге атака булды. Башҡорттар тыныс ҡына ҡоралдарын таҙартты һәм үҙҙәренең винтовкалары, бысаҡтары менән һөйләште... Беҙ бөтәбеҙ ҙә: "Кем ҡорал менән һөйләшә инде, беҙгә кемде ебәрҙеләр икән?" - тип көләмһерәп ҡуйҙыҡ. Һөжүм башланыр алдынан беҙҙең разведка дошман тылынан ҡайтты. Беҙ разведчиктарҙың беҙгә табан йүгергәнен, улар артынан фашистар ҡыуа төшкәнен шәйләп ҡалдыҡ. Беҙҙекеләрҙең һуғыш припастары бөткәйне, шуға ут асыу мөмкинлеге юҡ ине. Немецтар ҡыуып етеп, беҙҙең разведчиктарҙы пленға алмаҡсы булды. Ҡул һуғышы башланды. Беҙ 400 метр самаһындағы был хәлде окопта күҙәтеп ятабыҙ, кәрәк, ата алмайбыҙ, үҙебеҙҙекеләргә тейҙереүебеҙ ихтимал. Разведчиктар 4-әү, фашистар 10-ау тирәһе.

Шул саҡ окопта ятҡандарҙан кемдер аңлашылмаған телдә ҡысҡырып ебәрҙе. 20-ләп башҡорт һалдаты окоптан күтәрелеп, разведчиктарға ярҙамға ташланғайны, улар артынан баяғы ғәскәрҙең бөтә башҡорт һалдаттары күтәрелде. Рота командиры нимә эшләргә белмәй. Һөжүмгә команда булмағайны бит.

Башҡорттар 400 метрҙы йүгереп барып еткәнсе, разведчиктар сәнскеләнеп, туҡмалып, яраланып бөткәйне. Быны күргән башҡорттар унлаған фашисты юҡ итеп, үс алырға фрицтар окобына йүнәлде. Окопта һуғыш барған ваҡытта беҙҙең рота ла күтәрелде. Немецтарҙың нығытылған биләмәһен яулап алдыҡ...

Бына шулай беренсе тапҡыр башҡорттарҙың нисек һуғышҡанын күрҙем. Уларҙың яртыһы тәүге һуғышта уҡ һәләк булды. Ябыҡ булғанлыҡтан, 13-14 йәшлек кенә булып күренгән 18 йәшлек егеттәрҙең үле кәүҙәһе янында бөтә рота иланы. Хөрмәт һәм тағы бер тапҡыр хөрмәт менән ҡарайым һеҙгә, башҡорттар.

**И. В. Буряк.**
**Донецк.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



## ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Бөтмәҫ дандары ҡалды

1942 йылдың июль баштарында 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры урынбаҫары вазифаһына тәжрибәле, һәр яҡтан хәрби әҙерлекле офицер - полковник Григорий Андреевич Белов тәғәйенләнә. Тап шул саҡта башҡорт атлылары тәүге хәрби сирҡаныс ала - Елец һәм Воронеж ҡалалары йүнәлешендә һан һәм ҡорал яғынан күпкә өҫтөн булған немец частарының аяуһыҙ һөжүмен батырҙарса кире ҡағып, оборона һуғыштары алып бара. Григорий Белов 1942 йылдың 10 июлендә дивизия штабы урынлашҡан Тербуны-II ауылына килеп етә, бында уны комдив Миңлеғәли Шайморатов һәм дивизия комиссары Мөбәрәк Нәзиров ихлас ҡаршылап, шунда уҡ фронттағы оператив хәл менән таныштыра. Әйтергә кәрәк, һуғыштан һуң байтаҡ йылдар үткәс, инде генерал-лейтенант званиеһын алған яугир, генерал-майор М.М. Шайморатов яу ҡырында батырҙарса һәләк булғандан һуң ошо дивизия командиры булып киткән офицер үҙенең хәтирәләрендә башҡорт атлылары һәм уларҙың командирҙарына оло баһа биргән, улар хаҡында бик күп маҡтау һүҙҙәрен белдергән. Дивизияның данлы тарихында беҙҙең генералыбыҙҙы алыштырған командир Григорий Белов та лайыҡлы урын биләй. Тап шуның өсөн ошо яҙмаларыбыҙҙа уның хәтирәләренән (Г.А. Белов. "Путь мужества и славы". Башкнигоиздат, Уфа - 1978) алынған мәғлүмәттәрҙе уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.

"...Дивизия командирынан частарҙы тикшереү тураһында күрһәтмә алғас, мин дивизияның уң флангыһында оборона тотҡан 275-се атлы полкка юлландым. Кусимов мине ҡунаҡсыллыҡ менән ҡаршы алды. Танышабыҙ. Беҙҙең әңгәмәне бүлдереп, бер туҡтауһыҙ телефон шылтырай. Т.Т. Кусимов тиҙ генә яуап ҡайтара, тейешле күрһәтмәләр бирә. Етди, оҙон буйлы, киң яурынлы. Ҡара күҙҙәре аҙ йоҡлауҙан ҡыҙарып киткән, әммә ҡараштары, ошо оло кәүҙәнең ғәйрәтле энергияһын сағылдырып, осҡонланып тора. Кусимовтың һөйләшеүе лә дәртле. Һөйләшеүенән милләтен билдәләүе ауыр, тик киңерәк битле йөҙө һәм күҙҙәре генә уның башҡорт икәнлеген белдерә...

Тәүҙәрәк Т.Т. Кусимов минә бер ни тиклем экспансив, үҙенең ҡыйыулығын күрһәтергә тырышҡан офицер һымаҡ тойолдо. Әммә мин М.М. Шайморатовтан уның ҡарарҙар ҡабул иткән саҡта ашығып бармауы һәм һаҡ булыуы хаҡында белә инем, һәм тиҙҙән мин быға инандым.

Һуңынан Т.Т. Кусимов үҙенең полкы менән Черниговты азат итеүҙә ҡатнашты, Днепрҙы кисеп сыҡты, Речица, Мозырь ҡалаларын азат итеп, һуғыша-һуғыша Владимир-Волынскиға тиклем барып етте. Днепр аша сығыу һуғыштары өсөн Ватаныбыҙ уға Советтар Союзы Геройы исемен бирҙе.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Башҡортостандың да үҙенә генә хас ҡабатланмаҫ, уникаль ҡаҙаныштары, рухи һәм матди байлығы күп. Халыҡтың ошо мираҫын матур төргәккә төрөп, беҙгә һәйбәт килем бирерлек итеп туристарға һатыу - беҙҙең өсөн төп мәсьәлә.***



**Ер шарындағы ҡайһы бер төбәк халҡы ер тығыҙлығынан йонсой, ә Уралтау буйында, беҙҙең ожмахтай Башҡортостаныбыҙҙа, шағир әйтмешләй, "Хоҙай үҙе ҡыҙығыр" ерҙә - иркенлек. Әлхәмдүлиллаһ, собханаллаһ, бәрәкәллаһ, тип тәкбир әйтеп кенә йәшәрлек тә бит. Әммә беҙ уның ҡәҙерен беләбеҙме? Ошо һорау әленән-әле телдә әйләнә лә, ҡан һауа йөрәккә, ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған батырҙарҙың оран-зары беҙҙең өсөн заңға-ҡанунға әйләнә: "Тыуған ерҙе яратығыҙ, һаҡлағыҙ!" Башҡортостан Республикаһының Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Салауат Таһир улы НАФИҠОВ менән әңгәмә лә ошо юҫыҡта башланып китте.**

# ТУРИСТ ТА,

**Һуңғы ваҡытта беҙҙә лә туризмды киң йәйелдереү тураһында һүҙ алып барыла. Яҡшымы был, яманмы был - уға ниндәйерәк баһа бирерһегеҙ?**

- Туризм - бөтә донъяны ялмап ала барған күренеш. Уның яҡшы яғы бик күп, ул урындағы власть һәм халыҡ өсөн ҙур килем сығанағы була ала. Беҙҙең гүзәл төбәкте күрергә былай ҙа халыҡ элек-электән эркелешеп килә бит. Ҡырағай туризм булған ерҙә тәбиғәтебеҙгә, әйләнә-тирәгә күпме зыян килтерелә. Шуға ла беҙ рәсми туризм ойоштороу менән әүҙемерәк шөғөлләнергә тейешбеҙ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Башҡортостанда туризм бик популяр өлкә түгел, уны үҫтерәһе уй-ниәт, план-программалар һуңғы йылдарҙа ғына эшкә ашырыла башланы.

**Был өлкәлә эшләү һеҙҙең электән килгән хыял инеме?**

- Электән килгән хыялым тип әйтә алмам. Мин был өлкәлә эшләү тураһында әллә ни уйламай ҙа инем, республика Башлығы был эшкә үҙе саҡырғас, килдем. Әбйәлил районы Ташбулат ауылынанмын. Беҙҙең ғаиләлә тәрбиә мәсьәләһендә атайыбыҙҙың йоғонтоһо көслө булды. Ул уҡытыусы ине, 1990 йылдарҙан ун биш йыллап мәктәп директоры булды. Беҙҙә илһөйәрлек, ерһөйәрлек тәрбиәләне, ошо тәрбиә йоғонтоһо менән беҙ ил өсөн, йәмғиәт өсөн эшләүҙән ҡурҡманыҡ. Ауыл биләмәһендә рәйес булдым, аҙаҡ "Яҡтыкүл" шифаханаһында эшләнем, уға "Березка" ял йортон ҡушып, дәүләт һәм республикаға хеҙмәт итерлек шифаханаға әйләндерҙек. Бюджетлы ял йорто булып китте ул.

**Шифахананы күтәреү һеҙҙең өсөн тәжрибә туплау осоро булғандыр. Әммә бөгөн Башҡортостан статистикаһы нимә ти? Һуңғы йылда республикаға туристар ағымы өс мәртәбә артты, ти.**

- Артты, тик туристарҙы ҡаршылау, ял иттереү шарттары булдырыу буйынса проблемаларыбыҙ хәл ителеп бөтмәне әле. Республикала туризм буйынса белгестәр бөтөнләй юҡ. Беҙҙең дәүләт комитеты барлыҡҡа килеүгә бер нисә генә ай. Йәғни беҙҙең коллектив әлегә стартта ғына тора. Эш саҡ башлана, тимәксемен.

**Ярай, эш башы хәйерле булһын. Башҡортостан элек-электән көтөү-көтөү күсмәндене, ас беттәй аяуһыҙ нәфсе эйәләрен һәм һоҡланып йөрөгән ҡунаҡтарҙы ҡаршылап-ҡабул итә торған ил. "Иң ҡунаҡсыл халыҡ" тигән данybыҙ бар. Бындай "дан" беҙгә шатлыҡ та, хәсрәт тә, мәшәҡәт тә, ҡытлыҡ та алып килгән. Бөгөн килеп беҙ "Туризм үҙәге" булырға өйрәнәбеҙ, мәжбүрбеҙ. Ниндәй үҙенсәлектәре бар был башланғыстың?**

- Беренсенән, Башҡортостан туризмының ике айырым үҙенсәлеген белергә кәрәк: материаль мәҙәни мираҫ һәм материаль булмаған мәҙәни мираҫ. Материаль, йәғни күҙ менән күреп, ҡул менән тотоп ҡарарлыҡ әйберҙәр, күренештәр ниндәй? Мәмерйә, тау-урман, йылғакүлдәр кеүек тәбиғи объекттар - улар беҙҙең материаль байлыҡ. Кеше ҡулы менән ижад ителгән һәйкәлдәр, күперҙәр, ауыл-ҡала-ҡәлғәләр ҙә шунда инә.

Ә материаль булмаған байлыҡ нимәнән ғибәрәт? Быныһы инде халыҡтарҙың, кешеләрҙең күңеле, таланты менән барлыҡҡа килгән күркәм ҡаҙаныштар: йыр-бейеү, эпостар, донъя көтөү оҫталығы, тормош тәжрибәһен туплаған белемдәре... Улар - шулай уҡ ҡул эштәре һәм төрлө халыҡсан һөнәр-кәсеп өлгөләре. Һәр төбәккә генә хас булғанса, Башҡортостандың да үҙенә генә хас ҡабатланмаҫ, уникаль ҡаҙаныштары, рухи һәм матди байлығы күп. Халыҡтың ошо мираҫын матур төргәккә төрөп, беҙгә һәйбәт килем бирерлек итеп туристарға һатыу - беҙҙең өсөн бөгөн төп мәсьәлә.

Геопарктар ("Янғантау", киләсәктә буласаҡ "Торатау") тап ошондай туризм үҙәктәре, унда кешеләр үҙҙәренә яҡшы эш табып, килгән туристарҙы хеҙмәтләндерәсәк урындар. Туристар ағымын тап ошо байлыҡтар үҙенә ылыҡтырасаҡ. Мәҫәлән, "Янғантау" геопаркында йәшәгән халыҡтың тормош-көнкүреше, нисек донъя көтөүе, ниндәй үҙенсәлекле нәмәләр тәҡдим итә алыуы бик мөһим. Быуаттар буйы үҙгәрмәй торған нәмәләр бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле бит: йәшәү рәүеше, тәбиғәт күренештәре, ҡул эш оҫталарының ижады... Бөтә нәмә лә шуға ҡоролорға тейеш. Геопарктар тап шул маҡсатта ойошторола. Хәйер, килгән кешене арбарлыҡ, уның иғтибарын үҙенә нык тартырлыҡ сағыу геологик объект та геопарк нигеҙендә булырға тейеш. Ысын мәғәнәһендә, геопарк - ул кешеләр һәм улар көн күргән территория-төбәк.

**Сит илдә лә, бигерәк тә беҙҙең Рәсәйҙә күп ерле халыҡ үҙенең тарихын онотҡан, юғалтҡан, ошо хәлгә дусар ителгән. Һәм был маңҡортлоҡҡа алып килгән шарттар бөгөн бер кемгә лә сер түгел: үҙенең тарихынан, исеменән, еренән яҙған ҡәүемдәр бар. Ошо ерле халыҡ мәсьәләләре һеҙҙең эштә нисек яҡтыртыла?**

- Башҡортостанда тыуған һәр кеше, бигерәк тә икенсе йә өсөнсө, бишенсе йә етенсе быуын вәкиле булып йәшәгән кеше был ерҙе үҙ тыуған иле тип һанай. Һәм был дөрөҫ тә. Ата-бабаһы ҡасандыр йәшәгән Рязань ере, Сыуаш иле йә Мари иле уға тыуған ер булмай бит инде. Шуға күрә, мин бөтә башҡортостандарҙың бер төптән берҙәм, бер яҡлы илһөйәр-патриот булыуын яҡлайым. Улар ҙа үҙҙәрен тыуған ер өсөн яуаплы итеп тойорға тейеш һәм шулай булһын да. Уларға, был һеҙҙең ерегеҙ түгел, тип нисек әйтмәк кәрәк. Төп башҡорттар кеүек, улар ҙа ошо ер кешеләре, тип уйлайым.

**Һеҙҙең программа буйынса туристик хеҙмәт ниҙән ғибәрәт?**

- Туризм - ул аҡса, иҡтисад, яңы эш урындары. Тик ул аҡсаны табыр өсөн шарттар кәрәк. Карл Марксты уҡыған иҡтисадсылар был мәсьәләне тиҙерәк сисә. Мәҫәлән, Шүлгәнташта кеше күп йөрөһөн, туристар ағылһын, тиһәң, иң тәүҙә яҡшы юл, шунан мотлаҡ тейешле инфраструктура - туалет, ашхана, ҡунаҡхана төҙөргә кәрәк. Кеше ағымы булһа, тимәк, ихтыяж һәм һорау бар. Шулары булһа, ҡалғаны ялғана. Өсөнсө этап: тарихи мәғлүмәт, легенда, ауыҙтел ижады һәм мәҙәни-этнографик күренештәр теҙмәһе. Былары инде килгән халыҡты тағы ла нығыраҡ яҡынайта һәм әүрәтә торған ысулдар, инструменттар.

**Беҙҙә үҙебеҙгә бик тә ғәзиз булған тәбиғәт байлыҡтары ғына түгел, тарихи-мәҙәни урындар күп. Уларҙың ошо бәҫен нисек һаҡларға?**

- Кеше артабан үҫһен өсөн уға яңы мәғлүмәт, белем, тәьҫораттар талап ителә. Йәш бала нисек көндән-көн донъяны аса, кеше шулай уҡ ғүмере буйы тормошто-йәшәйеште өйрәнә. Был - уның булмышы. Ошоно иҫәпкә алырға кәрәк. Яңыға ынтылмаған, өйрәнмәгән һәм наҙан ҡалған кеше генә бик аяныс һәм йәл була. Ни өсөн кеше туҡтамай сәфәр сыға, телевизор йә интернет аша, китап-гәзит аша яңы тарафтарға "сәйәхәт итә", белемен һәм хис-тойғоларын киңәйтә? Туризмды ойошторғанда ла иң тәү нәүбәттә кешенең ошо ҡыҙыҡһыныусанлығын хөрмәт итеү һәм уға тейешле йүнәлештә яңылыҡ өҫтәү, аңын һәм күңелен яңы хистәр менән тулыландырыуға ирешеү кәрәк була. Бөтә донъяла туризм индустрияһы ошо ҡағиҙә буйынса эшләй. Беҙҙең башҡорт халҡының әйтеме лә бар: "Күп йәшәгән белмәй, күп күргән белә", "Йөҙ тапҡыр ишеткәнсе, бер мәртәбә күр" һәм башҡалар.

Кешеләр яңы эмоция - тәьҫорат, хистәр артынан йөрөй. Туризм - ул яңы эмоциялар. Кемдер рәхәт тойғолар эҙләй, кемгәләр ҡурҡыныс һәм хәтәре лә кәрәк. Бишбармаҡ - шул уҡ эмоция, тәм тойоу, тәмләү хисе. Башҡорт милли кейеме - эмоция, күреп һоҡланыу, өйрәнеү, кейеп ҡарау, һатып алыу - бөтәһе лә кешегә нык тәьҫир итә. Башҡорт халыҡ көйҙәрен тыңлау - шулай уҡ эмоция, ҡушылып йырлаһа йәки бейеп тә ебәрһә, бөтөнләй яңы донъя асыла! Бейек тауҙарға үрмәләү, текә ҡая ситенән шыуышыу - һәммәһенә кеше йөрәк тулауы, ярһыу хисләнеү менән яуап бирә. Шүлгәнташ картиналарын күреү, шул мәҙәниәт эсенә су-





***✓ Туристар килер ул. Улар беҙҙең гүзәл тәбиғәтте яратыр. Ләкин... ҡоро буш ерҙәргә килмәй бит улар, бында йәшәгән халайыҡтарҙың күңел торошо менән дә танышырға, яҡынайырға теләйәсәк.***

# ЮРИСТ ТА БУЛ!

мыу - бына тигән ҡатлы-ҡатлы эмоциялар теҙмәһе. Кешегә тап ошо эмоция кәрәк, шуны көҫәп-эҙләп юлға сыға, башын юғалтырҙай булып, донъяһын онотоп, эшен-ялын ситкә ҡуйып, ал-ял белмәй ил гиҙә. Был эмоция донъяны танып белеү шатлығынан, йәшәйеште аңлай белеү ҡыуанысынандыр. Кешегә үҙенең мейеһен, аңын файҙаланыу бик ҙур кинәнес бирә. Күңеле бай кешенән дә бәхетлерәк йән эйәһе бар микән?

**Ни өсөн беҙ тәбиғәткә тартылабыҙ?**

- Һуңғы ун йыл эсендә кешелек таш диуарҙар эсенә бикләнде, хәрәкәт сикләнгән хеҙмәт төрө күбәйҙе - бөксәйеп-бөкрәйеп ултырыу, бары тик ҡул бармағын ғына ҡыбырлатыр көс сығарыу кеүек ныҡ ҡыҫылған хәлдә йәшәү кешелекте "сығырынан сығарҙы", шуға күрә хәҙер кинәт ҡыбырлау-хәрәкәтләнеү, гиҙеү-йөрөү рәүешендәге көнитмешкә ынтыла халыҡ, был үҙенән-үҙе шулай килеп сыға. Кешнең ҡаны, ағзалары, мейеһе ошондай хәрәкәтте һәм бәрәкәтте талап итә. Нишләп турист ағымы көсәйҙе, нимә ҡарап планета буйлап сабышып йөрөй әҙәм балаһы, тип аптыраусылар үҙҙәре лә эске аң менән төшөнә торғандыр: кешегә хәрәкәт кәрәк! Кеше аңын яңыртып-сафландырып-байытып торған эмоциялар кәрәк. Быйыл яҙ буйы карантинда бикле ултырған кеше көндәр йылыныу менән атлығып тәбиғәткә сыҡты. Башҡортостанда һәр тарафта ошо эске саҡырыу менән ҡуҙғыу, ашҡыныу барлыҡҡа килде, һәм халыҡ ҡояшлы тауяландарға, йылға-күлдәргә ашыҡты.

**Башҡортостан Хөкүмәтенең туризмды үҫтереү буйынса стратегик планы 2030 йылға хәтле арауыҡҡа төҙөлгән. Унда төп бурыс ниндәй, ниндәй ниәт алға ҡуйыла?**

- Төп ниәт - аҡса эшләү. Стратегик план илде һәм кешене матди яҡтан күтәрерлек эштәрҙән хасил булырға тейеш, шунһыҙ, эмоция бирер нәмәләрҙе күҙ алдына килтереп тә, эшләп тә булмай. Республика бюджетын яҡшы итеп тулыландыра алырлыҡ эш планы булһын, шунһыҙ туризмды күтәреүҙең мәғәнәһе юҡ. Турист ағымы яҡшы килем аҡсаһын ҡалдырһын. Юғиһә, беҙгә нимәгә ул хәтле халыҡты саҡырыу һәм индереү?

**Кешенең күҙенә "доллар пятачогы" ҡапланһа, килешер микән? Ҡомһоҙлоҡ менән нәфсене үҫтереп-үрсетеп кенә туризм беҙгә ни файҙа килтерә ала? Ғөмүмән, туристарҙы ҡаршылауҙың ғәжәп матур нескәлектәре барҙыр, һеҙ уларҙы атап китә алаһығыҙмы?**

- Беҙ ул оҫталыҡҡа өйрәнәбеҙ һәм өйрәтәбеҙ. Барыһы ла ябай һәм кешесә, хужаларса һәм яҡшылыҡ менән тулы. Әйтәйек, килгән халыҡ ашау-эсеүгә айырым иғтибар бирә, ниндәйҙер экзотик һәм үҙенсәлекле аш төрөн тәмләргә ынтыла. Беҙ бөтә ерҙә лә булған ризыҡтарҙы бушлай ҙа ҡуя алабыҙ - шәкәр ҡомо, тоҙ-борос, икмәк һ.б. Ә инде тап башҡорт кухняһына хас ашһыу төрөн һатып бирәбеҙ, хаҡтарын артыҡ ҡиммәт ҡуймайбыҙ: ҡымыҙ, бал, ҡаҙылыҡ, бауырһаҡ, сәксәк, сөсикмәк, ҡаҡлаған ит, ҡаҡлаған балыҡ һ.б. Нисектер, алтын урталыҡ табып, килгән кешене ризалатып ебәрергә кәрәк. Башҡортса һурпа, айран, ҡатыҡ һыулау, ҡаймаҡ һәм башҡа шундай "тәмдәр" уның төшөнә инергә тейеш аҙаҡ, тәме теленән китмәҫкә тейеш. Бында нимә мөһим? Кешегә тәрән шатлыҡлы яңы эмоция биреү, яңыса күҙен асыу. Ҡунаҡтарҙы теләгәнсә мул ашатыу, бейетеү, йырлатыу, кейемдәр кейендереү ысын мәғәнәһендә "рәхәт" эмоциялар тыуҙыра.

**Урал тауҙары тарихы, башҡорт эпостары менән таныштырыу нисек? Ни өсөн күрһәткестәр бары тик рус һәм инглиз телендә? Башҡортса яңғырашы һәм әйтелеше тағы ла ҡыҙығыраҡ информация бирә бит...**

- ГОСТ буйынса юл-туризм күрһәткестәре рус-инглиз телендә. Мәҫәлән, картала "Гора Малиновая" яҙыла, халыҡ телендә ул "Йәнбикә менән Йәнбирҙе тауы" тип атала. Тауға менер алдынан информацион щит-таҡта тора. Унда русса, инглизса, башҡортса тау исеме яҙыла. Легенда шулай уҡ өс телдә бирелә.

Беҙҙә мәмерйәләр мендән ашыу, йыл һайын йөҙәрләп яңы мәмерйә асыла, исемдәре лә юҡ ҡайһыларының. Ҡайһылары икешәр исемле, мәҫәлән, "Киндерле" мәмерйәһе "30 лет Победы" тип тә атала. Мәмерйәләрҙе тикшереүҙә башлыса рус ғалимдары эшләй, улар урындағы халыҡтан ерле исемдәрҙе һорашып белергә тейеш. Күрәһең, ауыл халҡы уларҙы йәшергән, сит кешегә әйтмәгән. Бына ошо нескәлектәрҙе алдан белеп, сәйәхәтселәргә әйтеп өлгөрөп тә булмай.

**Башҡортостандың күп ерһыу атамаларын боҙоу, тарихын үҙгәртеү йыш осрай, беҙ махсус белешмәләрҙә тарихи дөрөҫлөктө күрһәтеп яҙырға тырышабыҙ. Мәҫәлән, Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында өпәй, һыҙғы, ҡошсо, терһәк, дыуан, балыҡсы тигән боронғо башҡорт ырыуҙарының ерҙәрендә - Өфө (Өпәй, Ҡариҙел) һыуы буйындағы ауылдар ята. Уларҙы берләштергән атамалар, һөйләш үҙенсәлектәре, өҫ кейемендәге тамбурлы ҡайыулы биҙәктәр һ.б. бәйләнештәр бик күп. Ошондай тарихи белем кемгә ҡыҙыҡлы?**

- Күп туристарға ял итеү, матур пейзаждар, яҡшы ашау, тәмле йоҡлау ҡәҙерлерәк. Ерһыу тарихы менән ҡыҙыҡһыныу икенсе планда ҡала, шулай ҙа ул бар һәм беҙ был яҡты ла бер рәттән алып барырға тырышабыҙ. Республика Милли музейы етәкселеге менән махсус осрашыуҙар, конференциялар, күргәҙмәләр ойоштороу һәм бергә эшләү шулай уҡ беҙҙең программала ҡаралған. Тарихсылар һәм этнографтар, сәнғәт белгестәре, әҙәбиәтселәр, йырсылар, актерҙар - туризм эшен киңәйтеү, байытыуға үҙ өлөшөн индерә. Был йәһәттән беҙ үҙаллы туристик агентлыҡтарҙың, туристарҙың ағымын үҙҙәре яғына көйләүсе-бороусылар менән дә бергә эшләйбеҙ. Әгәр ҙә улар эште оҫта һәм уңайлы ойоштора икән, ниңә ярҙам итмәҫкә, уларҙың хеҙмәте бөтә республика туристик картаһын байыта, ҡыҙыҡлы итә бит.

Беҙгә нимә мөһим? Һәр туристик яҡтан ҡиммәте һәм әһәмиәте булырҙай объектты - мәмерйә-тауҙар буйлап сәйәхәт, аш-һыу тәмләү, ерле тарих-этнографияны өйрәнеү - тейешле хаҡ менән уңышлы һатыу. Мәҫәлән, Шәретау - Розовые скалы, ни өсөн шулай атала? Туриҫка был ҡыҙыҡ. Ни өсөн Башҡортостан, ә Башкирия ғына түгел? Бәй, бындай һорауҙарға тейешле аныҡ яуаптар ҙа бирелергә тейеш, улар ҙа эмоция, яңы хис-тойғо сығанағы бит... Беҙ был хәлде туристар өсөн, уларға әйтеүе еңел булһын өсөн дөрөҫ итеп эшләргә тейеш. Мәҫәлән, "Башкирия" һүҙен әйтеүе анһат, ә "Башҡортостан" тип әйтеүе ҡыйын. Нисек әйтеүе яйлы, шулай әйтеләсәк. Башҡорттарға ғына түгел, бөтә кешегә лә аңлайышлы һүҙҙәр индерелә туристик картаға. Ә инде "Мауыҙлы күле", "Ҡарауылташ" һәм башҡа атамаларҙы аңлатып яҙып ҡуйыу килгән туристарға беҙҙең халыҡтың тарихын, философияһын, ни өсөн ошо ер өсөн йәнен аямай көрәшкәнен аңлатасаҡ. Мәҫәлән, Әбйәлил районы Күсем ауылындағы Таһир Кусимов музейына ингәндә туристар бер кәйефтә булһа, музейҙы ҡарап сыҡҡандан һуң улар бөтөнләй икенсе төрлө булып үҙгәрә, бөтә тирә-яҡҡа, ауыл кешеләренә икенсе күҙлектән ҡарай. Теләш ауылындағы ике этнография музейы, таш музейы менән дә шул хәл. Халыҡ уларға эркелеп йөрөй, бөгөнгө көндә лә шундай мөһим эште алған ябай ауыл кешеләренә аптырап ҡарайҙар, һоҡланалыр, ҡушылып китәләр.

**Башҡорт халҡына ныҡымышлыҡ, оторо тороу хас, тиҙәр. Турист ағымына ҡаршы тороуҙар ҙа бармы?**

- Әлбиттә. Кәрәкмәгән ергә тығылып йөрөүселәргә ҡырын ҡараш бар һәм буласаҡ. Туристарҙы дөрөҫ йүнәлтеү һәм тәрбиәләү ҙә кәрәк, уларҙы ҡаршылаған халыҡты ла тәрбиәләп-өйрәтеп тороу мотлаҡ. Шуның өсөн әйтәм: туристан алда юрист кәрәк. Йәғни, туризм беҙҙә буласаҡ, туризм беҙҙә лә яҡшы үҫешәсәк, ул кәрәкле һәм файҙалы күренеш, тик уны аҡса килтерерлек дөрөҫ юлдан ғына йөрөтөргә өйрәнәйек. Беҙгә һәм бөтә башҡортостандарға закондарҙы белергә, донъялағы уңышлы туризм тәжрибәһен өйрәнергә лә өйрәнергә кәрәк.

**Туризм менән генә байып йәшәгән ҙур илдәр бар. Мәҫәлән, Венгрия Балатон күле, уның буйындағы ял йорттары менән генә йәшәй. Беҙгә был йәһәттән тотош милли менталитетты, халыҡсан тормош ағышын, тотороҡло донъя көтөү үҙенсәлектәрен - халыҡтың булмышын үҙгәртергә тура килмәҫме?**

- Юҡ, бөтә мәсьәләнең әтнәкәһе лә шунда шул. Үҙгәрмәйенсә лә, яңы туристик маршрут уңышлы үҫһен өсөн төп шарттарҙы булдырайыҡ. Милли биҙәкле, тарихи йөкмәткеле, тәбиғи гүзәллек йә серле, ҡанға адреналин өҫтәүсе тәүәккәллек талап иткән маршруттар бар.

**Башҡортостаныбыҙ бик тәбай. Ләкин ҡәҙерен белеүселәр әҙ! Тарихын белеүселәр әҙ! Ҡанифа юлы тигән боронғо юлды ла белмәй бит күптәребеҙ, ҡыҙыҡһынмай ҙа, исмаһам. Туристар килер ул. Улар беҙҙең гүзәл тәбиғәтте яратыр. Шихандарыбыҙҙы, саф һыулы йылғаларыбыҙҙы күреп ах итер. Ләкин... ҡоро буш ерҙәргә килмәй бит улар, бында йәшәгән халайыҡтарҙың күңел торошо менән дә танышырға, яҡынайырға теләйәсәк. Кешелеккә хас сифат: йылылыҡ, яҡшылыҡ, яҡтылыҡ эҙләү. Башҡорт солоҡ ҡорто, халыҡ кәсептәре - кейеҙ баҫыу, балаҫ һуғыу, шәл бәйләү, эйәр-өпсөн яһау - барыһы ла туристарға ярҙам итә. Башҡорттарҙың боронғо ҡалалары, йәйләүҙәре, батырҙары, Рәсәйгә ҡушылыу тарихы - туризм өсөн кәрәкме?**

-Тағы ла әйтәм, бындай һорауҙар менән килгән кеше һирәк буласаҡ. Әгәр был хаҡта тейешле белемле кеше ябай һәм аңлайышлы итеп һөйләп бирһә, урындағы халыҡ үҙе ил тарихы буйынса хәбәрҙар булһа, әлбиттә, туристар ауыҙын асып тыңлар, бай мәғлүмәт алыр. Әгәр ҙә беҙҙә маңҡорттар, хисһеҙ һәм битараф йәндәр тулып ятыуын күрһә, ожмахтай еребеҙҙе ҡәҙерләмәйенсә, вайымһыҙ йәшәгәнде күрһә, ул сағында бер генә туриста ла бер ниндәй ҙә "шатлыҡ хисе" булмаясаҡ. Шуға күрә туризмды үҫтереү - бөтә ил эше, намыҫ эше, заман ҡушҡан һынау эше.

**Сәрүәр СУРИНА әңгәмәләште.**



***✓ Ҡапыл эргәлә генә ниндәйҙер ыңғырашыу ишетелде. Дим ипләп кенә телефонын тауыш яғына борҙо. Фонарик яҡтыһы иҙәндә ятҡан ҡыҙ һынын ялманы. Ул яланаяҡ һәм еңел йәйге күлдәктән генә.***




Тауышҡа Саша йүгереп сыҡҡан. Елкәһендә алһыу бинт, күҙҙәрендә- ярһыу.

- Нимә эшләйһең, маңҡа малай? - Ир бар көүҙәһе менән Димгә ябырылып, уны ергә ҡолатты. Танауға беренсе йоҙроҡ килеп эләкте, икенсеһе...

- Тор унан! Саша, нимә эшләйһең? - Тамара ҡулға эләккән беренсе таяҡты тотоп, күршеһенең арҡаһына һуҡты. Саша ашыҡмай ғына торҙо. Йоҙроғонан ҡан тамсылары тама. Тын алышы йышайған.

- Нимә, эттәр кеүек сыйнашып ятаһығыҙ? - Тамара ҡысҡыра башланы.

- Ул Маһмайға атты! - тип ҡысҡырҙы Александр.

- Шунан? Ул берәҙәкте күптән аҙаштырырға кәрәк ине. Йөрөй шунда кеше ҡурҡытып!

- Ул - минең дуҫым. Теймәгеҙ уға! - Саша күҙендә йәш тамсыһы күренде.

Дим аңына килеп, торорға маташты. Булдыра алманы. Аяҡтарын һуҙып ултырҙы.

- Тамара инәй, баҙҙың асҡысын бирегеҙ. Унда минең Гөләм! - Димдең тауышы саҡ сыҡты, әммә быны ике күрше лә яҡшы ишетте. Саша Тамараға ҡараны. Йөҙөндә ғәжәпләнеү күренә ине.

- Мин уны сөгөлдөр артынан төшөргәйнем. Бар, кит бынан! - тип Тамара күршеһен ҡыуып ебәрҙе. - Тор әйҙә, битеңде йыуайыҡ.

- Гөл! - тине Дим әбейҙең ҡулына тотоноп.

- Ниндәй гөл тағы? Юҡ унда бер нәмә лә. Башыңа ныҡ тейгән, ахыры, меҫкенкәй. Бар, өйөңә инеп ятып тор.

- Асҡысты бирегеҙ.

- Үәт, малай! Асҡыс һорай тағы. Өйөңдә ашарыңа юҡмы? Минең сөгөлдөрөмә күҙең төштөмө? Ин бар! Башҡаса күҙгә күренеп йөрөмә!

- Саша унда кешеләрҙе урлап тота! - Дим бирешмәне. Башы әйләнһә лә ул хәҙер аяғында ныҡ тора.

- Кешеләрҙең юғалыуы албаҫтының эше! Телевизор ҙа ҡарамайһыңмы ни? Күпме әйттем был ерҙә шайтан эйәләгән тип, юҡ, бер кем дә ышанмай! - Әбей өс тапҡыр төкөрөндө.

Дим ерҙә ятҡан пистолетын алып, өйөнә инеп китте. Быны күҙәтеп торған Тамара ишек ябылыу менән таяғы менән уны тыш яҡтан терәтеп ҡуйҙы.

Дим битен йыуып, диванына ятты. Ауыртыу бөтөп бара, тик барыбер хәл юҡ. Өй янында ниндәйҙер шыбырлашыуҙар ишетелә, әммә бер һүҙҙе лә аңлап булмай. Димгә уларҙы тыңларға үҙ уйҙары ҡамасаулай.

Ни булһа ла Тамаранан асҡысты алырға кәрәк. Үҙе бирмәгәс, урларға! Быны төн генә етһен. Төнөн ул күрше әбейҙең өйөнә төшәсәк.

* * *

Йоҡо аралаш һаташып ятҡандан һуң Дим уянды. Баш бахмурҙағыса ауырта. Ҡайһы саҡ көндөҙ йоҡлаһаң, шулай була ул. Сәй эсеп, бер аҙ хәл йыйырға кәрәк. Тик ҡараңғы төшөүенә ҡарамаҫтан, өйөндә ут ҡабыҙмаҫҡа булды егет. Өйҙә юҡ, йә йоҡлай, тип уйлаһындар.

Ишек берҙе көслө итеп эткәндән һуң асылып ҡуйҙы. Ҡолаған таяҡ тауышы ишетелде. Дим нисек булһа ла үҙен шымыраҡ тоторға тырышты. Тышта әкрен генә ел иҫә. Был саф еҫ егеткә көс өҫтәне. Күктә болоттар артынан тоноҡ ай яҡтыһы күренә. Төҙөлөштәге кран туҡтаған. Прожекторҙар ҙа яҡтыртмай. Өфө йоҡлай.

Тамараның ишеге, әлбиттә, бикле булып сыҡты. Ул көндөҙ ҙә йоҙаҡланып ултыра. Төнөн асыу ҡайҙа? Дим әбей өйөн тирә-яҡлап урап сыҡты. Был йорт та күптән ремонт күрмәгән. Бүрәнәләр араһындағы мүк елгә осоп бөткән, ҡайһы бер урында ярыҡ аша өй эсен дә күрергә була. Бахыр әбей бында нисек өшөмәйҙер?

Димдең ҡарашы тәҙрәгә төбәлде. Боронғо ауыл тәҙрәһе был. Ике рама һәм уға ҡатып ҡуйылған сөйҙә нығытылған быяла. Тырышһаң, бөгөлгән сөйҙө урынынан шылдырып, быяланы алырға була. Димдең шулай ауылда тәҙрә ысҡындырғандарын күргәне бар ине.

Ерҙә ятҡан таш осо менән тәҙрә буяуын сыйып бөтөргәндән һуң ул бар булған көсө менән сөйгә баҫты. Әһә, беренсеһен ҡуҙғатты. Тағы бер-нисәүһен ҡаҡшатырға кәрәк һәм быяланы алып була.

Дим шым ғына быяланы алып, нигеҙгә терәтеп ҡуйҙы. Әле сатлама һыуыҡтар етмәгән, шуға ла тәҙрә бер ҡат ҡына. Бәлки, әбейҙә бөтөнләй икенсе ҡат тәҙрә юҡтыр.

Бер аҙ маташҡандан һуң Дим өй эсенә инә алды. Телефонындағы фонаригын ҡабыҙып, уның утын бармағы менән ҡапланы һәм кескәй генә ярсыҡ ҡалдырып, тирә-яғын ҡараштырҙы. Иң мөһиме, әбей ятҡан бүлмәгә юлыҡмаҫҡа.

Танауға ҡартлыҡ еҫе бәрелде. Аяҡ аҫтында кипкән үлән ҡыштырҙай. Фонарик нуры стена буйлап үрмәләп, ундағы рам эсендәге фотоһүрәткә юлыҡты. Ә фотола Тамара һәм... Саша. Уның янында тағы бер фото. Быныһында өс кеше: йәшерәк Тамара, уның йәшендәге ир һәм үҫмер Александр. Нимә-нимә, ә был егеттең йөҙөн мендәр араһынан да таныйһың. Башҡа шикләнеүҙәр ҡалманы. Саша - Тамараның улы.

Ҡапыл эргәлә генә ниндәйҙер ыңғырашыу ишетелде. Дим ипләп кенә телефонын тауыш яғына борҙо. Фонарик яҡтыһы иҙәндә ятҡан ҡыҙ һынын ялманы. Ул яланаяҡ һәм еңел йәйге күлдәк кейгән. Уң ҡулында наручник, икенсе осо батареяға эләктерелгән. Дим был кешелә күңеленә яҡын Гөлөн таныны.

Егет уның эргәһенә сүкәйеп ипләп кенә башынан һыйпаны. Ҡыҙ тертләп уянды.

- Ҡурҡма, был мин - Дим, - тип шыбырланы егет һәм фонарик менән үҙенең битенә яҡтыртып күрһәтте.

- Дим, - көсһөҙ генә ысҡынды исем.

- Мин һинең артыңдан килдем. Хәҙер асҡыс табам! - Димдең тауышы нығыраҡ яңғыраны.

Ҡапыл бүлмә яҡтырып китте. Түбәлә эленеп торған армыт яҡтыһына күҙҙәр ауыртты. Бер күҙ өйрәнгәс, ишек уйымында торған Тамара һыны күренде. Былай ҙа матурлыҡҡа бай булмаған әбей төнөн тағы ла ҡурҡынысыраҡ. Ҡыҫҡа сәстәре туҙған, ә һарғайып бөткән төнгө күлдәге бына-бына сереп ҡойолорға әҙер. Быялаһыҙ тәҙрәнән ел өрөп, пәрҙә менән уйнай башланы. Бер күренеп, бер күренмәй яҡынлашҡан Тамара әкиәттәрҙәге Мәскәй әбейҙе хәтерләтә. Бына ул кем ысын албаҫты!

- Кем һине бында индерҙе? - Ҡарсыҡ тауышынан хатта ел тымды. - Нинә тәҙрәмде ваттың? Малай, тыныс ҡына йәшәй алманыңмы?

Дим урынынан һикереп торҙо.

- Хәҙер үк наручниктарҙың асҡысын бирегеҙ. Юғиһә, полиция саҡыртам!

- Саҡырт. Мин әле Сашкаға шылтырата торайым. Ул бында тиҙерәк килеп етер, - Тамара боролоп, икенсе бүлмәгә юлланды. Дим күп тә уйлап тормай, уны артынан барып этеп ебәрҙе. Иҙәнгә һуҙылып ятҡан әбейҙең муйынынан бауға бәйләнгән бәләкәй асҡыс килеп төштө.

Гөлдөң ҡулы бығауҙарҙан ысҡынды. Тик азатлыҡҡа - тышҡа илтеүсе ишектең йоҙағы эс яҡтан да асҡыс менән бормалы булып сыҡты.

- Сынок, теге жулик йортома инде, - Тамара тәҡим телефонына барып еткән булып сыҡты.

Дим бар булған көсө менән аппаратты стенаға һелтәне. Гөлдөң хәле бөтөнләй юҡ, ишеккә терәлеп ятҡан. Егет наручниктарҙы алып, Тамараның ҡулдарын бығаулай башланы.

- Алйот! Ул бит бары уйнай ғына. Һин аңламайһың! - Әбей әллә үҙен, әллә улын аҡларға тырышып, ҡысҡыра башланы.

Туҡ-туҡ-туҡ! Ишеккә туҡылдаталар. Ҡурҡыштан Гөл дә үҙендә көс табып, аяҡтарына баҫты.

- Мам, ты в порядке? - Ишек артынан тауыш ишетелде.

Дим ниҙер яуапларға маташҡан әбейҙең ауыҙына сепрәк тығып, Гөл менән тәҙрә аша сығып ҡасты. Бүлмәлә ел генә уйнап ҡалды.

* * *

Си Цзиньпин урамында көҙҙөң сағыу мәле. Киң тамырлы олпат ағастарҙың япраҡтары ергә ҡойолоп ҡуйы, һары келәм түшәгән. Ҡояш нурын сайҡатып, күл тулҡындар уйната. Ахунйәнов трамвай туҡталышы ҡаршыһындағы йортта туҡталып, башын өҫкә күтәрҙе.

- Һеҙгә повестка, - тине ул ҡыйыҡ башында йөрөгән Димгә ҡарап. Егет, ниһайәт, мәңге шығырҙаған ҡалай киҫәктәрен нығыта.

Ҡағыҙҙы ҡарайған йорт таҡталарын һарыға буяп йөрөгән Гөл алды.

- Тәфтишсе барлыҡ уликаларҙы йыйҙы, бер аҙнанан суд. Һеҙ - төп шаһиттар. Шуға күрә, һуңламағыҙ, - капитан Ахунйәнов кәпәсен күтәреп хушлашты ла ҡояш байыған яҡҡа атланы.

Дим Гөлдөң янына төшөп, уны биленән ҡосаҡланы. Туҡталышта бышылдап трамвай туҡтаны. Хәҙер барыһы ла яҡшы буласаҡ...

...Миллионлаған кеше йәшәгән ҡаланың һәр трамвай туҡталышында ла, бәлки, ошоға оҡшаш тарих геройҙары йәшәйҙер. Күп ҡатлы йорттарға ҡарап, уның һәр тәҙрәһе артында кешеләр яҙмышы йәшәгәнен аңламаҫһың да... Ә был бит көн һайын Өфө урамдарында булған меңәрләгән тарих, миллион яҙмыш, тигәнде аңлата.

**(Аҙағы. Башы 35-се һанда).**

*ҺАБАҠТАР*

# ӘЛДӘ СУДЬЯ ТҮГЕЛ...



**Бер танышым бар. Мин уны әлдә судья булмаған, тип ҡыуанам. Ни өсөн тигәндә, ул әүәлерәк бер нисә тапҡыр: "Минме һуң инде ошонда ултырыр кеше, мин бит судья булырға тейеш инем. Атай-әсәйем, үҙҙәре уҡытыусы булғас, мине лә педагог итеп күрергә теләне", - тип әйткәне бар.**

Уны судья итеп күрергә теләмәүемдең сәбәбе шунда: танышым һәр ваҡыт кеше йәки ниндәй ҙә булһа күренеш, ваҡиға тураһында тик кире фекер булдырыусан. Мәҫәлән, берәһе хаҡлы ялға сығып, мәҙрәсәгә уҡырға инһә, ураҙа тотһа, намаҙ уҡыһа, ул был ҡатындың ҡасандыр булған йәки булмаған элекке гонаһтары тураһында иҫенә төшөрә. Берәһе таҡыя кейеп, йәмәғәт намаҙына йөрөгәнен ишетһә: "Ҡомған тотоп йөрөүең менәнме, күңелең бысраҡ булғас..." - тип әрләй. Кемдеңдер улы өйләнеп, матур итеп туй үткәрһә, егеттең бәләкәй сағындағы шуҡлыҡтарын иҫкә төшөрә, яманлай, ғәйепләй. Судья булһа, моғайын да, берәһенә лә мәрхәмәтлек күрһәтмәҫ ине. Иң ҡаты хөкөм яҙаһын бирер ине, тип ҡурҡам. Мин-минлеге, тәкәбберлеге шулай итә уны. Кешенең нисек түбәнселеккә төшөүенә түгел, ә, киреһенсә, уның йығылғандан һуң күтәрелеүенә ҡарарға кәрәк тә бит...

Икенсе бер танышымды киреһенсә адвокат итеп күргем килер ине. Ни өсөн икәнлеген аңлап торағыҙҙыр. Эйе, ул бөтәһен дә яҡлай. Иң ҡурҡыныс енәйәтсене лә суд барышында ғәйепһеҙгә сығарып ҡуйыр ине, билләһи. Уның өсөн кешенең насары-яҡшыһы юҡ. Ул һәр ваҡыт кешенең хатаһын, етешһеҙлеген, абыныуын төрлө яҡлап баһалай, яңылышыуында уның йәшәгән мөхитен, тормош шарттарын ғәйепләй. Һөҙөмтәлә уға ҡарата йәлләү, ҡыҙғаныу тойғоһон ғына уята. Шулай бер ваҡыт шау-шыу тыуҙырған алтын магазинын талау ваҡиғаһы тураһында һөйләшкәндә, талаусыларҙы яҡлап, бөгөнгө замандың аяуһыҙлығын, йәштәрҙе кредит һаҙлығына баҫтырған ысынбарлыҡты тәнҡитләне. Һәм иң ғәжәбе шул: ул әңгәмәселәренең бөтәһен дә ошо фекергә күндерә алды.

Ошо ҡапма-ҡаршы холоҡло таныштарымдың тормошон сағыштырып ҡараным да, үҙем өсөн бик ҡыҙыҡлы асыш яһаным. Тышҡы яҡтан ҡараһаң, уларҙың көнитмеше бер төрлө кеүек. Икеһе лә үҙ йортонда йәшәй, өсәр балалары бар, хатта баҡса-сәскә үҫтерергә яратыуҙары менән дә бер-береһенә оҡшаштар. Айырма шунда ғына: кешенең кире яғын ғына эҙләгәненең ғаиләһендә бер ҙә тыныслыҡ юҡ. Балалары, ире менән дә мөнәсәбәте көйлө түгел, хеҙмәттәштәре араһында ла абруйы бик түбән. Кешенең тик яҡшы яғын ғына күргәне - бәхетле әсәй, һөйөклө ҡатын. Хатта баҡсаһындағы сәскәләр ҙә тәүгеһенекенә ҡарағанда күберәк сәскә ата, оҙағыраҡ ултыра кеүек...

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

ШАҒИРӘГӘ ӨС ҺОРАУ

**Моңло шағирә, һуңғы ваҡытта прозала ла уңышлы ғына эшләүсе Ш.Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның "Күҙгә алмалар" китабы С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителде һәм беҙ әҙибәнең үҙенә һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.**



# ХАЛЫҠ ҺӨЙӨҮЕН ЯУЛАР ӨСӨН...

## үҙең халыҡты ярат

➔ **Бөгөнгө уҡыусы китапты һатып алһын һәм әҫәрҙе уҡып сыҡһын, уҡып сыҡһын ғына түгел, уның эсендә йәшәп алһын, кисерештәргә юлыҡһын һәм аҙаҡ хәтерләп уйланып йөрөһөн өсөн улар ниндәй эстәлектә булырға тейеш?**

- Китабыңды уҡыусы яҡын ҡабул итһен өсөн ул халыҡсан телдә яҙылырға, тос фекерле, ҡыҙыҡлы йөкмәткеле булырға тейеш. Хәҙерге дәүерҙә стресс һәм тиҙлек дәүере тиҙәр. Ысынлап та шулай. Кеше ваҡтөйәк мәшәҡәткә батҡан, уның проблемалары бихисап. Китап уҡып ултырырға ваҡыты ла аҙ ҡала. Шуға күрә бөгөн халыҡҡа ҡыҫҡа, әммә көслө яҙылған, оригиналь сюжетлы әҫәрҙәр кәрәк. Замана шуны талап итә. Ҡайһы саҡ: "Ҡалай әҫәрегеҙ тормошсан. Үҙегеҙ был хәлде кисерҙегеҙме әллә?" - тип һорайҙар. Яҙыусының һүҙе йөрәк түренән сыға. Авторҙың ихласлығын, эскерһеҙлеген дә аңғара халыҡ. Шиғыр яҙғанда шағир ысынлап та үҙ кисерештәрен яҙа. Күҙ йәштәре аша, йә шатлыҡҡа сорналып, ашҡынып. Йә һағыштан сәсәп. Атай-әсәй, балалар, тәбиғәт тураһында уйланыуҙар, һөйөү... Был темалар һәр кемгә яҡын һәм мәңгелек. Әлеге ваҡытта мине бигерәк тә телебеҙҙең яҙмышы, милләттең киләсәге уйландыра. Шул уйҙарым, йәнемде телгеләп, шиғыр булып ярала. Әгәр телебеҙҙе һаҡлай алмаһаҡ, киләсәктә әҫәрҙәребеҙҙе кем уҡыр?

➔ **Яҙыусының, ижадсының исемен йәшәтеүҙе йәки йәшәтмәүҙе халыҡ үҙе хәл итә. Бөгөн яҙыусы (шағир) булыу һәм тарихта ҡалыр яҙыусы булыу тураһында ниндәй фекерҙәрегеҙ бар?**

- Ысынлап та, һирәк әҫәрҙәр генә халыҡ хәтерендә уйылып ҡала. Әҙиптең яҙмышын халыҡ хәл итә. Ҡайһы бер яҙыусыны ул был донъянан китеү менән оноторға мөмкин. Ҡайһы бер яҙыусының ижады йылдар үткән һайын гәрәбә, алмас кеүек баҙыҡлана бара һәм төрлө дәүерҙә төрлөсә нурланып балҡый. Шуға күрә лә мәңгелек ҡиммәттәр тураһында яҙыу зарур. Бөгөнгө көнгә генә яраҡлашырға ярамай. Халыҡ ихтирамын, һөйөүен яулар өсөн халыҡтың үҙен яратырға, уның менән серҙәш, дуҫ булырға, уның аһ-зарын ишетә белергә, үҙенә лә кисерергә, йөрәгең аша үткәрергә кәрәк. Бармаҡтан һурып яҙғанды, ярыҡ барабан кеүек дөмбөрҙәп, ҡолаҡ ярып ҡысҡырып йөрөүҙе халыҡ яратмай. Ул бик һиҙгер һәм аҡыллы. Алдаҡты, сәсөнө ҡабул итмәй. Мин халҡымды ныҡ яратам һәм уның ышаныусын аҡларға тырышам. Йөрәктән сыҡҡан йөрәккә етә, тигән һүҙҙе һис тә хәтеремдән сығармайым.

➔ **С. Юлаев премияһына тәҡдим иткән ижадығыҙҙың был юғары премия менән баһаланырлыҡ ниндәй үҙенсәлектәре һәм өҫтөнлөгө бар?**

- Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим иткән Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенә, минә ышаныс белдергәне өсөн, бик рәхмәтлемен. "Күҙгә алмалар" китабы минең етенсе баҫмам. Уның үҙенсәлеге шунда - тупланған барлыҡ әҫәрҙәрҙә лә һәр кемде уйландырған көнүҙәк проблемалар сағылдырыла. "Аманат" поэмаһын ғәзиз Башҡортостаныбыҙҙың 100 йыллығына арнап, ихлас күңелдән, яратып яҙғайным. Тыуған илемде әҙәләп яратам. Ситкә киткәндә һағынып, юкһынып ыҙалайым. Был хисте бала сағымда "Орленок" Бөтә Рәсәй пионер лагерында кисергәйнем. Атай-әсәйем, туғандарым, дуҫтарым менән бергә тотош Башҡортостанымды юҡһыныуым аптыраҡҡайны. Шул тәрән тойғо ғүмер буйы дауам итә. Йыраҡтарҙан ҡайтҡанда илем территорияһына аяҡ баҫыу менән күңелем урынына ултыра. Республикамдың энергетикаһы көслө, яҡты. Унда йәшәгән халҡымдың йөҙө лә нурлы, шундай ҡәҙерле һәм яҡын. Ошо ихлас хистәрем поэмамдың башынан аҙағынаса ярылып ята. Поэмалағы Ҡая образын да үҙенсәлекле, тип һанайым. Символизм әҫәрҙе йәмләй, серле итә. Ҡая - ата-бабаларҙың аманатын лирик героиняға тапшыра. Шанлы тарихты иҫләтеп, күңелендә милләтә өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уята.

Шиғырҙарымда мин тәбиғәткә таянам. Тәбиғәтте ныҡ яратам, һәр миҙгелдә, һәр тәбиғәт күренешендә фәлсәфә эҙләйем. Күҙәтеүҙәремдән сығып, шуны әйтәм, тәбиғәт торошо кеше тормошо менән ныҡ бәйләнгән. Хоҙай беҙҙе тәбиғәт аша иҫкәртә, киләсәккә йүнәлеш бирә. Тәбиғәтҡә беҙҙең кендегебеҙ бәйләнгән. Ә беҙ, кешеләр, үҙебеҙ теләп тәбиғәттән айырылабыҙ, кендек бауын үҙебеҙ киҫәбеҙ...

Китапҡа тупланған хикәйәләремдә лә оригиналь тип һанайым. "Вазифа" исемле хикәйәлә урмансы Данияр ике ут араһында ҡала. Юғары вазифаны эләктерер өсөн түрәләргә ауыл эргәһендә көн күргән, халыҡҡа һис зыяны теймәгән балалы айыуҙы атып, тиреһен тунап бирергәме, әллә ауырлы ҡатынының ғибрәтле төшөнә ҡолаҡ һалып, хәүефле һөнәрҙән баш тартырғамы? Выждан ғазабы кисергән Данияр, ахырҙа, намыҫ ҡушҡан юлды һайлай һәм йән тыныслығы таба.

Чечня синдромы тураһында бығаса тиклем башҡорт әҙәбиәтендә әҫәрҙәр күренмәне. Ҡасандыр афған һуғышы хаҡында ла әсенеп поэма яҙғайным. Ул поэманы хәҙер нисәмә йылдар инде совет ғәскәрҙәре Афғанстан территорияһынан сыҡҡан февраль айында радио аша бирәләр. Был да әҫәрҙәремдең актуаллеге хаҡында һөйләй. Мин тыныс тормошта уландарыбыҙҙың һуғышта ҡатнашыуына ҡаршымын. Бер әсә лә балаһын ҡайҙалыр, кем өсөндөр ҡан ҡойоп, һәләк булһын өсөн тыуҙырмай. "Ҡайтыу" хикәйәһендә Байрас чечен һуғышынан күңеле яраланып ҡайта. Ата-әсәһе өсөн тамуҡ ғазаптары башлана. Һалдат тыныс тормошҡа күнегә алмай яфалана, һуғышта үлгән дуҫтары өсөн үҙен ғәйепле тоя. Ғазап утында яна. Бер эҙҙән китеп барғанда алдағы иптәштәре һәләк була, артта килгән ул тере ҡала... Драматизм менән һуғарылған, көсөргәнешле әҫәрҙе яҙғанда мин шул һалдат кисерештәрен дә үҙем аша үткәрҙем, уның ата-әсәһенең ғазабын да тәрән кисерҙем.

Күҙ - уңыш йыйыр, ҡышҡа әҙерләнер дәүер. "Күҙгә алмалар" китабына - алмалар кәрзиненә, бешеп еткән әҫәрҙәр йыйылғандыр, тип уйлайым. Уның тәмен, файҙаһын, кәрәклеген премия буйынса комиссия һәм халыҡ баһалар.

ШАЯРЫУ



# ЮЛ ҠАҒИҘӘЛӘРЕН БОҘОУСЫЛАРҒА...

## "файҙалы" кәңәштәр

**Бөгөн үҙемдең коллегаларым - автоһәүәҫкәрҙәрҙе бер аҙ ғына шаяртып, уларға ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренән ҡотолоуҙың бер нисә ысулын һанап китмәксе булам.**

**Беренсе ысул.** Һин юлда һәр төрлө хистәргә бирелеп, онотолоп киттең дә, машинаңдың тиҙлеген арттыра биреп, хатта "ала таяғын" тотоп, һине туҡтатырға маташҡан ЮХХДИ хеҙмәткәрен дә байҡамайыраҡ, уның янынан "выжт" итеп үттең дә киттең икән, ти. Етеҙ егеттәр, әлбиттә, үҙҙәренәң машиналарына ултырып алып, һинең артыңдан төшәсәк. Ул ғына ла түгел, "һә" тигәнсе ҡыуып та етәсәк. Шуға күрә, әллә ни уларҙан ҡасырға ла тырышма, әммә юл ситендә берәй ҡуйыраҡ ҡыуаҡлыҡ осрағанса барырға тырыш. Унан кинәт кенә туҡтал. Туҡтағас та, бик ашығыс рәүештә машинаңдан төшөп, салбарыңды төшөрә-төшөрә, ҡыуаҡ араһына инеп ултыр. Ни тиклем оҙағыраҡ ултырһаң, үҙең өсөн шул тиклем яҡшыраҡ. ЮХХДИ хеҙмәткәре лә аңлаусан кеше бит, эштең ҡайҙа барғанын бик тиҙ төшөнәсәк һәм, көтөп ялыҡҡас, һиңә ҡул һелтәп, китеп тә барыуҙары мөмкин. Әгәр, шулай ҙа, егеттәр ныҡышмал булып сыҡты икән, йә иһә ҡыуаҡ артында ултырып арыһаң йә аяҡтарың ойоп китһә, йөҙөңә бошонҡо ҡиәфәт биреп, салбарыңды күтәрә-күтәрә (ҡабаланмай) килеп сыҡ. Һине көтөп арыған егеттәрҙең йөҙө лә яҡтырып, ниһәйәт, документтарыңды күрһәтеүеңде талап итеп, тағы ниндәйҙер һорау бирә башлар. Шул саҡ (әлегә документтарыңды бирмәй тор) һин эсеңде тотоп, "әй, әттәгенәһе, мин - хәҙер", тигән һымағыраҡ һүҙҙәр әйтә-әйтә, кинәт кенә баяғы урыныңа ҡабаттан йүгереп инеп боҫ... Был юлы тағы ла оҙағыраҡ ултырырға тырыш. ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренең ваҡыт тигән нәмәһе лә тар бит, ҡулын һелтәп, "Әй, был с...к менән булғансы", тип, һине, моғайын, инде бөтөнләйгә ҡалдырып та китерҙәр...

**Икенсе ысул.** Нәҡ әлеге һымаҡ, әйтәйек, светофорҙың ҡыҙыл утын, уның артында торған ЮХХДИ посын абайламайыраҡ үтеп киттең... Сиренаһын ҡысҡыртып килеп, һине һул яҡлап үтеп, алдыңда туҡтаған ҡүк һыҙыҡлы автомобилде күргәс тә, ҡаушап төшәсәкһең. Машинаңды, әлбиттә, туҡтатасаҡһың. Уң ҡулын фуражка козырегы тапҡырына ҡуйып, "Инспектор ЮХХДИ, сержант Фәләнов" тип иң тәүҙә үҙен таныштырғас, документтарыңды талап итәсәк был етди хеҙмәткәр һәм "юл ыңғайында" ошондайыраҡ һорау бирәсәк: "Ҡайҙа шул хәтлем йәнтәслим ҡыуаһығыҙ, ағай? Светофорҙы ла күрмәй үтеп киттегеҙ!" Бына шул саҡ, үҙ-үҙеңде ҡулға алып, бар ҡыйыулығыңды йыйып, инспекторға ошолайыраҡ яуап бирергә үҙеңдә көс тап: "Әй, ҡустым, бажамда ҡунаҡта булғайным. Икебеҙгә бер "литр"ҙы төшөрөп тә алғайныҡ. Эскән кешене үҙең беләһең бит инде, ҡустым. Аҡ-ҡараны күрмәй, үткәнмен дә киткәнмен..." "Ә, һеҙ, өҫтәүенә, эскәнһегеҙ икән", - тип, ул һине ЮХХДИ машинаһында ултырған ҙурыраҡ начальнигына ла алып килеүе ихтимал. "Иптәш капитан, бына, руль артында эскән килеш ултырған водителде тоттом", тигән докладты ишеткәс тә, капитан, әлбиттә, "прибор"ға өрөргә ҡушасаҡ. Һин өрәһең, ә ул "0"-де күрһәтә. Тағы бер мәртәбә өрҙөртәсәк. Өрәһең - һаман да "0"... Капитан сержантҡа шелтәле ҡараш ташлай. "Айныҡ та баһа", йәнәһе. Шул оло мәшәҡәт менән булып, һинең тиҙлек артырып йә светофорға туҡтамай үтеп китеүең хаҡында, бәлки, бөтөнләйгә онотоп та ҡуйыуҙары ихтимал...

**Өсөнсө ысул.** Үҙең йәшәгән ҡасабаның милиция (хәҙергесә - полиция) начальнигының фамилияһын, хатта исеме менән атаһының исемен дә ятлап алып, хәтереңдә тоторға тырыш. Әлегесә, "эш боҙҙоң" икән, һине туҡтатыусы сержантҡа ошондайыраҡ хәбәр әйтеп ҡара: "Әй, ҡустым, Фәлән Фәләновичта ҡунаҡта булып ҡайтып барам әле..." "Кем ул?" - тип һорар сержант, моғайын. "Кем тип ни, полковник Фәләновты белмәйһеңме ни, минең ҡоҙа (бажа, ҡайнеш, дуҫ) бит ул! Юлда берәй проблемаң килеп сыҡһа - шылтырат", - тип тә әйткәйне. Ҡана, шылтыратып алайым әле", - тип телефоныңды сығарған бул... Бәлки инспекторҙың күңеле "йомшарып" китеп: "Ярай, ағай, бар, юлың менән бул. Тик башҡаса юл ҡағиҙәһен боҙоп йөрөмә", - тип, бәлки, һине ҡотҡарып та ебәрер. Уның да башҡа кеше һымаҡ нескә күңелле булып сығыуы мөмкин бит...

Тик шуны хәтереңдә тот: ГИБДД хеҙмәткәренә бер ҡасан да ришүәт-фәлән тәҡдим итә күрмә! Бына улар һис кенә лә яратмай. Уның өсөн үҙең "ситлек артына" ла барып эләгеүең мөмкин. Бына шулай.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ДУҪЛЫҠ...

## ғүмерҙе оҙайта

■ Яҡын һәм тоғро дуҫтары күп булған кешенең ғүмере оҙон була. Был фактты Американың Юта һәм Яңы Каролина штаты университеты ғалимдары билдәләгән. Тикшеренеү барышында асыҡланыуынса, кеше ни тиклем күберәк кеше менән аралаша, шул тиклем оҙағыраҡ йәшәй, имеш. Белгестәр әле был феноменды фәнни яҡтан нигеҙләргә ашыҡмай. Шулай ҙа профессор Берт Учино белдереүенсә, социаль әүҙемлек күп яңы тойғолар кисерергә мөмкинлек бирә. Үҙ сиратында, тоғро дуҫтар һәр саҡ ярҙам итергә әҙер, тормош йөгөн дә улар менән күтәреүе еңелерәк.

■ Ғәҙәттә, июнь урталарынан ҡала урамдары тирәк мамығына күмелә башлай. Шуға ла аллергологтар был осорҙа махсус диета буйынса туҡланырға кәңәш итә. Рационығыҙҙа кишер, сельдерей һәм һоло буткаһы булмаһын. Әгәр ҙә тирәк мамығына аллергия башланһа, шунда уҡ башҡа төрлө ярмалар һәм аҡ икмәк ашауҙан тыйылып тороғоҙ. Табиптар былдай диетаны ағастар һәм ялан сәскәләре сәскә атҡан осорҙа ла ҡулланырға тәҡдим итә.

■ Һимереү менән бәйле проблемаларҙы тикшереп, Нью-Йорк университеты ғалимдары бик ҡыҙыҡлы асыштар яһаған. Ғалимдар әйтеүенсә, ауырлығы норманан артыҡ булған кеше менән һөйләшһәгеҙ йәки уға ҡарап ҡына торһағыҙ ҙа аҙыҡтың юғарыраҡ калориялыһын ашай башлаясаҡһығыҙ. Әгәр ҙә һеҙ былдай кешеләр менән даими аралашһағыҙ икән, үҙегеҙ ҙә һиҙмәйенсә тулыһынса юғары калориялы аҙыҡҡа күсеүегеҙ ихтимал. Тимәк, ябыҡ булғың килһә, ваҡытыңды ябыҡтар менән үткәр.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көй тыңлау хәүеф тойғоһон һәм депрессияны кәметә, кәйефте яҡшырта һәм баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәрен уята. Әммә Америка ғалимдары билдәләүенсә, эш эшләгән ваҡытта яратҡан көйөңдө тыңлау эштең сифатына кире йоғонто яһай икән. Неврологтар көй һәм тауыштарҙың мейе функцияларына тәьҫирен тикшереп, тулы тынлыҡта ғына мейенең яҡшыраҡ эшләй алыуын асыҡлаған. Белгестәр әйтеүенсә, көй яңғырап торған саҡта мейе бер юлы бер нисә мәсьәлә башҡара һәм уның когнитив функцияларының һөҙөмтәлелеге кәмей.

■ Саф һауала күберәк йөрөү кешенең интеллектуаль кимәлендә ыңғай сағылыш таба. Былдай һығымтаға Америка Ҡушма Штаттарының Иллинойс штаты университеты нейрохирургтары килгән. Тикшеренеүселәр төркөмө етәксеһе, профессор Арт Крамер фекеренсә, әгәр ҙә кеше аҙнаһына 40 минут ҡына булһа ла йәйәү йөрөһә, уның интеллектуаль мөмкинлектәре күпкә күтәреләсәк. Ғалимдар әйтеүенсә, ошондай йәйәүле сәйәхәттәр ваҡытында кеше төрлө тышҡы ҡуҙғытыусыларға иғтибар итергә мәжбүр була һәм һөҙөмтәлә баш мейеһенең функциональ әүҙемлеге күтәрелә.

■ Кешенең кәйефе яҡшы булғанда ул ғәҙәттәгенән яҡшыраҡ күрә башлай, ти Канаданың Торонто университеты ғалимдары. Тикшеренеү барышында ғалимдар функциональ магнит-резонанс томография ярҙамында баш мейеһенең күреү өсөн яуаплы булған өлөшөнөң кәйефкә бәйле нисек үҙгәреүен асыҡлауға өлгәшә алған. Ғалимдар әйтеүенсә, оптимистар тирә-яҡ донъяны яҡшыраҡ күрә һәм һәр деталгә иғтибар итә.

ФЕКЕР ҠОРО

**Башҡорт милли кейеме дәүләт тарафынан яҡлауға мохтаж. Ошо фекерҙе 11 сентябрҙә, Милли кейем көнөндә, Башҡортостан Республикаһы Милли музейының конференц-залында ойошторолған түңәрәк ҡорҙа сығыш яһаусылар яңғыратты һәм халҡыбыҙҙың ҡәҙерле ҡомартҡыһы, рухи байлығы, күңел донъяһының, тормош-көнкүрешенең туранан-тура сағылышы булған милли кейемебеҙҙе һаҡлау, яҡлау, тергеҙеү һәм популярлаштырыуҙың ысын мәғәнәһендә көнүҙәк мәсьәлә булыуын раҫланы.**



# МИЛЛИ КЕЙЕМГӘ...

## эске ихтыяж етерлек хәҙер

Ҡорҙо Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе **Эльвира Айытҡолова** асты һәм алып барҙы.

- Республика Башлығы Радий Хәбиров тарафынан республикала йылына ике тапҡыр Милли кейем көнө үткәрергә тигән мөһим ҡарар ҡабул ителде. Байрам атай-олатайҙар тарихы һәм мәҙәниәтенә тағы бер тапҡыр мөрәжәғәт итеү, үҫеп килеүсе быуын араһында әхләҡи ҡиммәттәрҙе таратыу мөмкинлеген бирәсәк, тип ышанабыҙ. Шулай уҡ быйыл БР Хөкүмәте һәм Мәҙәниәт министрлығы башланғысы менән беҙҙә "Башҡортостандың матди булмаған мәҙәни мираҫы" тигән яңы Закон ҡабул ителде. Был ҡанун нигеҙендә беҙҙең һәр йыр-көй, бейеү, һәр йола, кейем, музыкаль инструмент, эш һәм донъя көтөү ҡоралдары, ауыҙ-тел ижады өлгөләре - барыһы ла реестрға беркетелә, уларҙы раҫлағанда бөтә тарихи сығанаҡтар, варианттар, фәнни эштәр иҫәпкә алына. Бигерәк тә башҡорт халҡының меңәр йыллыҡ рухи хазинаһын - йыр-моңдарын башҡа яҡҡа тартҡылап йонсотҡан "йылғырҙар" өсөн дә иҫкәртеү булараҡ үҙ көсөнә инә был закон. Был беҙгә шулай уҡ башҡорт халҡының милли кейеме үҙенсәлеген һаҡлап алып ҡалыуға этәргес бирәсәк. Беҙҙең кейемдәрҙе ситтәрҙең үҙләштереүе шулай уҡ ҙур мәсьәлә бит. Бөгөн беҙ был хаҡта ла һөйләшергә тейешбеҙ. Тарихи дәрәҫлектә яҡлар өсөн дәүләт һәм йәмәғәт ойошмалары яғынан ҙур аңлатыу эше алып барылырға тейеш, - тине Эльвира Ринат ҡыҙы.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси үҫеш буйынса идаралыҡ начальнигы вазифаһын башҡарыусы **Гөлләриә Ялсыҡаева** ҡорҙа ҡатнашыусыларҙы сәләмләп:

- Бөгөн Башҡортостанда бик матур көн - Милли кейем байрамы. Мәғлүм булыуынса, был сара артабан республикала ике тапҡыр, апрелдә һәм сентябрҙә үткәреләсәк. Пандемия шарттарында быйыл яҙын саралар онлайн-форматта үтте. Уның сиктәрендә бик күп оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо. Бөгөнгө ҡорҙа иһә башҡорт милли кейеме традицияларын һаҡлау, тергеҙеү буйынса эшләгән йәмәғәтселәр, ғалимдар, этнографтар, фольклорсылар, шулай уҡ башҡорт милли биҙәүестәрен эшләүсе оҫталар ҡатнашыуы, уларҙың фекерҙәрен тыңлау ҡыуаныслы. Һөйләшеүҙең һөҙөмтәһе булыр, тип ышанам. Ә һөҙөмтә, әлбиттә, халҡыбыҙҙа, бигерәк тә йәштәребеҙҙә үҙенең милли традицияларына тоғролоҡ, уны һаҡлауға, тергеҙеүгә ынтылыш, ҡыҙыҡһыныу уятыу. Шуға ла былдай саралар, һөйләшеүҙәр йыш ҡабатланып торорға тейеш, - тине.

Сараға зум-конференция аша онлайн-режимда район-ҡала ҡоролтайҙары, йәмәғәт ойошмалары, тарихи-мәҙәни үҙәк вәкилдәре, сит тарафтарҙа йәшәгән милләттәштәребеҙ ҙә ҡушылды.

Ҡорҙо артабан дауам итеп, Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәт министры **Әминә Шафиҡова** милли костюмдарҙы популярлаштырыу һәм һаҡлау йәһәтенән ведомство алып барған эшмәкәрлек хаҡында һөйләне:

- Быға тиклем милли кейемде беҙ тик сәхнәләрҙә генә күрә инек. Шуға ла "милли кейем" тигәндә беҙ уны сәхнә кейеме булараҡ ҡына күҙ алдына килтерҙек. Ләкин музейҙарҙа, милли кейемгә арналған фәнни эштәрҙә, китаптарҙа беҙ башҡорт милли кейеменең ни тиклем бай һәм төрлө булыуын да күрә йөрөнөк. Беҙҙә барыбер ҙә милли кейем традициялары, ул кейемдәрҙе төп нөсхәлә күрһәтерлек материалдар, китаптар һаҡланған. Уларҙы ҙур түҙемлек һалып өйрәнеүгә, фәнни эшмәкәрлеккә йәштәрҙе йәлеп итергә кәрәк. Ошо йәһәттән мин республикала эшләп килгән ағинәйҙәргә һәм "Мәргән уҡсы"ларға рәхмәт әйтер инем - улар бөгөн башҡорт милли кейемен тергеҙеү, өлгөләрҙе хаталарҙан арындырыу буйынса ҙур эш алып бара.

Милли кейем кейеүгә быға тиклем эске ихтыяж булманы. Хәҙер ул бар - кеше милли кейем кейеп, биҙәүестәр тағып йөрөргә теләй. Төрлө милләт халыҡтарының йыл һайын үткәрелгән Милли кейем парадына дәррәү ҡушылыуы ошо хаҡта ла һөйләй. Быны быйыл республика Башлығы Радий Фәрит улы халыҡ алдына стилләштерелгән башҡорт костюмында сығып күренгәйне, уны башҡа етәкселәр, шулай уҡ беҙҙең мәҙәниәт әһелдәре лә тиҙ генә элеп алды. Ғөмүмән, милли кейемде тергеҙеү, ҡулланылышҡа индереү өсөн ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итеү мөһим. Төп нөсхәләрҙе, ғалимдарҙың хеҙмәттәрен өйрәнеү, милли кейем тегеү буйынса пособиелар булдырыу кәрәк. **Ошо арала милли кейемде һаҡлауға, үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк "Тамға" халыҡ-ара конкурсы иғлан итәбеҙ.** Ни өсөн халыҡ-ара, сөнки сит илдә йәшәгән милләттәштәребеҙ ҙә унда ҡатнашырға теләйәсәк. Был сара "Башҡорт милли кейеме" брендын булдырыу буйынса талаптарға яуап бирәсәк. Һәләтле оҫталарҙы асыҡларға, уларҙы дәртләндерергә, халыҡта милли кейем традицияларын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятырға булышлыҡ итәсәк. Конкурс йыл һайын ойошторолоп, енеүселәр биш номинацияла билдәләнәсәк: "Башҡорт милли кейеме - реконструкция", "Заманса автор кейеме", "Балалар кейеме", "Башҡорттарҙың йолауи байрам кейемдәре", "Башҡорт милли биҙәүестәре, аксессуарҙар". Конкурсҡа 14 декабрҙә, Башҡорт теле көнөндә йомғаҡ яһаласаҡ.

Артабан тарих фәндәре кандидаты, Р. Кузеев исемендәге этнологик тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре **Елена Нечвалода** сығыш яһаны. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеме дөрөҫ тегеләме, кейем тегеү оҫталары милли өлгөләр менән танышмы, яңы кейем теккәндә тарихи фотоларға, документаль сығанаҡтарға таяналармы? Ошо һәм башҡа

**✓ Башҡорт милли кейеме өлгөләрен дә үҙләштереүҙәр күҙәтелә. "Башҡортостандың матди булмаған мәҙәни мираҫы" тигән законға таянып, башҡорт милли кейеме өлгөләрен патентлау тураһында һүҙ башлау ваҡыты етте.**



һорауҙарға яуап табырға ярҙам итте унын сығышы. Шулай уҡ ғалимә башҡорт милли кейемен һаҡлау, өйрәнеү һәм уның хаҡында баҫма хеҙмәттәр булдырыу мөһимлегенә иғтибарҙы йүнәлтте. Унын сығышында милли кейемдең тарихи өлгөләренә ҡарата бәхәс тыумаһын өсөн, уларҙы ике-өс томлыҡ фотоальбомға туплап, теркәп, баҫып сығарырға кәрәк, тигән тәҡдим яңғыраны. "Милли кейемдәрҙең тарихи сығанаҡтарының ҙур өлөшө музейҙарҙа, һүрәттәрҙә һаҡланған. Шулай уҡ уларҙы шәхси ғаилә альбомдарында табырға мөмкин. Мәктәп, ауыл музейҙарында ла осратырға була. Шуға күрә традицион милли кейемде тергеҙеү өсөн республика район-ҡалаларына, Рәсәйҙең башҡа субъекттарындағы этнография, тарих һәм крайҙы өйрәнеү музейҙарындағы өлгөләргә, шәхси коллекцияларҙағы, ғаилә архивтарындағы фотоһүрәттәргә күҙ һалыу мөһим. Был тәңгәлдә сыуаштарға көнләшеп ҡарайым. Улар бөтә локаль төркөмдәрҙе йөрөп сығып, бына тигән альбом сығарҙы. Ваҡытын да, аҡсаһын да йәлләмәнеләр. Беҙгә лә шулай эшләргә була бит. Башҡорт милли кейеме буйынса киҫекмәҫтән өс томлыҡ йыйынтыҡ әҙерләргә тәҡдим итер инем", - тине Елена Евгеньевна.

"Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, "Киске Өфө" гәзите баш мөхәррире **Гөлфиә Янбаева** үҙенең сығышын Милли кейем көнөнөң әһәмиәтен билдәләүҙән башланы.

- Был байрам иғлан ителгәс, күптәрҙә "Ул кәрәкме икән?" тигән һорау тыуҙы. Бик тә кәрәк. Милли кейемебеҙҙең матурлығын күрһәтеү өсөн генә түгел, ә уның әхлаҡи әһәмиәтен баһалау өсөн дә кәрәк. Ниһайәт, гүзәл заттарыбыҙ милли кейем кейеп, сит күҙҙәрҙән ҡаплаулы, яҡлаулы булып була икәнен үҙ иңендә татып ҡараны бит. Ун йыл элек республикала ағинәйҙәр хәрәкәте барлыҡҡа килгәс, беҙ иң беренсе эште милли кейем тегеп кейеүҙән башланыҡ. Тәүҙә теккәндәребеҙ сәхнә кейемдәре өлгөһөндә ине. Артабан музейҙарыбыҙҙағы традицион милли кейем өлгөләре менән танышып, һәр төбәккә, хатта ырыуға хас кейемдәрҙе тергеҙеү эшен башланыҡ. Тәүге мәлдә оҫталыҡ дәрестәре үткәрергә белгестәребеҙ ҙә булмаһа, хәҙер улар төбәктәрҙә етерлек. Китаптар ҙа, фәнни хеҙмәттәр ҙә бар. Шулай ҙа беҙҙә этнографтар эшмәкәрлеген яйға һалыу мәсьәләһе бик киҫкен тора. Тағы бер мәсьәлә бик борсой һәм ул бөгөнгө ҡорҙоң резолюцияһында мотлаҡ урын алырға тейеш: башҡорт милли кейеме өлгөләрен дә үҙләштереүҙәр күҙәтелә. Яңы ҡабул ителгән "Башҡортостандың матди булмаған мәҙәни мираҫы" тигән законға таяныпмы, башҡа юридик нигеҙләмәләр ярҙамындамы, башҡорт милли кейеме өлгөләрен патентлау тураһында һүҙ башлау ваҡыты етте, тип уйлайым, - тине Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы.

Артабан республика Халыҡ ижады үҙәгенең фольклор буйынса баш белгесе Гөлгөнә Баймырҙина башҡорт халыҡ кейеменең төбәк үҙенсәлектәре менән таныштырҙы. "Мәргән уҡсы" хәрәкәте етәксеһе Юлай Ғәлиуллин ир-егеттәр кейеменең тегелеш үҙенсәлектәре тураһында һөйләп, ихтыяж ҙур булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың бесеү өлгөләре булмауын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Милли музей хеҙмәткәре Сәлимә Усманованың башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли өҫ кейеме - елән, ә "Башҡорттарҙың түш биҙәүестәре" китабы авторы Азат Ғариповтың аяҡ кейеме - сарыҡ тураһында һөйләүе шулай уҡ ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Фекер алышыуҙа фольклорсы ғалимә Розалия Солтангәрәева, "Ағиҙел" предприятиеһы генераль директоры Гүзәл Кәримова, "Сәрби" милли кейем тегеү ательеһы директоры Саймә Хәсәнова, Учалы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева, Туймазының "Тамға" ижади берекмәһенән Флорид Вахитов ҡатнашты. Һәр сығышта башҡорт милли кейемдәренең үҙенсәлектәрен һаҡлау, төп нөсхәнән тайпылмау, альбомдар, һүҙлектәр сығарыу тураһында тәҡдимдәр әйтелде.

Түңәрәк ҡор йомғаҡтары буйынса резолюция проекты ҡабул ителде. Унда "Башҡортостандың матди булмаған мәҙәни мираҫы" Законы сиктәрендә традицион башҡорт милли кейемен һаҡлау буйынса программа эшләргә, "Башҡорт халҡының милли кейеме" патентын алыуға әҙерләргә, башҡорт кейеменең төп нөсхәһен тергеҙеү өҫтөндә эшләүҙе, етешһеҙлектәрҙе төҙәтеүҙе дауам итергә, этнография тикшереүҙәре өсөн ижади лаборатория булдырырға, С.В. Шитованың, А.Камалееваның һәм С. И. Руденконың хеҙмәттәрен ҙур тираж менән яңынан баҫтырырға, "Ағиҙел" предприятиеһында милли биҙәүестәр әҙерләү буйынса цех асырға, юғары уҡыу йорттарында башҡорт халҡының этнографияһы менән шөғөлләнгән махсус курс булдырырға тигән пункттар индерелде.

Сара һуңында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ойошторған "Минең милли биҙәүесем" флешмобына йомғаҡ яһалды. Уның сиктәрендә Өфө районы ағинәйе Фәнүзә Аллағолова диплом менән бүләкләнде. Ултырышта ҡатнашҡан һәр кем артабан башҡорт милли кейеме, биҙәүес өлгөләре йәмәғәтселек яғынан ғына түгел, дәүләт тарафынан да яҡлау табыр, тигән өмөт менән таралды.

**Лена БАРЫЕВА.**





*Учалы ағинәйҙәре сарыҡ, ҡаталарын күрһәтте.*



*Шамонино ағинәйҙәре.*



УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 39-сы идея
## Ауыҙың әйткәнен ҡолағың ишетһен

Һөйләгәндә һин үҙеңдең һүҙҙәреңә иғтибар итәһеңме? Әйҙәгеҙ, аҙға ғына туҡталып, һәр әйткән һүҙебеҙҙең әһәмиәте тураһында уйланайыҡ әле.

Күреүегеҙсә, һүҙ - ул ябай билдә йәки символдан күпкә ҙурыраҡ. Ул магнит! Ул үҙе сағылдырған идея менән һуғарылған. Ул ошо идеяның көсө менән йәшәй. Тимәк, үҙенә яңылышыу, кире ҡағыу һәм емереү идеяһын индергән һүҙҙәрҙе даими ҡулланыу һинең аңыңда яңылышыу, кире ҡағыу һәм емереү идеяһын булдыра. Үҙ һүҙҙәребеҙ менән йыш ҡына үҙебеҙ еңергә теләгән шарттарҙы һуғарабыҙ һәм һаҡлап тотабыҙ. Һүҙҙе әйтер алдынан шуны уйларға кәрәк: һинең аңыңды тултырған уйҙар тормошоңдо ла үҙ образдары менән тултыра.

Бөтә кешеләр ҙә сиктән тыш күп һөйләй. Әгәр һүҙҙәреңде өс тар ғына ҡапҡа аша үткәреп, уларҙың урынлымы-түгелме икәнлеген тикшерһәң, күп бәхетһеҙлектәрҙән ҡотолор инең. Беренсеһе: кәрәкме был? Икенсеһе: дөрөҫмө был? Өсөнсөһө: яғымлымы был? Әгәр һин ошо ябай ысулға эйәрһәң, күп һүҙҙәр әйтелмәйенсә ҡалыр. Кәрәкме улар? Дөрөҫмө улар? Яғымлымы улар?

Эргә-тирәңдәгеләр менән конструктив рухта ғына аралаш. Һүҙҙәреңдең аңына төшөнөп, ысын күңелдән, эскерһеҙ һөйлә. Намыҫлы бул. Дуҫыңдың рухын күтәрәм тип, матур һүҙҙәр һөйләп, эстән "Һиңә шул кәрәк ине лә" тип уйларға ярамай.

Ауыҙыбыҙҙан сыҡҡан һүҙҙәрҙең ни тиклем алыҫ сәйәхәт ҡылырын һәм кемдәрҙең ҡолағына барып етерен беҙ аңлап еткермәйбеҙ. Үҙ һүҙҙәреңә һәр ваҡыт ҡолаҡ һалыу тәүҙә ҡыйын кеүек тойолор, әммә тәжрибә туплай барып, уйлап һөйләргә өйрәнерһең.

Арифметиканы нисек өйрәнгәнең хәтереңдәме? Һыҙып ташлау күп проблемаларҙы хәл итеү өсөн тиҙ һәм ябай ысул булыуын асыҡларһың. Тупаҫ иҫкәртеүҙәреңде һыҙып ташла ла уларҙы яғымлылары менән алмаштыр. Башыңа кире уйҙар килгән саҡта һәр ваҡыт уларҙы һыҙып ташла ла, ыңғайҙары менән алмаштыр. Быны тағы, тағы ҡабатла - кәрәк булһа, көнөнә мең тапҡыр. Кисен "Бөгөн мин булдыра алған тиклем матур йәшәнем, уйланым һәм һөйләнем" тип әйтеү үҙеңә бер рәхәтлек килтерер.

Һинең һүҙҙәрең көскә эйә. Ахырҙа һинең һүҙҙәрең - уйҙарыңдың кейеме генә бит, ә уйҙарыңдың сифаты тәжрибәңә тупланғанды ғына билдәләй. Зиһенең пассив хеҙмәтсе ролен башҡара. Ул изгелектең дә, яуызлыҡтың да тәүшарттарын ҡабул итә: зиһенгә барыбер. Һуңынан тәүшарттарҙы уларҙың логик сағылышына еткерә. Уй - ижади эшмәкәрлектә тәүге логик аҙым. Киләһе аҙым - әйтелгән һүҙ. Беҙ даими рәүештә уйлайбыҙ. Уйҙар һүҙҙәргә әйләнһә, уларҙың тормошобоҙға ижади йоғонтоһо көсәйә. Тимәк, уйҙар, һүҙҙәр һәм йәшәү шарттарыбыҙ бер-береһе артынан логик эҙмә-эҙлелектә урынлашҡан. Иҫеңдә тот: уй, һүҙ, ә һуңынан һин йәшәгән шарттар. Был ҡотолғоһоҙ эҙмә-эҙлелек!

Матди донъя закондары буйынса бөтә матдәләр даими үҙгәрә. Беҙ Хаҡлыҡтың эскерһеҙ һүҙҙәрен, ыңғай мәғәнәле, конструктив һүҙҙәрҙе һөйләгәндә үҙ тормошобоҙ өсөн идеаль шарттар булдырабыҙ. Был шарттарҙы тулыһынса файҙалана алмауҙың берҙән-бер сәбәбе - беҙҙең күп ҡаршылыҡлы һүҙҙәр һөйләүебеҙҙә. Ҡул бысҡыһы кеүек, һүҙҙәребеҙ тәүҙә өҫкә күтәрелә, һуңынан аҫҡа төшә: башта конструктив, аҙаҡтан деструктив. Ошо минуттан башлап үҙ һүҙҙәреңде күҙәтергә өйрән - һинең тормошоң өсөн улар бик мөһим!

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 21 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Впотьмах". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Закрытый сезон". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Отец Матвей". [12+]

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 07.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Бабушка". [12+]**
**17.30 "Пофутболим". [12+]**
**18.00 "Бай бакса". [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Брифинг.**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Теге өсәү. [12+]**
**23.30 Х/ф "Услышь меня". [6+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 22 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Впотьмах". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Закрытый сезон". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Отец Матвей". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 22.00, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 23.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сочи". КХЛ.**
**22.30 По сути дела... [12+]**
**23.30 Х/ф "Двое во вселенной". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Ходжи эфэнди женится". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 23 СЕНТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Впотьмах". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Закрытый сезон". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Отец Матвей". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00, 5.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Х/ф "Моя мама". [16+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Счастье". [12+]**
**4.15 "Бай бакса". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 24 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 1.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.40 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.40 Вечерний Ургант. [16+]
0.20 Т/с "Впотьмах". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Закрытый сезон". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Отец Матвей". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Бай бакса". [12+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Биремшә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). КХЛ.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Х/ф "Я хочу видеть". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Сваха". [12+]**
**4.15 Теге өсәү. [12+]**
**4.45 Уфа. Живое. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 25 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 2.45 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.35 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос 60+". Новый сезон. [12+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.30 Д/ф Премьера. "Джим Маршалл: Рок-н-ролл в объективе". [18+]
2.00 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Юморина-2020. [16+]
0.40 Х/ф "Секта". [12+]
4.05 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/с "Невероятная наука". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 21.00 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Уфа. Живое. [12+]**
**23.30 Х/ф "Моя большая испанская семья". [16+]**
**1.45 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**4.00 Автограф. [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.00 "Весело живем!" [12+]**
**5.15 Әлләсе... [12+]**

### 26 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "101 вопрос взрослому". [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.05 Д/ф Премьера. "Миры и войны Сергея Бондарчука". К 100-летию великого режиссера. [12+]
16.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.45 К юбилею Людмилы Максаковой. [16+]
19.00, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 "КВН". Премьер-лига. [16+]
0.25 Я могу! [12+]
1.25 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.30 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Х/ф "Счастье по договору". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.45 Д/ф "Опасный вирус". [12+]
21.20 Х/ф "Мальчик мой". [12+]
1.35 Х/ф "Недотрога". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 19.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30, 4.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00 Строитель. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Витязь" (Московская область). КХЛ.**
**19.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.15 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Искусственный интеллект. Доступ неограничен". [16+]**
**2.00 Спектакль "Пустая колыбель". [12+]**
**4.00 Башкорттар. [6+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

### 27 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

2.50, 6.10 Х/ф "Война и мир". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.10 Х/ф "Соломенная шляпка". [0+]
17.20 Х/ф "Мужики!.." [6+]
19.15 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
22.00 Большое гала-представление к 100-летию Советского цирка. [12+]
0.10 Х/ф Премьера. "Холодная война". [18+]
1.50 Я могу! [12+]
3.10 Модный приговор. [6+]
4.00 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1

4.40, 1.30 Х/ф "Искушение". [12+]
6.00, 3.00 Х/ф "Варенька". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Праздничный концерт.
13.40 Х/ф "Чистая психология". [12+]
17.50 Удивительные люди. Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТеко!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**10.45 Азбука. [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30, 17.00 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Биремшә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**18.30 Школа героев. [6+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [12+]**
**20.30, 5.00 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.45 Х/ф "Лига мечты". [12+]**
**2.45 Спектакль "Кукольный дом". [12+]**

✓ *Был тамашала Миңлеғәли Шайморатов һәм уның кавалерияһының аҫыл егеттәрен тәрбиәләй алған ябай, әммә көслө рухлы халыҡтың йыр-бейеү, ым-ишара аша эскерһеҙ мөнәсәбәттәрҙә ҡоролған ҡәҙимге тормошо сағыла.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Белеүегеҙсә, быйылғы Салауат Юлаев премияһына кандидаттар исемлегендә Сибай дәүләт концерт-театр берекмәһе лә бар. Берекмә был юғары премияға Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына һәм әле яңыраҡ ҡына Рәсәй геройы исеменә лайыҡ булған халҡыбыҙҙың ҡаһарман улы - легендар 112-се Башҡорт атлылары кавалерияһы дивизияһы генералы Миңлеғәли Шайморатовтың яҡты рухына бағышланған "Эйәрле ат беҙ менгәндәр…" театрлаштырылған концерт программаһы өсөн тәҡдим ителде. Программаны әҙерләүселәрҙең дә исемдәре барыбыҙға ла таныш: Фәнил Әсәҙуллин (балетмейстер-ҡуйыусы), Минзилә Ҡотошова (режиссер-ҡуйыусы), Рәмил Туйсин (композитор), Миләүшә Ҡаһарманова (сценарий авторы).**

# ЭЙӘРЛЕ АТ БЕҘ МЕНГӘНДӘР...



Рәсәй геройы исеме бирелгәнгә тиклем үҡ күптәр Миңлеғәли Шайморатовты халыҡ батыры итеп ҡабул итә, таный башлағайны. Быны сәбәптәре ябай, әммә төпкәрәк төшөп, халҡыбыҙҙың тәрбиә нигеҙҙәренә таянып фекер йөрөтһәк, ни өсөн шулай килеп сыҡҡаны аңлатырға була. Башҡорт халҡы электән-электән балаларын, ул-ҡыҙҙарын, ейән-ейәнсәрҙәрен батырҙар өлгөһөнә таянып: "Батыр бул!", "Ҡыйыу һәм ғәҙел бул!" тип үстергән һәм үҫтерә. Халыҡ ижадында ҙур урын алып торған батырҙар тураһында әкиәттәрҙе, риүәйәт-эпостарҙы ғына иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Әгәр ҙә беҙ телебеҙҙе, илебеҙҙе юғалтмаҫҡа, халыҡ булараҡ үҙебеҙҙе һаҡлап ҡалырға теләһәк, тәү сиратта, күңелебеҙҙәге иң нескә, әммә иң көслө рух тойғоһон быуаттар дауамында ниндәй булған, шул дәүмәлдә тоторға тейешбеҙҙер. Ә ундай тойғоно нығытыр өсөн, тәү сиратта, үҙебеҙҙә батырлыҡты тәрбиәләргә кәрәктер. Быны өсөн бөгөнгө яҙыусылар, режиссерҙар, композиторҙар, балетмейстерҙар изгелек һәм ғәҙеллек хаҡына ҡылынған батырлыҡтар тураһында күберәк ижад итергә, "Халҡым!" тип, "Илем!" тип фәҙиз баштарын һалған ысын батырҙарыбыҙҙың һәр береһенең тормошон ентекле өйрәнергә, улар тураһындағы әҫәрҙәрҙе театр, кино сәнғәте аша тулыһынса яҡтыртып, халыҡҡа еткерергә бурыслы. Тап әҙәбиәт һәм сәнғәт аша батырҙарыбыҙҙың йәшәү рәүеше, көслө характер һыҙаттары, әйткән һүҙе юғалмаҫҡа, ә, киреһенсә, фәстереүҙәрһеҙ тулыраҡ һәм асығыраҡ күрһәтелеп барырға тейештер.

Сибай концерт-театр берекмәһе ҡуйған "Эйәрле ат беҙ менгәндәр" тамашаһы ябай тамаша түгел. Унда үрҙә әйтеп үтелгән бурыстар, маҡсаттар тулыһынса үтәлә. Был тамашала үҙенең батыр улы Миңлеғәли Шайморатов һәм уның кавалерияһының аҫыл егеттәрен тәрбиәләй алған ябай, әммә көслө рухлы халыҡтың йыр-бейеү, ым-ишара аша эскерһеҙ мөнәсәбәттәрҙә ҡоролған ҡәҙимге тормошо сағыла. Бында һәр кемдең өлкәнде өлкән тип, кесене кесе тип таныу, бер-береһе менән еңелсә шаяртҡанда ла ихтирам һәм иғтибар тойғоһон юғалтмау, беренә ҡайғы килгәндә, икенсеһе иңен ҡуйыу, бар хәлеңсә терәк булыу кеүек изге ҡанундар өҫтөнлөк ала. Яҡшы хәбәргә, изге сәләмгә өмөт иткән күршеңдең ошо теләген әҙгә генә булһа ла оҙайтыу маҡсатында алдашыу ҙа, һуңынан, аяныслы дөрөҫлөк фаш ителгәс, киҫерелере, ғәфү ителере лә көн кеүек асыҡ...

Миңлеғәли Шайморатов - киң даирәле, ипле, итәғәтле холоҡло шәхес. Уның һалдаттарын ғына түгел, тотош халыҡты әйҙәй алырлыҡ, юл башлап үҙ артынан алып китә алырлыҡ, барыһын да бер тулҡынға көйләй алырлыҡ айырым рухи көскә эйә булыуы ла тамашала асыҡ күренә... Быны өсөн генерал әллә ниндәй тылсым көстәренә мөрәжәғәт итмәй, ә бары тик быуаттар дауамында быуындан-быуынға тапшырыла килгән ата-бабалар аҡылына, аңына таяна.

Үтә лә таныш, үтә лә яҡын ҡараш, ым-ишара, хәрәкәттәргә нигеҙләнгән тамашаны ҡарап ултырған һәр тамашасы бер аҙ ваҡыттан һуң үҙе лә һиҙмәҫтән, йырҙың һүҙҙәрен белмәһә лә, артистарға ҡушылып йырлап, хатта бейеп ултырғанын аңлайҙыр. Ни өсөн шулай килеп сыға? Был театрҙың айырым сихри көсөмө? Бәлки, киреһенсә, театр сәнғәте аша үҙебеҙгә генә хас айырым көстө, рухи көстө, тойомлап алыуыбыҙҙыр, йөрәктәребеҙҙең шул көс тулҡынына эләгеп, шул тулҡынға тибә башлауылыр? Дөрөҫөрәге, был ошо тамашаны ижад иткән ижади коллективтың һәм уның директоры Айбулат Миңлеғәли улы Ҡотошовтың юғары профессиональ кимәле.

Әйтергә кәрәк, Сибай концерт-театр берекмәһе ҡуйған һәр тамашала тамашасы яҡынса ошондайраҡ тойғоно кисереү бәхетен татый. Урал аръяғы райондарында берҙән-бер тип иҫәпләнгән ошо филармония коллективы тарафынан ҡуйылған "Уйнаһын ғына ҡурайым, тынмаһын гармун моңо", "Халҡыбыҙҙы данлар илем бар", "Атлы халыҡ - затлы халыҡ", "Йәшәү һуты бирген ер генәм" һ.б. кеүек программаларының барыһы ла иҫ китмәле әҙәрҙәр һәм маҡтауға, ә "Эйәрле ат беҙ менгәндәр..." тамашаһы, һис шикһеҙ, Салауат Юлаев исемендәге юғары дәүләт премияһына лайыҡ.

**Рәмилә ТОРОМТАЕВА,**
**РФ һәм БР Яҙыусылар союзы ағзаһы.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

## ВАКЦИНАЦИЯ

Рәсәй Федерацияһының Һаулыҡ һаҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, илдә коронавирус инфекцияһынан дөйөм вакцинациялау ноябрҙә башланасаҡ. 11 августа яңы "Спутник V" препараты теркәлеү үтте. Бер нисә ил Рәсәйгә заказдар биргән дә инде, шул уҡ ваҡытта уның һөҙөмтәлелегенә һәм хәүефһеҙлегенә шик белдергән илдәр ҙа бар. Тәү сиратта медицина хеҙмәткәрҙәре һәм уҡытыусылар прививка эшләтәсәк, әммә был ғәмәл ирекле. Шул уҡ ваҡытта күҙалланған 40 ирекмәндең 2,5 меңе вакцинаны һынап ҡарау төркөмөнә йыйылған да инде. РФ һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко белдереүенсә, әлеге ваҡытта тағы бер нисә вакцина клиник һынау һәм теркәлеү үтә. Яңы вакцина тураһында ил Президенты Владимир Путин да хәбәр итте һәм уның COVID-19-ға ҡарата тотороҡло иммунитет барлыҡҡа килтереүен, кире эҙемтәләре булмауын белдерҙе. Әйткәндәй, уның ҡыҙҙарының береһе тәүгеләрҙән булып ошо вакцинаны үҙендә һынап ҡараны.

## КОЛЛЕКТИВ ИММУНИТЕТ

Коллектив иммунитеттың 20 процентҡа етеүе хаҡында Роспотребнадзор хәбәр итә. Белгестәр былдай һығымтаға килгәнгә тиклем 26 субъекта 72 мең самаһы кешене тикшергән. "Коллектив иммунитеттың юғары кимәле мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа (бер йәштән алты йәшкә тиклем) һәм иртә мәктәп йәшендәгеләрҙә (7-13 йәш) күҙәтелә; был йәш төркөмдәрендә күрһәткестәр төбәктәрҙәге популяцион иммунитет кимәленән 1,3 - 2,1 тапҡырға артығыраҡ", - тип хәбәр итә ведомство. Һөнәри структурала халыҡ араһында иң юғары иммунитет һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәрендә күҙәтелә. Әле тикшеренеүҙәрҙең икенсе этабы башланды һәм ул Санкт-Петербург, Ленинград, Төмән өлкәләре, Хабаровск крайында үтәсәк, артабан башҡа төбәктәргә тараласаҡ. Әйткәндәй, июль урталарында Роспотребнадзор башлығы Анна Попова Рәсәйҙә коронавирусҡа популяцион иммунитет 26 процент, тип белдергәйне. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығы белдереүенсә, республикала был күрһәткес 10 процент тәшкил итә. Мәғлүм булыуынса, сир тукталһын өсөн коллектив иммунитет кәмендә 30 процент булырға тейеш.

## ТАТЛЫ СИРМЕ?

Иммунологтар шәкәр диабетын булдырмауҙың яңы ысулын асҡан. Белгестәр 1-се төр шәкәр сирендә күҙәнәктәрҙең үлеүенә вегетатив нерв системаһы сәбәп булыуы мөмкин икәнен асыҡлаған. Кимереүселәрҙә үткәрелгән тәжрибә күрһәтеүенсә, симпатик нервынан ашҡаҙан аҫты биҙенә ебәрелгән нервы сигналдарын блоклау диабет үҫешен туҡтата ала. Мәғлүм булыуынса, беренсе төр диабетта организмдың иммун күҙәнәктәре ашҡаҙан аҫты биҙенең инсулин эшләп сығарған бета-күҙәнәктәре һөжүменә дусар була. Быға тиклем ғалимдар был процестың нисек барлыҡҡа килеүен белмәгән. 1-се төр диабеттың экологик һәм генетик хәүеф факторҙары булһа ла, ул, ғәҙәттә, осраҡлы барлыҡҡа килә. Ғалимдар күҙәнәктәр үлеүен ҡан әйләнеше боҙолоуға бәйләй ине. Хәҙер улар был тайпылышты нервы импульстарының ашҡаҙан аҫты биҙенең иммун күҙәнәктәренә тәьҫире аша тикшерә. Кимереүселәрҙә үткәрелгән тәжрибә ошо версияны раҫлағас, артабан улар тәжрибәне кешеләрҙә үткәрергә ниәтләй, әммә тәүҙә беренсе төр диабет башланыу хәүефе юғары булған кешеләрҙе асыҡларға өйрәнергә кәрәк.

## АЛЬЦГЕЙМЕР

Альцгеймер сире - нервылар системаһының нейрондарҙың яйлап зарарланыуына һәм мейе тукымаларының үлеүенә килтергән хроник ауырыу. Уны тыуҙырыу механизмдары тулыһынса асыҡланмаған. Шулай ҙа, ғалимдар белдереүенсә, хәүеф төркөмөндә булыусылар башҡалар менән сағыштырғанда киңлекте насар тоя. Быны өсөн мейенең сикә өлөшөндә урынлашҡан сетка ячейкалары яуап бирә. Альцгеймер ауырыуында тәү сиратта улар зарарлана.Киңлектә кинлектә йүнәлеш табыуы ауыр булған кешеләрҙе күҙәтеү һәм тикшереү сирҙе иртә стадияла асыҡларға ярҙам итәсәк, тип иҫәпләй белгестәр.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Сентябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (4) дүшәмбе | 5:32 | 7:02 | 13:30 | 17:45 | 19:15 | 20:45 |
| 22 (5) шишәмбе | 5:34 | 7:04 | 13:30 | 17:42 | 19:12 | 20:42 |
| 23 (6) шаршамбы | 5:35 | 7:05 | 13:30 | 17:40 | 19:10 | 20:40 |
| 24 (7) кесе йома | 5:37 | 7:07 | 13:30 | 17:37 | 19:07 | 20:37 |
| 25 (8) йома | 5:39 | 7:09 | 13:30 | 17:35 | 19:05 | 20:35 |
| 26 (9) шәмбе | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 17:32 | 19:02 | 20:32 |
| 27 (10) йәкшәмбе | 5:43 | 7:13 | 13:30 | 17:29 | 18:59 | 20:29 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

## ӨС ҺЫНЫЛЫШ



Кеше ғүмеренең тәүге һынылыш мәле 45 йәшкә тура килә. Был ваҡытта, ҡағиҙә булараҡ, кеше репродуктив функцияларын юғалта башлай. Киләһе һынылыш - күҙәнәктәр бүленеүе һәм туҡымаларҙың регенерацияһы әкренәйгән (был тормош өсөн кәрәкле функцияларға ла ҡағыла) 60 йәш. Ошо процесс һөҙөмтәһендә сәләмәтлек менән проблемалар тыуыуы, уртаса алғанда өс самаһы хроник сир барлыҡҡа килеүе мөмкин. Өсөнсө һынылыш мәле 75 йәштә көтөлә. Тап ошо ваҡытта һаҡланыу барьерҙары юғала, был хатта иң ныҡлы ағзалар, шул иҫәптән баш мейеһенә лә ҡағыла. Ләкин төшөнкөлөккә бирелергә ярамай, геронтолог, Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, биология фәндәре докторы Алексей Москалев белдереүенсә, һүҙ уртаса һандар тураһында бара, ә күп осраҡта барыһы ла кешенең тормош рәүешенә бәйле.

САНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ЯМҒЫР ҠАМАСАУЛАМАНЫ

**Мәҙәни сараларҙы һағынған баш ҡала халҡы өсөн ошо көндәрҙә уҙғарылған "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале көтөлмәгән байрам бүләк итте. Бишенсе тапҡыр ойошторолған был ҙур сара быйыл ни бары ике көнгә генә тамашасылар йыйыуға ҡарамаҫтан, уны ҡарарға барлығы 35 мең тирәһе кеше килде, ә Башҡортостан юлдаш телевидениеһы аша күрһәтелгән тура эфирҙы тағы ла күберәк кеше тамаша ҡылған.**



Коронавирус таралыу ҡурҡынысына бәйле сикләүҙәр йомшартылғандан һуң тәүге масштаблы сара булғанға күрә, ойоштороусылар "Евразия йөрәге"н ике көндә уҙғарырға ҡарар итеүҙән тыш, унда ҡатнашыусы ижади коллективтар һанын да ҡыҫҡартты. Беренсе көндә тамашасылар Милли кейем байрамында ҡатнашты, "Ufa-KuraiFest", "Этнотөн" һәм Надежда Бабкинаның Бөтә Рәсәй фестиваль-марафоны сиктәрендәге сығыштарҙы ҡараны. Әйтергә кәрәк, быға тиклем Башҡортостанда йәшәгән төрлө милләт вәкилдәрен, иң күбе башҡорттарҙы, әлбиттә, йәлеп иткән Милли кейем байрамының быйыл масштабы ла, формаһы ла заман талаптарына ярашлы үҙгәрештәр кисерҙе. Күптәр уға интернетта социаль селтәрҙәр аша ғына ҡушылды, ә фестиваль сәхнәһе тирәләй "Беҙ бергә" тип исемләнгән әйлән-бәйләндә республиканың фольклор коллективтары, театрҙары, милли кейем тегеүсе оҫталар башҡорт, урыҫ, мари, сыуаш, удмурт, мордва, татар бейеүҙәрен башҡарҙы. Артабан Рәсәйҙең халыҡ артисы Надежда Бабкина етәкселегендәге "Урыҫ йыры" Мәскәү дәүләт академия театры дәртле йырҙарын яңғыратты.

Башҡорт халыҡ йыр-моңон һөйөүсе тамашасыларға "Ufa-KuraiFest" сиктәрендә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ҡурайсылары ансамбле, Линар Дәүләтбаев етәкселегендәге БР Халыҡ инструменттары милли ансамбле, "Йатаған" һәм "Арғымаҡ" төркөмдәре, "Бишбармаҡ" оркестры, Азат Биксурин, Алтынай Вәлитов, Арыҫлан Оморҙаҡов, Альберт Исмаил ҡатнашлығындағы концерт программаһы тәҡдим ителде. Ә бына "Этнотөн" сиктәрендә Удмурт Республикаһының "Бурановские бабушки" музыкаль фольклор төркөмө, Тыва Республикаһының "Khoomei beat" этно-поп-рок төркөмө, "Zainetdin" этно-шоу проекты һәм "Пелагея" этнофолк төркөмө ижады яңғыраны. Журналистар менән әңгәмәһе ваҡытында йырсы Пелагея был фестиваль тураһында яҡшы хәбәрҙәр булыуы һәм саҡырылыуҙы шатланып ҡабул итеүен әйтте. "Күңелем хистәргә тулышып килдем. Сөнки карантиндан һуң тәүге тапҡыр сәхнәгә күтәреләм, март айында уҙғарған онлайн концерттарҙан тыш, тамашасыларға ижадыбыҙҙы бүләк иткән юҡ ине әле. Ҡурсаланыу осоронда 18 яңы йүнәлеш буйынса үҙаллы үҫештем, төрлө оҫталыҡ дәрестәре үттем һәм күп ваҡытымды ғаиләмә, иң яҡын кешеләремә бүлдем. Бөгөн был күңелдәрҙе йылытырлыҡ иҫ киткес сарала ҡатнашыуыма шатмын", - тип тәьҫораттары менән бүлеште йырсы.

"Евразия йөрәге" халыҡ-ара фестиваленең тәүге көнө халыҡтар ижадына бағышланһа, 12 сентябрҙәге концерт программаһы Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналды һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Асҡар Абдразаҡов, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының Олег Ҡасимов етәкселегендәге Эстрада-джаз оркестры, опера йырсыһы Любовь Казарновская, билдәле музыкант Петр Дранга һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы Олег Газманов сығыштарынан торҙо. Әйтергә кәрәк, фестиваль үткән көндәрҙә баш ҡала туктамай тиерлек яуған ямғыр ҙа "Торатау" конгресс-холы эргәһендәге амфитеатрҙа йыйылып, моңға сорһалған күңелдәргә берләшергә ҡамасау була алманы. Йөрәктәр бөркҡән йылылыҡ көндәр һыуығын еңеп, республикабыҙҙың татыу халҡына матур ял көндәре бүләк итте.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

# КӘРИМ ХӘКИМОВҠА АРНАЛА

**Башҡортостанда Совет иленең иң беренсе дипломаттарының береһе, яҡташыбыҙ Кәрим Хәкимов тураһында комикс донъя күрәсәк. Ул республика Башлығының грантына Китапханалар ассоциацияһы тарафынан бойомға ашырыла.**

Өс мең даналыҡ комикс башҡорт һәм урыҫ телдәрендә нәшер ителә һәм республика китапханаларына таратыласаҡ. Авторҙары уны ғәрәп һәм инглиз телдәренә лә тәржемә итергә ниәтләнә. Проект менән киң йәмәғәтселек ноябрь айында таныша аласаҡ, был Кәрим Хәкимовтың юбилейына тура килтереп ойоштороласаҡ. "Беҙ Сәғүд Ғәрәбстанынан дуҫтарыбыҙға баҫма вариантты бүләк итергә вәғәҙә бирҙек. Комикстың электрон вариантын улар күрҙе. Хәбәр итеүҙәренсә, ил хакимы ейәнсәре менән комиксты ҡыҙыҡһынып ҡараған һәм оҡшатҡан", - ти проект продюсеры, билдәле карикатурасы рәссам Камил Бузыҡаев. Шулай уҡ ул атаҡлы дипломат тураһында төшөрөләсәк фильмдың яҙмышы тураһында ла һөйләне, әлеге көндә уның сценарийы Сит ил эштәре министрлығы тарафынан раҫланған. "Беҙ Рәсәй Президентына күрһәтеү өсөн тизер төшөрҙөк. Ул да идеябыҙҙы хуплаһа, фильмды төшөрөүҙә яңы мөмкинлектәр асыласаҡ. Әлегә коронавирусҡа бәйле барлыҡ эштәрҙе туҡтатырға тура килде, Сәғүд Ғәрәбстанында ла сиктәр асылыуын көтәләр. Беҙ апрель айында уҡ батша ғаиләһе ағзалары менән осрашырға тейеш инек. Көтөп ҡалабыҙ", - тине Камил Бузыҡаев. Был тарихи документаль фильм Бөйөк Британияның Сит ил эштәре министрлығы Кәрим Хәкимовтың биографияһын өйрәнеүсе Владислав Йосоповҡа тапшырған уникаль документтарға таянып төшөрөләсәк.

*БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК*

# БЕЛДЕК - ОҪТА

**Башлансығағас** *(урта)*, **баштандырыҡ** *(әй)*, **баштандығағас** *(салйоғот)*, **баштансыҡ** *(мейәс, әй)*, **башлантырыҡ** *(ҡаризел)* - палочка, с петлями основы, которая прикрепляется к пришве или входит в неё (в домашнем ткачестве)
**Башлыҡ** 1) шапка (обычно лёгкая тканевая или вязаная) 2) капюшон; башлык
**Беҙ** - шило
**Иттәү беҙе** *(ҡыҙыл, мейәс)* - шило для шитья шкуры
**Йыуан беҙ** - толстое шило
**Күҙлә беҙ** *(һаҡмар)*, **ҡамыт беҙе** - хомутное шило
**Бейәләй** - рукавицы, варежки
**Йорон бейәләй** - меховые руковицы
**Йөн бейәләй, эс бейәләй** *(урта)* - шерстяные варежки
**Күн бейәләй** - кожаные рукавицы
**Тире бейәләй** - меховые руковицы
**Тыш бейәләй** - руковицы
**Белдек** *(ғәйнә)* оҫта
**Белағагасы** *(әй)*, **белағагас** *(ғәйнә)* - стержень дуплянки.
**Беләҙек** (дим) - манжета
**Бер гара** *(көнсығыш)* - длина нити, обмотанной 4 раза вокруг мотовила (мера длины)
**Берсәк-һәрсәк** - лоскутный
**Бесемғата** *(урта)* - женская обувь без каблука с кожаными головками и холщёвыми голенищами, украшенными полосками. **Бесемнеғата, бесмә ғата**
**Бесемнәү** *(урта)* - пришивать к обуви тканевый верх
**Бесеү** - кроить, кройка
**Бесеүсе** - закройщик, закройщица
**Бесәй тәпәйе** *(һаҡмар)* - "кошачья лапа" (узор на вязаном платке)
**Бетеүсә** *(урта)* - 1) аппликация из треугольных лоскутков 2) ҡорама

**Рәмилә КӘРИМОВА.**
**"Башҡортса-урыҫса туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре терминдары һүҙлеге" китабынан.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИЛЕН БЕЛМӘГӘН - БЕЛЕКҺЕҘ,

## нәҫелен белмәгән - намыҫһыҙ

Яу килә, тип, аҙығыңды бөтөрмә, ил кусә, тип, утыңды һүндермә.
**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәшлекте белдекле булғаны өсөн тиргәйҙәр, йәнәһе, донъя унан башланған. Ләкин ҡартлыҡ та донъя уның менән бергә бөтә, тип уйлай бит.
**(Кристиан Геббель).**

Йәшлек белгән булһа икән! Ҡартлыҡ булдыра алған булһа икән!
**(Анри Эстьен).**

Үҙенең өнһөҙлөгө менән минең фекерләүҙәремде бүлдергән әңгәмәселәрҙе йәнем һөймәй.
**(Лешек Кумор).**

Ахмаҡ та өнһөҙ саҡта аҡыллы булып күренә ала.
**(Халыҡ мәҡәле).**

Өнһөҙ кеше бик һирәк яңылыша, унда ла өндәшкән саҡта.
**(Владислав Гжещик).**

Ҡурҡыу кешене ҡыйыуыраҡ итә.
**(Латин халыҡ мәҡәле).**

Бөтә ирҙәр ҙә бер төрлө, тик... эш һаҡтары ғына төрлөсә.
**(М. Аршевский).**

Ни тиклем нығышмалы алға барһағыҙ, шул тиклем нығыраҡ контролдә тотоласаҡһығыҙ.
**(Джеральд Арпино).**

Өмөтләнеп өйләнәләр, вәғәҙәләргә алданып кейәүгә сығалар.
**(Василий Ключевский).**

Әгәр ҙә һеҙҙе барыһы ла таныуын теләһәгеҙ - ауылда йәшәгеҙ, ә инде һеҙҙе берәү ҙә танымаһын тиһәгеҙ - ҡалала йәшәгеҙ.
**(Чарльз Колтон).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Аллаһы Тәғәлә кешене барлыҡҡа килтергәндән һуң, уны яһаған материал - балсыҡ артып ҡала.**
**- Ошо артып ҡалған балсыҡтан тағы нимә яһарға һуң һиңә? - тип һорай Аллаһ кешенән.**
**- Бәхет, бәхет яһап бир! - тип шатланып ҡысҡырған кеше.**
**Аллаһ бер ни ҙә өндәшмәйенсә генә ҡалған балсыҡты кешенең ҡулына тоттороп киткән... "**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23
**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3007
Заказ - 754/09